

# ҠӨРЬӘН СЕРҘӘРЕ ДОНЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ

ФАРУҠ КАНГЕР

ИЗДАТЕЛЬСТВО ЭРКАМ

# ҠӨРЬӘН СЕРҘӘРЕ ДОНЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ

ФАРУҠ КАНГЕР

ИТАНБУЛ - 2022

ИЗДАТЕЛЬСТВО
ЭРКАМ

**ҠӨРЬӘН СЕРҘӘРЕ ДОНЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ**


**Автор** : **Фаруҡ Кангер**
**Тәржемәсе** : **Әҙибә Ғәҙел**
**Редактор** : **Айҙар Ғәййәр**
**Дизайн** : **Расим Шакиров**

**«Kur'an'ın Sırlar Âlemine Yolculuk»** китабынан тәржемә ителде
Faruk Kanger / İstanbul - 2012

**ISBN** : ***********

**Издательство Эркам**
İkitelli Organize Sanayi Bölgesi Mahallesi,
Haseyad 1. Kısım, No: 60/3-C  Başakşehir, Стамбул / Турция

**Тел:** (90-212) 671-07 00 pbx
**Факс:** (90-212) 671-07 48
**Электронная почта:** info@islamicpublishing.org
**Веб-сайт:** www.islamicpublishing.org


Все права защищены.

# ИНЕШ ҺҮҘ

Өләсәһенә йәйге каникулға ауылға килгән ейән... Йәйге эҫе көндә ҡапыл пәйҙә булған, үҙенең яҡты күңеле менән күптән түгел бәҡыйлыҡҡа күскән олатаһын хәтерләткән сәйер кеше... Һәм бынан һуң булып үткән ғәжәйеп ваҡиғалар...

Был кеше бер гүзәл Китаптағы сикһеҙ ғилем һәм хикмәт донъяһына, әйтерһең дә, йәшерен ишекте асты.

Бер китап бынан йөҙҙәрсә йыл элек булған хәлдәр тураһында аныҡ һәм дөрөҫ мәғлүмәт бирә аламы? Ниндәй ҡөҙрәт менән, ул төшөрөлөп, йөҙҙәрсә йыл үткәс асыласаҡ фәнни ғилемдәр тупланған унда? Ниндәй ғәжәйеп китап һуң ул? Ул Китап – Бөйөк Ҡөрьән! Кемгә аса Ҡөрьән үҙенең серҙәрен? Уның хәҡиҡи мәғәнәһен кем аңлай? Иң күренекле ғалимдар ҙа бит Ҡөрьән хәҡиҡәттәре алдында баҙап ҡалған! Боронғо замандарҙа ниндәй ваҡиғалар булған? Хәҙер ниндәй ваҡиғалар бара? Йөҙәр йылдан һуң ниндәй ваҡиғалар буласаҡ? Барса был һорауҙарға яуаптарҙы белгегеҙ килһә, ошо әҫәрҙе алып уҡығыҙ һәм уның геройҙары менән Ҡөрьән серҙәре донъяһына ғәжәйеп сәйәхәт ҡылығыҙ!

**Ғинуар 2012 - Ускудар**
**Фаруҡ Кангер**




# АУЫР ҺОРАУҘАР

Искәндәр йылға буйындағы бәләкәй генә ҡалала атаһы, әсәһе һәм Айтуған исемле ҡустыһы менән йәшәй. Мәктәптә дәрестәр тамамланды, көтөп алынған йәйге каникулдар етте. Уны ауылда, өләсәһе янында үткәрәсә-



ге хаҡында алдан уҡ килешеп ҡуйғайнылар. Әсәһенең атаһы Кәрим ике йыл элек йөрәк өйәнәгенән көтмәгәндә донъя ҡуйғас, Гөлбаныу өләсәһе дәү мейесле, семәрле өй йыһаздары, ҡулдан һуғылған балаҫтары, сер тулы сарҙағы булған ҙур йортонда япа-яңғыҙ тороп ҡалды... Янында ейәне булыуы уны ҡыуандырҙы, бер ни тиклем һағышын баҫты...

Көн эҫе ине. Төш етеүгә ауыл урамдары бушап ҡалды, хатта ҡойма янында гел ҡаҙынып йөрөгән өләсәйҙең тауыҡтары ла ҡарағат ҡыуаҡтары аҫтына боҫто, ерән бесәй Мәрҙән дә тупһа аҫтына һалҡынға инеп ятты. Искәндәр, ҡәләмдәр, альбом, кәрәкле шундай ваҡ-төйәк алыр өсөн, күләгәнән генә барырға тырышып, кибеткә йүнәлде. Әйберҙәрен алып сыҡҡас, елкәһенә ҡулын һалып, кемдеңдер йомшаҡ ҡына итеп сәсенән һыйпағанын тойҙо.

Малай шул мәлдә олатаһы Кәримде иҫенә төшөрҙө, ул да йомшаҡ ҡына итеп елкәһенә ҡулын һалып яратып ала торғайны. Искәндәр башын күтәрҙе һәм Хикмәт бабаһының аҡ һаҡал менән уратып алынған йылмайған йөҙөн күрҙе.

– Әссәләму ғәләйкүм[1], Искәндәр!

– Үә ғәләйкүм әссәләм, Хикмәт бабай.

– Мин һине ҡурҡыттыммы әллә?

– Юҡ, юҡ, тик...

Олатаһы ла шулай башынан һыйпай торғайны, тик ул быны әйтә алманы һәм, уңайһыҙланып, ергә текәлде. Хикмәт бабаһы, уның уйын аңлағандай, былай тине:

– Олатайың ифрат шәп кеше ине. Бик аҡыллы, ярҙамсыл, киң күңелле булды. Һәйбәт күрше лә һәм һәйбәт дуҫ та ине. Беҙ уның менән күп һынауҙар аша үттек, күп аралаштыҡ. Аллаһ уға мәрхәмәтле булһын инде, Йәннәте менән бүләкләһен.

Искәндәр һаман ергә текәлеп тора бирҙе. Бер аҙ тын торғас, Хикмәт бабаһы дауам итте:

– Вафатынан алда һөйләшеп ултырғанда, әйтерһең дә, оҙаҡламай китерен һиҙгән кеүек әйтте: «Аллаға шөкөр, ул миңә һинең кеүек аҡыллы күршене бирҙе. Минең улдарым юҡ, шуға күрә Искәндәр ейәнемдең хәҡиҡәткә алып барыусы, илһам биреүсе, хәйерле ғүмер кисерергә мөмкинлек биреүсе дини ғилемгә эйә булыуын бик тә теләр инем. Әҙерәк үҫә төшһә, һинең менән аралашыуҙан күпме файҙа алыр ине, дуҫҡайым Хикмәт...» Һин әле нимә менән шөғөлләнәһең, Искәндәр?

– Ошо йәй мин Ҡөрьәнде тулыһынса уҡып сығырға теләйем.

1. «Әссәләму ғәләйкүм!» – «Үә ғәләйкүм әссәләм!» – Мосолмандарҙың бер-береһен сәләмләүе. Ғәрәпсәнән һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә: «Именлек һеҙгә!» – «Һәм һеҙгә лә именлек!» тигәнде аңлата».

– Бына нисек! Аллаға шөкөр, мин бик шат, – тип аптырап ҡуйҙы Хикмәт бабаһы. – Афарин, Искәндәр! Тимәк, һин Ҡөрьән уҡыу һәм уның мәғәнәһенә төшөнөү тәмен белгәнһең. Бәлки, һин үҙең белгәндәрҙән берәй нәмә һөйләрһең?

Хикмәт бабаһының мәрхәмәтлелеге Искәндәрҙең ятһыныуын юҡҡа сығарҙы, һәм ул, йылмайып, асылып китте:

– Тәржемәләрен уҡыһам да, мәғәнәләрен аңламаған аяттар[2], бар, әлбиттә. Һеҙ миңә уларҙы аңлата алмаҫһығыҙмы икән? Минең яуап таба алмаған бик күп һорауҙарым бар!



– Әлбиттә, улым! Иртәгә киске биштә минең баҡсаға кил. Беҙ ул турала һөйләшербеҙ.

Осрашырға килешеп, улар хушлашты.

Хикмәт бабаһы Кәрим олатайҙың күршеһе ине, ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡанда, Искәндәр уны йыш осрата торғайны. Әммә бөгөнгө осрашыу үҙен-

2. Аят – Изге Ҡөрьән «сүрә» тип аталған 114 бүлектән тора. Һәр «сүрә» «аяттарға» бүленә, аят «билдә» тигән мәғәнәне аңлата. Аяттар бер йәки бер нисә һөйләмдән тора.

сәлекле булды, ул, әйтерһең дә, Кәрим олатаһының һуңғы теләге буйынса булды.

Искәндәр өйгә ҡыуанып йүгереп килеп инде. Бөтә өйгә тәмле еҫ таралған. Кеүәҫ ашына нәҙек кенә итеп ҡыяр турап торған өләсәһе күҙлек өҫтөнән уға йылмайып ҡараны:

– Һинең бәхетле йөҙөң, улыҡайым, ниндәйҙер яҡшы хәбәр тураһында һөйләй!

Искәндәр өләсәһенә Хикмәт бабаһы менән булған осрашыу һәм уны үҙенә саҡырыуы тураһында һөйләне.

– Әлбиттә, улым, Хикмәт бабайыңа бар, аралаш. Ул бик аҡыллы, игелекле кеше. Һис шикһеҙ, ул һинең бөтә һорауҙарыңа ла яуап бирәсәк һәм һине яҡшыға өйрәтәсәк... Ә хәҙер бар, ҡулыңды йыу, кеүәҫ ашы һәм айран өҫтәлдә! – тине өләсәһе.

Төштән һуң электричка менән көтмәгәндә ҡаланан, бәләкәй Айтуғанды алып, әсәһе килеп етте. Баҡтиһәң, һыу сәсәге арҡаһында, ул тәрбиәсе булып эшләгән балалар баҡсаһын бер аҙнаға карантинға япҡандар икән. Шулай итеп, әсәһенә һәм ошо уҡ баҡсаға йөрөгән Айтуғанға ял итеү мөмкинлеге асылған. Һәм улар, ваҡытты әрәм итмәйенсә, ауылға барырға булғандар. Улар килеп төшкәс, өләсәйҙең тыныс йорто шау-шыу, хәрәкәт, шат тауыштар, күстәнәстәр һалынған тоҡсайҙарҙың ҡыштырлауы менән тулды.

Киске ашҡа табынға йыйылғас, Искәндәрҙең Хикмәт бабаһы менән осрашыуы хаҡында йәнә һүҙ ҡуҙғалды. Өләсәһенең йөҙө ҡапыл һағышланды һәм ул, ауыр һулап: «Бәлеште ҡарайым әле», - тигән булып, аш бүлмәһенә йүнәлде. Әсәһе Искәндәргә һаҡ ҡына шыбырланы:

– Өләсәйең беҙгә күҙ йәшен күрһәтергә теләмәй. Улар Кәрим олатайың менән оҙаҡ һәм бәхетле йәшәнеләр. Ул уның өсөн күп доға ҡыла.

Күптән түгел булып үткән ваҡиғаларҙы иҫләп, өҫтәп ҡуйҙы:

– Һинең олатайың, минең атайым, Хикмәт бабай менән бик дуҫ булдылар, улар, онотолоп, оҙаҡ гәпләшә торғайнылар. Шул әңгәмәләр ваҡытында ишеткән нәсихәттәрҙе аҙаҡ атайым беҙгә һөйләй торғайны. Тормош көткәндә, ул һәр ваҡыт алған ғилеменә ярашлы йәшәргә тырышты.

Белеп ҡуй, улым, Хикмәт бабайыңдың нәсихәттәре бик ҡиммәт! Ул әйткәнде иғтибар менән тыңла һәм ул өйрәткәнсә ғәмәл ҡыл, сөнки ул хәҡиҡи ғилемдәр һиңә ҙур файҙа килтерәсәк. Уның кеүек кешеләр – затлы, һайлам заттар. Ул яңғыҙ ҡарттар, етемдәр, ауыр хәлгә ҡалғандар хаҡында хәстәрлек күрә. Уның әхлағы – пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм әхлағының сағылышы. Иҫ киткес изге күңелле кеше ул. Кәрим олатайың донъя ҡуйғас, беҙ ни эшләргә лә белмәнек. Хикмәт бабайың беҙгә ярҙамға килде, беҙҙе йыуатты, ҡайғыбыҙҙы уртаҡлашты, йыназа менән бәйле бөтә мәшәҡәттәрҙе үҙ өҫтөнә алды. Беҙ бик рәхмәтлебеҙ уға...

### Тәүге һабаҡ

Сәғәт теүәл биштә Искәндәр күршеләренең баҡсаһына инде. Хикмәт бабаһы алмағас төбөндәге ағас өҫтәл артында Ҡөрьән уҡып ултыра ине. Искәндәрҙе күргәс, башлаған аятын уҡып бөттө лә китабын ябып ҡуйҙы.

– Әссәләму ғәләйкум, Хикмәт бабай!

– Үә ғәләйкүму сәләм, улым, хуш килдең! Үт, эргәмә ултыр. Ҡулыңдағы дәфтәрҙә, моғайын, ауыр һорауҙар яҙылғандыр?

– Мин мәғәнәләрен аңларға теләгән аяттарҙы яҙғайным. Һәм һеҙҙән һорарға уйлаған һорауҙар ҙа бар унда.

Хикмәт бабай ҡулына дәфтәрҙе алды һәм уның яҙғандарын уҡыны:

**«Ул күктәрҙе һәм Ерҙе юҡтан бар итереүсе. Берәй нәмә барлыҡҡа килтерергә теләһә, Ул “Бар бул!”, - ти. Һәм Ул теләгән нәмә шунда уҡ бар була»** («әл-Баҡара» сүрәһе, 2/117).

Искәндәр уңайһыҙланып ҡына былай тине:

– Бер нәмә лә юҡтан бар булмай һәм эҙһеҙ юҡҡа сыҡмай, тип өйрәтәләр беҙҙе мәктәптә. Донъяла бөтә нәмә үҙгәреүсән һәм төрлө формала булған материянан тора. Иң тәүге йән эйәһе, хайуандар һәм кеше «юҡтан бар» була алмай! Шулай итеп, бар ҡылынмаған, ә осраҡлы үҙгәрештәр арҡаһында маймылдан барлыҡҡа килгән. Тимәк, кешеләр ҡасандыр маймыл булған – беҙгә мәктәптә шулай аңлаталар. Был турала белгәс, дуҫтарым менән беҙгә көлкө булып китте. Беҙ аптыраныҡ, әммә уҡытыусының һүҙҙәрен инҡар итә алманыҡ!



Хикмәт ағай йылмайып ҡуйҙы:

– Күрәһеңме, алдыбыҙҙа өҫтәл тора. Әйтәйек, кемдер берәү һиңә шулай тип әйтте ти: «Был өҫтәл үҙенән-үҙе барлыҡҡа килгән. Бер көндө урманда ағас ауған. Ул ауған саҡта, ел уны таҡтаға ярған. Аҙаҡ улар, кәрәкле рәүеш алып, үҙҙәренән-үҙҙәре ҡаҙаҡ менән беркетелгән. Бесәй һарайҙағы буяуҙар торған кәштәгә менгән һәм бер банканы ауҙарған. Был банка, тәкмәсеп, өҫтәл өҫтөнә килеп ятҡан, ҡапҡасы асылып, түгелеп киткән һәм бөтә өҫтәл өҫтөн буяған». Һин быларға ышаныр инеңме?

Хикмәт бабаһы һөйләгәндә, Искәндәр саҡ көлөп ебәрмәне, оялып, үҙен тыйҙы, тик барыбер аҙаҡ пырх итеп ҡалды:

– Ха-ха-ха! Шулай буламы ни инде?

– Ошондайыраҡ хәбәр һөйләүсе тураһында нимә тип әйтәһең инде? Донъяла нимәлер осраҡлы рәүештә, үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә тип уйлау иҫәрлек түгелме ни? Һинең мәктәп дәреслектәрең раҫлауынса, тәбиғәттә бөтә нәмә тәбиғәттең үҙенең ҡанундары буйынса йәшәй һәм үҙгәрә, әммә улар иң төп мәсьәләгә асыҡлыҡ индермәй. Ул тәбиғәттте яралтыусы юҡмы ни? Китап авторһыҙ үҙенән-үҙе яҙыла алмаған кеүек, ул да бит үҙенән-үҙе барлыҡҡа килмәгән. Көршәксе ҡулынан үтмәһә, балсыҡ та бит көршәккә әйләнмәй. Тирә-йүндәге камиллыҡ, ғаләмдәге тәртип осраҡлы рәүештә, үҙенән-үҙе



барлыҡҡа килгәнме әллә? Һин, дуҫҡайым, яуап эҙләйһең, таба алмайһың, әммә шулай ҙа үҙ йәшең өсөн күп нәмә беләһең. Бына тағы бер миҫал. Әгәр рәссамға төрлө-төрлө йөҙҙәрҙе төшөрөргә ҡушһаң, егерме, утыҙ, илле йөҙҙө төшөргәндән һуң, уның һүрәттәре бер-береһенә оҡшай, бер-береһен ҡабатлай башлаясаҡ. Ә бит хәҙер ер йөҙөндә төрлө-төрлө ҡиәфәтле 7,5 миллиард кеше йәшәй. Һәм был Аллаһҡа инаныусылар өсөн нәсихәт булып тора. Ул – Аллаһ – һәммәһен иң гүзәл һүрәттә бар ҡылыусы. Кешеләр йөҙҙәре менән генә түгел, бармаҡтарындағы ҡабатланмаҫ һырҙар менән дә бер-береһенән айырылыуын беләһеңме икән?

Маңлай күҙе менән генә түгел, күңел күҙе менән күрә белеүселәргә бөтә барлыҡ Раббыбыҙ Аллаһты хәтергә төшөрөп тора. Быға миҫалдар бихисап... Теләһәң, анау байып барған ҡояш хаҡында һөйләшәйек. Беҙҙең календарыбыҙ Ҡояш хәрәкәтенә бәйле. “Теүәл бер йылдан Ҡояш ҡасан бата?” - тип һораһам, миңә яуап бирә алырһыңмы?

– Әлбиттә. Мин быйылғы календарҙан ҡараясаҡмын. Бөгөн сәғәт нисәлә байыһа, киләһе йылда ла шул ваҡытта байыясаҡ!

– Һин еңел генә белерһең дә ул! Ә Ҡояш теүәл бер йылдан уға 20 сәғәт 45 минутта байырға кәрәклеген ҡайҙан белер икән һуң? Уның аҡылы, зиһене һәм ғилеме юҡ. Ҡояш, Ай һәм йондоҙҙар, миллиард йылдар буйы бер секундҡа ла яңылышмайынса, осраҡлы рәүештә үҙ орбиталары буйынса хәрәкәт итә аламы?

– Бында осраҡлыҡ мөмкин түгел, – тип ризалашты уның менән Искәндәр.

Хикмәт бабаһы дауам итте:

– Хатта ки иң камил техник ҡоролмаларға ла билдәле бер ваҡыттан һуң ремонт талап ителә. Иң яңы технологиялар һәм ҡаҙаныштарға нигеҙләнеп эшләнгән комьютер ҙа тора-бара иҫкерә, боҙола, ватылып ҡуя. Ә Ҡояш һәм Ай иҫкерәме? Улар ремонтҡа мохтажмы?

Бер аҙ уйланып торғас, Искәндәр былай тине:

– Әлбиттә, улар осраҡлы ғына барлыҡҡа килмәгән, осраҡлы рәүештә хәрәкәт итһәләр, һис шикһеҙ, орбиталарынан сығырҙар.

Хикмәт бабаһы дауам итте:

– Ә кешенең маймылдан барлыҡҡа килеүе тураһындағы теорияға килгәндә, ул шул теория, фараз ғына булып ҡалды. Ғалимдар бит әлегә саҡлы маймыл һәм кеше араһында эволюция бәйләнеше барлығын бер нисек тә иҫбатлай алманы. Донъяның матди булыуын ғына иҫбатлаған һәм Раббыбыҙ Аллаһты танымаған ул ғалимдар Ғаләмдең һәм кешенең барлыҡҡа килеүен «үҙенән-үҙе» килеп тыуған осраҡлы хәлдәргә бәйләй. Ә был дөрөҫмө икән?

Йәнәбе Хаҡ тәүге кешенең барлыҡҡа килеүе тураһында Ҡөрьәндә шулай тип әйтә:

**«Шулай итеп, Аллаһ фәрештәләргә әйтте: “Мин зыңғылдап торған (саф) балсыҡтан, уға рәүеш биреп, бер кеше яралтасаҡмын. Уға рәүеш биргәс, йән өрөлгәс, һеҙ уға сәждә итерһегеҙ”»** («Әл-Хижр» сүрәһе, 15/28-29).

Күреүебеҙсә, Аллаһ Тәғәлә, рухын өрөп, һәм, барсаһына сәждә ҡылырға бойороп, уны бөтә яратылмыштарҙан өҫтөн ҡылған.

Уйлау һәләтен Аллаһ бер хайуанға ла бирмәгән! Үҙе тураһында ғилем эҙләһен, яҡшыны һәм яманды айыра, һайлаған юлы өсөн яуап тота алһын өсөн, фекер диңгеҙенә сумыу, рухи танып белеү һәләтен биргән Ул кешегә:

**«Үә нәфес менән һәм нәфесте үҙ файҙаһына ераҡлы иткән Аллаһ менән ант итәм. Өйрәтте Аллаһ ул нәфескә яуызлыҡты һәм өйрәтте тәҡүәлекте, яҡшылыҡты. Тәхҡиҡ, ҡотҡарҙы нәфесен гонаһтан уны паклаған кеше. Тәхҡиҡ, Аллаһтың ниғмәттәренән мәхрүм булды яһиллыҡ менән нәфесен гонаһҡа батырған кеше»** («Әш-Шәмс» сүрәһе, 91/7-10).

Ҡөрьән ап-асыҡ күрһәтә: кешенең уникаль һәләттәре эволюция барышында хайуандарҙан алынмаған. Кешелек йәмғиәте йәшәйеше барышында әҙәмдең буйы, йөҙ һыҙаттары, тән төҫө һәм төҙөлөшө, ғүмер оҙонлоғо ниндәйҙер кимәлдә үҙгәреүе мөмкин, әммә ләкин кешенең эске асылы үҙгәрмәгән...

– Класта быға береһе лә ышанманы, көлөп кенә ҡуйҙылар.

Хикмәт бабаһы ризалыҡ белдереп баш ҡаҡты:

– Һәм улар хаҡлы. Был идея шул ҡәҙәр көлкөлө һәм мәғәнәһеҙ, тик көлөргә генә ҡала. Күҙҙәре һәм йөрәктәре пәрҙәләнгән, шул арҡала хәҡиҡәтте күрмәгән меҫкен кешеләр генә ышана ала уға.

Ҡөрьәндең күп кенә урындарында Раббыбыҙ Аллаһ Ғаләмдең нисек барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләй һәм, шул турала уйланып, нәсихәт алырға саҡыра:

**«Әллә һуң ул иманһыҙҙар күктәр менән Ерҙең ҡасандыр бергә уҡмашҡан хәлдә булғанын белмәйҙәрме? Беҙ**

**уларҙы айырҙыҡ та, һәр тереклекте дымдан яралттыҡ. Шунан һуң да улар** (мөшриктәр) **иман килтермәйҙәрме?»** («әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр)» сүрәһе, 21/30);

**«Аллаһ төндө, көндө, Ҡояшты, Айҙы яһаны. Уларҙың һәр береһе үҙ әйләнәһе тирәһендә Күк йөҙө буйлап йөҙөп-осоп йөрөргә тәртип ителде»** («әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр)» сүрәһе, 21/33);

**«Аллаһ бер-береһенә ярашҡан ете ҡат Күкте бар итте. Ғаләмдәр Раббыһының бар итеү ғәмәлендә һеҙ һис бер кәмселек күрмәçһегеҙ. Күтәрелеп бер ҡарағыҙ һеҙ Күккә, шунда һис бер етешһеҙ урын күрмәçһегеҙ. Унан тағы ҡат-ҡат ҡарағыҙ, ҡарашығыҙ** (Күк төҙөлөшөндә етешһеҙлек таба алмайынса)**, хәлдән тайып, меçкен хәлдә кире ҡайтыр»** («әл-Мүлк (Хакимиәт)» сүрәһе, 67/3-4).

Сағыштырмаса яңы ғына, 70 йыл элек, ғалимдар Ғаләмебеҙҙең киңәйеүен асыҡлаған. Улар галактикаларҙың арта барған тиҙлек менән беҙҙән йырағайыуын һәм оҙаҡламай яҡтылыҡ тиҙлегенә етәсәген иçәпләп сығарған. Ул саҡта инде уларҙы күҙәтеп булмаясаҡ, тикшереүселәргә ҡеүәтлерәк телескоптар кәрәк буласаҡ.

Ә Изге Ҡөрьән 14 быуат элек үк был турала хәбәр иткән: **«Беҙ күкте ҡеүәт үә ҡөҙрәт менән бина ҡылдыҡ, тәхҡиҡ Беҙ барса мәхлүктең ризыҡтарын киң ҡылыусыбыҙ»** («Әҙ-ҙәрийәт (Таратыусылар) сүрәһе», 51/47).

Искәндәр, аптырап, һорау бирҙе:

– Ғалимдар яңы ғына асыҡлаған ул хәҡиҡәт тураһында Ҡөрьән бик күп быуаттар элек үк хәбәр иткәнме?

– Тап шулай, улым. Фән һәм техника үçешкән беҙҙең заманда Аллаһ Тәғәлә 14 быуат элек Ҡөрьән аша тапшы-



рған бик күп ғилемдәр раçланды! Ғаләмдең берҙән-бер Яралтыусыһы һәм Хакимы булған Аллаһ Үҙенең мөғжизәле Китабында донъя төҙөлөшөн һәм ҡанундарын өйрәтә. Һәр яңы фәнни асыш Аллаһтың бөйөклөгөнә, ҡөҙрәтенә һәм хикмәтенә дәлил булып тора, сөнки Ҡөрьән һәр ваҡыт фәндән алда бара, ә фән уның артынан килә:





**«Һәр хәбәрҙең тормошҡа ашасаҡ бер ваҡыты була. Оҙаҡламай һеҙ Хәҡиҡәтте күрерһегеҙ!»** («Әл-Әнғәм (Мал-тыуар)» сүрәһе, 6/67).

Тимәк, улыҡайым, был донъяла бер нәмә лә буштан-бушҡа яратылмаған. Тупраҡтан алып тауҙарға ҡәҙәр, кескәй генә орлоҡтан алып йондоҙҙарға ҡәҙәр – һәммәһенең маҡсаты һәм тәғәйенләнеше бар, һәммәһе Йәнәбе Хаҡ ҡушҡанды үтәй, уға буйһона. Раббыбыҙ шуны теләй: беҙ һиҙгер йөрәк менән, тәрән фекер йөрөтөп, ғаләмдәге мөғжизәләрҙе күҙәтеп, уларҙы Яралтыусыны танып белергә тейешбеҙ. Ул әйтә: **«Юҡ шул, ул (Ҡөрьән Аллаһ тарафынан бирелгән һәм) ғилем эйәләренең күңелдәрендә яҡтылыҡ булып һаҡланыусы ап-асыҡ аяттарҙан тора. Беҙҙең аяттарыбыҙҙы ғәҙелһеҙ залимдарҙан башҡаһы инҡар итмәҫ»** («Әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе)» сүрәһе, 29/49).

Искәндәр Хикмәт бабаһын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы, сөнки ул һөйләгәндәрҙең күбеһе хаҡында ишеткәне лә юҡ ине. Әңгәмә барышында ул үҙен ҡыҙыҡһындырған күп һорауҙарға аныҡ һәм асыҡ яуап алды. Әйтерһең дә, Хикмәт бабаһы Искәндәргә быға-са күрелмәгән оло донъяға ишек асты.

Күкте ялҡын төҫөнә мансып, ҡояш яй ғына офоҡ артына ауа башланы. Күк көмбәҙендә ай ҙа асыҡ күренде.



Бер ни ҡәҙәр ваҡыт Хикмәт бабай һәм Искәндәр һоҡланғыс ҡояш байышын тын ғына күҙәтеп торҙолар.

– Ҡайһылай баҙрап яна. Ҡояш ер ҡуйынына инеп киткән, уға алмашҡа ай килгән ғәжәп мәл. Күктә, ҙур баҙлауыҡтар шикелле, йондоҙҙар ҡабына. Һоҡланғыс күренеш, шулай бит! – тине Хикмәт бабай.

– Эйе, – тине Искәндәр.

Илаһи мәлдәге ошо хозурлыҡтан күңеленә лә хозурлыҡ тулды, тик ҡапыл ул олатаһы Кәримде иҫкә төшөрҙө, көрһөндө һәм, уны юҡһынып, һағышланып алды.

# БЕҘ ҺӨЙӨКЛӨЛӘРЕБЕҘ МЕНӘН БЕРГӘ БУЛАСАҠБЫҘ

Иртән, Ҡөрьән уҡыр һәм доға ҡылыр өсөн, әсәһе һәм өләсәһе олатаһының ҡәберенә китте, ә бәләкәй Айтуғанды Искәндәр ҡарамағына ҡалдырҙылар. Бәләкәс тәүҙә мыжырға уйлағайны, аҙаҡ, ағаһына ҡарап, был уйынан кире ҡайтты – уның менән бит күңелһеҙ булмаясаҡ. Улар ҡасыш уйнанылар, диван мендәрҙәренән машина яһанылар, ҡойроғона һунар иткән Мәрҙәндән көлдөләр, тауыҡтарҙы икмәк валсыҡтары менән һыйланылар, ҡом өйөмөндә ҡала төҙөнөләр, һутлы ҡурай еләктәре йыйып ашанылар һәм, эштән арып, йомшаҡ япманы ябынып, диванға ҡоланылар.

Бәләкәй Айтуған танауын мендәргә төртөп ойоп китте. Искәндәр, шым ғына тороп, бүлмә мөйөшөндә торған китап кәштәһенә йүнәлде. Ул иҫ беләбашлағандан алып был иҫке кәштә урынынан күскәне юҡ. Уны ҡасандыр Кәрим олатаһы эшләп ҡуйған. Искәндәр матур семәрле биҙәктәрҙе һыйпап ҡараны. Уларҙа, әйтерһең дә, олатаһының ҡул йылыһы тороп ҡалған.



Олатаһы баҡыйлыҡҡа күскән көн иҫенә килеп төштө...

Ял көнө ине. Искәндәр һуң ғына уянды. Йоҡа ҡорған аша бүлмәгә яҙ ҡояшының яҡтылығы төшә, ә асыҡ тәҙрәнән еләҫ ел, ҡоштар һайрауы, кешеләрҙең шат тауыштары килеп инә. Искәндәрҙең, йәһәтерәк өйҙән саф һауаға сығып, тәбиғәттең ҡыштан һуңғы уяныу шатлығын барлыҡ ҡоштар, ағастар, бөжәктәр һәм кешеләр менән ур-



таҡлашҡыны килде. Улар бөгөн атаһы һәм Азамат менән эргәләге урман паркында яңы һауа йыланын осорорға килешкәйне.

Урынынан ырғып торҙо, йыуынырға һәм ашарға йүгергән ыңғайы:

– Әсәй, – тиеп ҡысҡырҙы ла өйҙә үҙе генә икәнен аңланы.



“Атай, күрәһең, әсәйем менән ҡустым Айтуғанды алып, аҙналыҡ аҙыҡ-түлек алырға магазинға алып киткән. Ярай, атайым бушағас, беҙгә ҡушылыр,” - тиеп уйланы ла тиҙ генә йыйынып, урамға йүгереп сыҡты. Ун минуттан һабаҡташ дуҫы Азамат менән бергә, йыландарын тотоп, аҙаҡ уны зәңгәр һауаға ебәреп, кем бейегерәк осорасағын ярышып күҙәтер өсөн, урман паркы яғына йүнәлделәр.

Ваҡыт һиҙелмәй үтеп китте, ҡояш байыу яғына тәгәрәй башланы, малайҙар, уйнап туйып, ҡыуанышып, өйҙәренә тарала башланы. Дуҫы менән: "Әс-сәләмү ғәләйкүм!" - тиеп хушлашты ла Искәндәр, парктан алып сыҡҡан һуҡмаҡ буйлап атлағанда, ҡаршыһына килгән атаһын күреп ҡалды. Атаһының ҡаршыһына йүгереп барып, ҡосаҡлап алып, бензин еҫе аңҡып торған курткаһына һыйынды:

– Атай!

Атаһы күңелһеҙ һәм йонсоу күренә ине. Эскәмйәгә ултырып, бер аҙ тын торғас, шым ғына әйтте:

– Ғәфү ит, улым, һин йоҡлай инең. Миңә ашығыс китергә кәрәк ине. Әсәйеңә лә. Бөгөн һинең менән йөрөргә вәғәҙә иткәйнем, әммә килеп сыҡманы.

– Ниҙер булдымы, атай?

– Эйе, Искәндәр. Һин хәҙер ҙур малай һәм кешеләрҙең тыуып, үҙ ғүмерен йәшәп, мәрхүм булғандарын беләһең. Һәр кемдең Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә тарафынан билгеләнгән үҙ мөҙҙәте (ваҡыты) бар. Кәрим ҡартатайың, әсәйеңдең атаһы вафат булғанын әсәйең менән миңә



төнөн хәбәр иттеләр һәм беҙ шунда киттек. Бөгөн ерләнеләр. Әсәйең менән Айтуған ҡустың өләсәйең янында ҡалып торҙолар.

Искәндәрҙең күкрәге ҡыҫылды, күҙҙәренә йәш эркелде, әсе төйөр тамағына торҙо. Ҡапыл үҙен япа-яңғыҙ тойҙо. Ҡартатаһын ныҡ яратты һәм айырылышыу сәғәте былай тиҙ булырын уйламай ине. Атаһының янына ултырҙыла:

– Атай... башҡа ҡартатайҙы күрмәйемме?

– Ин шәә Аллаһ, улым, күрерһең. Мәңгелек тормошта кемдәрҙе яратабыҙ, шулар менән күрешәбеҙ.

– Ә кешеләр үлгәс ҡайҙа китәләр?

– Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең ихтыяры менән һәр кешенең билгеләнгән мөҙҙәте үткәс, йәне тәнен ташлап китә. Уны ерләгәс, йәне әйләнеп ҡайта һәм ул йоҡлаған кешегә оҡшап ҡала. Уға ике фәрештә – Мөнкәр менән

Нәкир килә һәм унан һорайҙар: **“Раббың кем? Динең ниндәй? Пәйғәмбәрең кем?”** Мосолман фәрештәләрҙең һорауҙарына дөрөҫ итеп былай яуап бирә: **“Раббым – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, динем – Ислам, пәйғәмбәрем – Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм)”**. Фани донъялағы ғәмәлдәренә ҡарап, ҡәбер бераүҙәр өсөн ожмах баҡсаһына, икенселәр өсөн тамуҡ упҡынына әйләнә. Аҙаҡ кешенең йәне Бәрзәх донъяһына күсә һәм унда Ҡиәмәт Көнөнә ҡәҙәр була. Ҡиәмәт Көнө башланғанын Исрафил исемле фәрештә Сорғо исемле оло торбаһына өрөп еткерә. Ул икенсе тапҡыр өргән саҡта, Раббыбыҙ Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бөтә кешеләрҙе терелтер һәм улар, ошо яҙғы сәскәләр кеүек, ҡәберҙән ҡалҡып, Мәхшәр майҙанына Раббыларына хисап бирер өсөн йыйылыр.

Иҫән саҡта һәр ваҡыт кешенең уң һәм һул яурындарында булған ике фәрештә - Кирәмән Кәтибин - гонаһтарыбыҙ менән изге ҡылыҡтарыбыҙҙы ғәмәл китабыбыҙға яҙалар. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә мәрхәмәтле булып, барыбыҙҙы ла Үҙенең ҡолдарынан ҡылһын һәм ғәмәл китабыбыҙ уң яҡтарыбыҙҙан бирелһен! Һул яҡтан бирелмәһен! Әмин. Йәғни Ожмах әһелдәре китабтарын – уң, ә Тамуҡ әһелдәре – һул яҡтарынан алырҙар!

Аҙаҡ һәр кешенең бөтә ғәмәлдәре күләме ошо донъя ҡәҙәре булған Мизан үлсәүҙәрендә үлсәнәсәк. Һәр кеше ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер Сират күпере аша үтәсәк. Яҡшы кешеләр, был күпер аша тиҙ үтеп, ожмахҡа эләгәсәк. Ә насар кешеләр, Сират күпере аша үтә алмайынса, тамуҡҡа ҡолаясаҡ.

Әйҙә, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә, Кәрим ҡартатай өсөн доға ҡылайыҡ. Ул яҡшы мосолман булды, мәңгелек тормошҡа ышанып, Ожмах баҡсаларына инергә теләне. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә, салих ғәмәлдәрен ҡабул итеп, гонаһтарын ярлыҡаһын, Мөнкир менән Нәкир фәрештәләре алдында хисаптарын еңеләйтһен, ҡәберен яҡты һәм иркен ҡылһын, Ожмахҡа илтеп, уны Пәйғәмбәре-



беҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән осраштырып, әжер-сауаптарын насип итһен! Әмин!

Искәндәр атаһына эйәреп:

– Әмин, – тиеп ҡабатланы, йөҙөн ҡулы менән һыпырҙы.

Күкрәген ҡыҫҡан ауыртыу ебәргәнен тойҙо. Атаһы менән ҡайтыу яғына атланылар. Уның көслө ҡулдарын тотҡан килеш Искәндәр уйланып барҙы: "Аллаһ Сүбхәнәһү



үә Тәғәлә минән риза булып, миңә Йәннәт бүләкләһен. Унда Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Кәрим ҡартатай һәм, кемдәрҙе яратам, шулар менән күрешер өсөн, мин яҡшы мосолман буласаҡмын".

Искәндәр атаһы әйткән һүҙҙәр тураһында йыш ҡына уйланып йөрөнө: «Ысынлап та, шулай булырмы икән ни? Һәм нисегерәк булыр икән ул?» Бына ҡапҡа келәһе шылтыраны, тауыштар ишетелде – әсәһе һәм өләсәһе зыяраттан ҡайтҡайны. Ҡустыһын нисек ҡарауы хаҡындағы һорауҙарға яуап биреп, лайыҡлы маҡтау һүҙҙәре ишетеп, шоколад алғас, Искәндәр, түҙемһеҙләнеп, Хикмәт бабаһының йортона йүгерҙе.

Тегеһе ғәҙәттәгесә алмағас төбөндәге һап-һары алмалар ҡойолған өҫтәле артында ултыра ине. Малайҙы күргәс, ул йылмайҙы. Улар бер-береһенә сәләм бирҙеләр.

– Күрәм, дуҫҡайым, һорауҙар менән килгәнһең. Ултыр. Әйҙә һыйлан, Аллаһ Тәғәлә беҙгә өлөшөбөҙҙө өҫтәлгә үк һалып ҡуйған!

– Хикмәт бабай, кешеләр үлгәндән һуң нисек итеп ҡабат терелә ул?

– Һм... Йә, әйт әле, һин конструктор йыйырға яратаһыңмы?

– Эйе. Бик яратам. Миндә улар өсәү!

– Схема буйынса берәй ҡатмарлы моделде йыйғанда, тәүге тапҡыр йыйыу ҡатмарлыраҡмы, әллә икенсе тапҡыр йыйғандамы?

– Әлбиттә, тәүге тапҡыр йыйғанда ҡатмарлыраҡ. Беренсе тапҡыр эшләгәндә һәр ваҡыт ҡыйыныраҡ була.

– Бына һинең һорауыңа яуап инде был. Аллаһ Тәғәлә кешене бер тапҡыр бар ҡылған икән, йәнә бер тапҡыр бар ҡылыу Уға ҡыйын түгел. Кешелек яратылғандан бирле бөгөнгө көнгә ҡәҙәр йәшәгән әҙәмдәрҙе үҙҙәренә генә хас барса үҙенсәлектәре менән яңынан яралтыу Уға бер ни тормай... Раббыбыҙ әйтә: **«Ул үҙенең нисек яратылғанын онотоп: “Был серегән һөйәктәргә кем йән өрә алһын?” -тип, Беҙгә хәйләле һорау бирә.** (Эй, Мөхәммәд) **әйт һин: “Уларҙы иң беренсе яралтҡан** (Аллаһ) **терелтәсәк. Ул һәр яратылғанды асылы менән белеүселер”»** («Йәсин» сүрәһе, 36/78-79).

Тәүҙә кешенең тәүге яратылыуы тураһында һөйләшәйек әле. Аллаһ кешене балсыҡтан, йәғни тупраҡтан яралтҡан: **«Хаҡтыр, Беҙ кешене** (Әҙәм ғәләйһис-сәлләмде) **сафландырылған балсыҡтан яһаныҡ. Һуңынан уны ышаныслы бер урынға тамсы итеп урынлаштырҙыҡ»** («Әл-Мөьминүн (Мөьминдәр)» сүрәһе, 23/12-13).

Ә кешенең тәне ниндәй матдәләрҙән тороуын беләһеңме? Йәшенә ҡарап, һыу кеше тәне массаһының 57 (өлкән йәштәгеләрҙә) процентынан алып 97 процентына (яралғыла) ҡәҙәр тәшкил итә. Шуға күрә лә кешелә һыу молекулаһын барлыҡҡа килтергән кислород миҡдары ҙур – 65%, ә водород – 10% самаһы. Кеше тәне 18% углеродтан, 3% азоттан, 1,5% кальцийҙан, 1,2 % фосфорҙан һәм әҙ миҡдарҙағы башҡа бик күп матдәләрҙән тора. Шул уҡ матдәләр тупраҡ соста-



вында ла бар. Йәғни, кеше тәне һәм ер үҙенең составы буйынса оҡшаш.

Әйтәйек, химик реактивтар магазинында ул матдәләрҙе 300-400 һумға һатып алырға була.

– Бары тик 400 һумғамы? – Искәндәр, ғәжәпләнеп, Хикмәт бабаһына ҡараны.

– Кеше тәненең төп массаһын тәшкил иткән һыуҙың хаҡы тураһында әйтеп тороу кәрәкмәйҙер. Йәл, ҡайһы бер кешеләр тупраҡтағы 300-400 һумлыҡ элементтан физик һәм рухи йәһәттән камил булған, зирәк аҡыл һәм хис-тойғоға эйә булған затты барлыҡҡа килтергән Аллаһты танырға теләмәй!

Искәндәр уның фекерен ослап ҡуйҙы:

– Тимәк, Аллаһ тарафынан бүләк итеп бирелгән үҙенең яратылмышын, рухын ҡабул итмәгән, быны танымаған кеше үҙен 400 һум итеп баһалай, шулаймы Хикмәт бабай?

– Эйе, һин бик дөрөҫ әйттең!

Хикмәт бабаһы дауам итте:

– Ундай кешеләргә яңынан терелеүгә һәм мәңгелек тормош барлығына ышаныу ҡыйын. Улар 14 быуат элек Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) замានында йәшәгән наҙан мөшриктәр шикелле фекер йөрөтә. Мөшриктәр сереп бөткән һөйәктәрҙе ҡулдарына алып, бармаҡтары менән ыуа-ыуа Аллаһ Илсеһенән



(салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) көлөп һорар булған: «Кем уларҙы терелтер?», «Һәм беҙ ҙә, үлеп юҡҡа сыҡҡас, ҡабаттан терелербеҙме икән?»

Улар Аллаһҡа ҡаршы сыға. Бөгөн дә ошо наҙан мөшриктәр кимәлендә фекер йөрөткәндәр бар. Хәҡиҡәтте күрмәгән ул замандың һәм хәҙерге замандың наҙандарына Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә шундай яуап бирә:

**«Әҙәмде Ул бер тамсынан яралтты. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, ул** (әҙәм) **дошманлаша»** («ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/4);

**«Кеше, үлгәс, сереп тарҡалған һөйәктәребеҙҙе бергә йыйып, беҙҙе яңынан терелтә алмаясаҡ, тип уйлаймы? Һис шикһеҙ, уларҙың бармаҡ остарына саҡлы, нисек булған, шулай мөкәммәл итеп яңынан йыйырға көҙрәтебеҙҙән килә»** («әл-Ҡиәмәһ (Ҡиәмәт)» сүрәһе, 75/3-4).

Әйтергә кәрәк, бында Ҡөрьәндең йәнә бер мөғжизәһе тураһында һүҙ бара. XIV быуат элек һәр кешенең бармаҡ осо тиреһендәге һырҙары бары тик үҙенә генә хас булыуын һәм һис кемдә ҡабатланмауын әле берәү ҙә белмәгән. Йәғни, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Көҙрәте һәм Хикмәте менән һәр кешенең үҙ мисәте бар. Бармаҡ остарындағы миллиардтарса шәхси мисәттәр башҡа бер кем дә лә ҡабатланмай...

Искәндәр Хикмәт бабаһы һөйләгән нәмәләр хаҡында һис ҡасан ишеткәне булманы. Асыла барған Ҡөрьән хәҡиҡәттәре уны хайран итте.

– Улым, был донъяға бағып, фекер йөрөтә белеүебеҙҙе теләй Раббыбыҙ. «Һеҙ әллә уйланмайһығыҙмы?», «Һеҙ был турала фекерләп ҡарамайһығыҙмы әллә?», «Бында һеҙгә нәсихәттәр бар!» кеүек һүҙҙәр Ҡөрьәндә йыш ҡабатлана.

Әҙәмде ер туйындыра, ул унда үҫкән ризыҡтарҙы ашай. Үлән ашаусы хайуандарҙы ла туйындыра ер, мәҫәлән, һарыҡтарҙы. Уларҙың ашаған үләндәре, эшкәртелеп, иткә,

кешеләр файҙаланырҙай ризыҡҡа әйләнә. Кеше, үлгәс, ер ҡуйынына китә. Ә уның ерҙән барлыҡҡа килгән тәне йәнә ергә әйләнә. Был асыҡ ғилемдәр, шуға күрә әҙәмдең бар ҡылыныуын һәм уның ҡабат тергеҙеләсәген инҡар иткән кешеләргә аптырарға ғына ҡала.

Хикмәт бабаһы, Искәндәрҙең иғтибарлы, ҡыҙыҡһыныусан булыуын хуплап, йылмайып ҡуйҙы.

– Хәҡиҡәттә күрә белгәндәр өсөн Ғаләмдәге барса нәмә - туҙан бөртөгөнән алып ғәләмәт ҙур планеталарға ҡәҙәр Аллаһ сәнғәте һәм ҡөҙрәтенә дәлил булып тора.

Ул, эйелеп, бер ус тупраҡ алды.

– Хәҙер минең ҡулымдағы был тупраҡ ҡоро, үле туҙан һымаҡ ҡына, шулай түгелме ни?



Искәндәр, килешеп, баш ҡаҡты:

– Эйе.

– Әммә икенсе яҡтан ҡарайыҡ. Планетаның дөйөм массаһы менән сағыштырғанда кескәй генә булған ошо тупраҡ ҡатламы триллиондарса йән эйәһенә төйәк һәм ризыҡ бирә. Бер бөжәк, селәүсен йәки бактерия ла унда астан үлмәй. Тупраҡта улар үҙҙәренә кәрәк ризыҡты таба. Ошо ер үҙен-

дә йәшәгән бихисап үҫентене, хайуанды, кешене ризыҡландыра. Нимәгә мохтаж булһалар, ер уларға шуны бирә. Икенсе яҡтан, был тере йән эйәләре үлгәс, ер йәнә уларҙы үҙенә ҡабул итә, һәм улар йәнә ергә әүерелә. Ер – киләсәктәге тере йән эйәләре өсөн йәшәү сығанағы. Ҡоро һәм үле тупраҡ нисек быға һәләтле һуң? Ниндәй ҡөҙрәт менән был ҡара, йәнһеҙ ер меңдәрсә үлән, ағас, сәскәгә ғүмер бирә?

Ул ҡойма артында үҫкән суп үләндәренә ишараланы:

– Күрәһеңме анау үҫентеләрҙе? Былтыр улар бында юҡ ине. Ҡайҙандыр кипкән орлоҡтар осоп килгән дә, ошонда төйәкләнеп, кинәнеп үҫәләр. Ҡышын улар кибәсәк, ҡоро һабаҡтан айырылған орлоҡтар йәнә әллә ҡайҙарҙа төйәк табыуы ихтимал! Уларҙың ғүмере лә кеше ғүмеренә оҡшаш – кеше лә бит тыуа, йәшәй, үлә, ә аҙаҡ яңы тормошҡа тергеҙелә.

Йәки тәнебеҙҙе генә алайыҡ… Әле организмыңда һинең ғүмерең өсөн кәрәк булған триллиондарса ҡан күҙәнәге хәрәкәт итә. Улар башлыса өс төргә бүленә: эритроциттар, лейкоциттар һәм тромбоциттар. Һеҙ уларҙы мәктәптә өйрәндегеҙ. Эритроциттар - ҡыҙыл ҡан күҙәнәктәре, улар организмда 25 триллион самаһы, 120 көн йәшәйҙәр һәм үләләр. Улары урынына яңылары тыуа…

Искәндәр уйға ҡалды. Тимәк, минут һайын уның тәнендә йөҙҙәрсә миллиард үлем-тыуым булып тора. Ә ул был турала белмәй ҙә. Ошо мәл кемдер урам ҡапҡаһының ҡыңғырауына баҫты. Хикмәт бабаһы асырға китте һәм оҙон буйлы, ауырыу һымаҡ тойолған, ҡулына ҙур ғына төргәк тотҡанябыҡ ҡына бер ағай менән әйләнеп килде. Улар өйгә инеп киттеләр, бер аҙ һөйләшеп алдылар һәм өйҙән төргәкһеҙ генә сыҡтылар. Хикмәт бабаһы, террасала торған алма тултырылған бер тоҡсайҙы алып, ағайға тотторҙо. Тегеһе уңайҙланды, шулай ҙа тоҡсайҙы алды, рәхмәт әйтте һәм, өйҙәгеләрҙең уны көтөүенә һылтанып, тиҙерәк китергә ашыҡты. Ҡапҡа төбөнә ҡәҙәр оҙатырға барған Хикмәт бабаһы уның кеҫәһенә конверт тыҡты. Кур-

кәм ҡиәфәтле ағай үҙен лайыҡлы тотто, тик уның ифрат та ныҡ уңайһыҙланыуы күҙгә ташланды. Хикмәт бабаһы Тимурға аҙаҡ шулай аңлатты:

– Морат ағайың был, парк артындағы ике ҡатлы йортта уларҙың фатиры. 3-4 йыл элек һәйбәт йәшәйҙәр ине улар. Ул ҡалала электромонтаж ҡоролмалары фирмаһында эшләне. Ғаиләһе етеш йәшәне, ул ауылыбыҙҙағы мохтаждарға, яңғыҙ йәшәгән ҡарттарға ярҙам итте, мәсеткә саҙаҡалар һалды. Һуңынан ул ауырып китте, фирманан китергә мәжбүр булды. Йәшәү, фатирға түләү ауырлашҡас, ауылға, ата-әсәһенең фатирына ҡайттылар. Уларҙың баҡсалары юҡ, йорт янында йәшелсә ултыртырлыҡ ҡына ерҙәре бар.

Морат бәләкәй генә хаҡҡа кешеләр килтергән электр приборҙарын төҙәтә, ләкин ул аҡсаға ғаиләне тәьмин итеү мөмкин түгел. Өҫтәүенә сире арҡаһында хәстәханаларҙа оҙаҡ ятырға тура килә. Уғата ауыр йәшәй, әммә ләкин үҙен лайыҡлы тота, хәленә һис ҡасан зарланмай. Элек, ауырығанға тиклем, ул ял һайын инеп, хәл-әхүәлемде һораша ине, әле лә шулай итә. Үткәнендә мин сарҙаҡты тәртипкә килтергәйнем, шунда иҫке өҫтәл лампаһын таптым. Морат уны күреп ҡалды һәм төҙәтергә алды. Бөгөн ул уны төҙәтеп алып килгән. Йөрәген яраламаҫ өсөн, мин уға, эше өсөн тигән булып, саҙаҡа бирҙем. Матур ғына йәшәп яткандан һуң, күпме һынауҙар үтергә тура килә Моратҡа: бер яҡтан – ауырыуы, икенсе яҡтан – фәҡирлек. Ә бит уның ғаиләһе, дүрт балаһы бар. Бәләкәсе яңы ғына тыуҙы. Уны күргәндә, һәр саҡ бер аят иҫкә төшә:

**«**(Саҙаҡа) **үҙҙәрен Аллаһ юлына бағышлағандарға** (фәҡирҙәргә, ғалимдарға) **бирелергә тейеш, сөнки улар ер йөҙө буйлап йөрөй алмай. Уларҙың хәлен белмәгән кешеләр, уларҙың тыйнаҡ һәм ғорур булғанына ҡарап, был әҙәмдәрҙе бай тип иҫәпләй. Һин уларҙы** (үҙҙәренә генә хас) **ғәләмәттәренән танырһың. Улар** (ҡыйын хәлдә булһалар ҙа) **хәйер һорамай. Һеҙҙең** (Хаҡ юлында) **күпме**

**мал сарыф иткәнегеҙҙе, шик юҡ, Аллаһ белеп тора»** («Әл-Бакара» сүрәһе, 2/273).

Искәндәрҙең йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Уның атаһы төҙөлөш фирмаһында эшләй, уларҙың ғаиләһе бер ниндәй мохтажлыҡ кисермәй. Был ваҡиға уның өсөн һабаҡ булды. Тимәк, кешеләр араһында ярлы йәшәгәндәре, әммә быны башҡаларға күрһәтмәгәндәре, зарланмағандары һәм бер нәмә лә һорамағандары ла бар. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уларҙы ғәләмәттәренә ҡарап белгән һәм уларға ярҙам иткән. Һөйөклө Пәйғәмбәребеҙҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үрнәк алғандар күңел һиҙгерлегенә ирешәләр һәм, Хикмәт бабаһы кеүек, ундай кешеләрҙе таный беләләр...

– Киләһе аҙнала мин Морат ағайыңдың хәлен белергә барам. Әгәр теләһәң, һин дә минең менән бар.

– Эйе, мин дә барам, Хикмәт бабай!

# КЕШЕ ТЫУҘЫ

Искәндәр өйөнә ҡайтҡанда, ҡараңғы төшкәйне инде. Ишекте әсәһе асты:

– Искәндәр, бик оҙаҡланың түгелме?

– Әсәй, һин бит беләһең, мин Хикмәт бабайҙа булдым.

– Һм... Хикмәт бабайың нимәгә өйрәтте? Өләсәйең менән миңә лә һөйлә әле, беҙҙең дә белге килә.

– Хикмәт бабай миңә Ғаләмдең яратылыуы, кешенең ерҙән бар ҡылыныуы тураһында һөйләне. Ул шундай яҡшы итеп аңлата!.. Тирә-йүндәге мөғжизәләр тураһында ул Ҡөрьән аяттары менән аңлатҡанда, ниндәйҙер фильм ҡараған һымаҡһың. Бына бармағыңды бир әле миңә.



Әсәһе, йылмайып, улына ҡулын һондо. Тегеһе ҡулды тотто ла тулҡынланып һөйләй башланы:

– Әсәй, күрәһеңме бармаҡтағы һыҙарҙы? Иғтибар менән ҡара! Ә хәҙер бына минекен ҡара. Күрәһеңме, улар бер-береһенән нык айырыла! Бактиһәң, кешеләрҙең бармаҡ эҙҙәре бер-береһенә




оҡшамаған икән. Хатта миллион йыл элек йәшәгәндәрҙең дә, аҙаҡ Хисап көнөнә тиклем йәшәйәсәктәрҙең дә... Аллаһ, беҙҙе яралтҡан саҡта, һәммәбеҙҙең паспортын бармаҡ остарыбыҙға һырлап яҙып ҡуйған. Был – Уның бөйөклөгөнөң һәм ҡөҙрәтенең бер дәлиле. Ошо хаҡта Ҡөрьәндә әйтелә.



Искәндәр әсәһенә Морат ағаһы, уның ғаиләһенең ауыр хәле, Хикмәт бабаһының уларға ярҙам итеүе тураһында һөйләне. Морат ағайҙың яңыраҡ балаһы тыуыуы, киләһе аҙнала Хикмәт бабайҙың уларҙың хәлен белергә йыйыныуы һәм уны ла үҙе менән барырға саҡырыуы, рөхсәт булһа, ул да барырға теләүе хаҡында әйтте. Әсәһе ҡаршы килмәне:

– Әлбиттә, улым, бар. Тик буш ҡул менән барыу яҡшы түгел. Беҙ ҙә уларға бүләктәр әҙерләрбеҙ.

Искәндәр шундай теләк белдерҙе:

– Мин дә атайым биргән аҡсаларҙы тотонмаясаҡмын – ул аҡсаға балаларға шоколадтар алам.

– Афарин, йомартым һин минең! Өләсәйеңдең шкафында ҡустың киймәгән йәки әҙ генә кейгән кейемдәре ята, мин шуларҙы хәҙер пакетҡа тултырып ҡуям.

Искәндәр тәғәйенләнгән көндө түҙемһеҙлек менән көттө. Ахырҙа улар Хикмәт бабаһы менән ауылдың икенсе осондағы Морат ағайҙарға ҡунаҡҡа киттеләр. Парк артындағы иҫке ике ҡатлы йорттар тәңгәленә еткәс, улар, шуларҙың береһенә инеп, икенсе ҡатҡа күтәрелделәр.



Ишекте Морат ағаһы үҙе асты һәм, ҡунаҡтарҙы күргәс, бик шатланы:

– Әссәләмү ғәләйкүм, хөрмәтле ҡунаҡтар! Ниндәй ҡыуаныс беҙҙең өсөн! Зинһар, үтегеҙ.

Хикмәт бабаһы ла йылмайып иҫәнләште:

– Үә ғәләйкүмү сәләм! Беҙ ҙә бик шат. Өйөгөҙҙә һәр ваҡыт именлек, бәхет-шатлыҡ булһын!

Улар йыһаздары иҫке булған, әммә бик таҙа, йыйнаҡ бүлмәгә үттеләр. Искәндәр әсәһе биргән пакетты стена буйына ҡуйҙы. Оҙаҡламай бүлмәгә 3-10 йәшлек балалар килеп инделәр, ҡунаҡтар менән күркәм рәүештә иҫәнләштеләр. Хикмәт бабаһы, һәр береһенең башынан һыйпап, үбеп алды, һәр береһенә матур ҡумталарға һалынған бүләктәр һәм бер аҙ аҡса бирҙе. Искәндәр иһә алған шоколадтарын таратты. Бер аҙҙан Морат ағаһы бүлмәгә яңы тыуған бәпесте алып инде. «Бисмилләһ, мә шәә Аллаһ!»[3] һүҙҙәре менән Хикмәт бабаһы бәпесте ҡулына алды, шыбырлап ҡына доға уҡыны һәм атаһына һорау бирҙе:

– Исеме нисек?

– Салиха.

– Шөкөр! Ин шәә Аллаһ, исеменә ярашлы булып[4], Аллаһтың тәүәле ҡоло һәм һеҙгә тыңлаусан ҡыҙ булып үҫһен.

---

3. Бында ғәрәп телендәге доға: бисмилләһ – «Аллаһ исеме менән башлайым», мә шәә Аллаһ – «Аллаһтың теләгәне», ин шәә Аллаһ – «әгәр Аллаһ теләһә».
4. «Салиха» исеме ғәрәп теленән «тәҡүәле» тип тәржемә ителә.




– Ин шәә Аллаһ, Хикмәт ағай.

Йүргәккә тәрөлгән пак йән эйәһенә Хикмәт бабай йылмайып ҡараны:

– Көн һайын донъяла, ошо сабый һымаҡ, йөҙҙәрсә мең бала тыуа. Һәм йөҙҙәрсә мең кеше был донъянан китә. Улар ниңә килә һәм ниңә китә һуң? Былар бары шуны ғына асыҡ күрһәтеп тора: донъя – ваҡытлы төйәк һәм һынау урыны. Донъяға килгән һәр әҙәм мәңгелеккә атлаған юламсыға әйләнә!



## Һине нимә алданы?

Искәндәргә Хикмәт бабаһының бәйәндәре бик оҡшай. Уның һөйләгәндәрен ул көндәр буйы тыңларға әҙер. Морат ағаһы ла, тыңлаусан уҡыусы һымаҡ, Хикмәт бабаһын иғтибар менән тыңлап ултыра. Ә теге дауам итә:

– Ғәжәп! Раббыбыҙ беҙҙең күҙ алдында әсә тәнендә яңы кешене бар ҡыла. Ҡулымдағы бынау бала яңы ғына туҙан бөртөгө хәтле генә булған. Ирҙәрҙең енси күҙәнәге – сперматозоид – кеше тәнендәге оҙонлоғо 0,05 мм булған иң кескәй күҙәнәк. Был күҙәнәк, йәки, Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, «нутфа», үҙенән миллиондарса ҙурыраҡ юлдар үтеп, инә күҙәнәк менән берләшә һәм әсә ҡарынында урынлаша. Шунан ойошҡан ҡан, йәғни «ғәләк» барлыҡҡа килә, ул үҙенә кәрәк ризыҡты әсәһенең организмынан ала, үҫә. Аҙаҡ ул епсел-епсел ит, «мудға»рәүешен ала. Киләһе этапта яралғының һөйәктәре барлыҡҡа килә һәм шул һөйәктәр ит менән ҡаплана. Тән кеше һүрәтен ала. Был хәҡиҡәттәр тураһында Ҡөрьәндә шулай әйтелә:

**«Кеше үҙен һис сикләүҙәрһеҙ, күҙәтеүсеһеҙ йәшәргә хаҡлы, тип һанаймы әллә? Ул әсә ҡарынына атылған бер нәҫел орлоғонан хасил икәнен онотамы?»** («әл-Ҡиәмәһ (Ҡиәмәт)» сүрәһе, 75/36-37);

**«Унан һуң шәһүәт тамсыһын ойошҡан ҡан** (яралғы) **хәленә килтерҙек, ҡанды ерсел-епсел ит иттек; уны һөйәккә** (һөлдәгә) **әүерелдерҙек, шул һөйәктәрҙе ит менән ҡаплаттыҡ. Һуңынан уны башҡа рәүешкә** (кеше һүрәтенә) **килтереп хасил иттек. Ижад** (барлыҡҡа килтереү)

**менән шөғөлләнеүселәрҙең иң бөйөгө, иң данлыһы – Аллаһ Тәғәләлер»** («әл-Мүьминүн (Мөьминдәр)» сүрәһе, 23/14);

**«...Хәҙер ишәгеңдең һөйәктәренә ҡара. Нисек итеп беҙ уның һөйәктәрен бергә йыйып, уға ит ҡундырасаҡбыҙ»** («әл-Бакара Һыйыр)» сүрәһе, 2/259).

Искәндәр Хикмәт бабаһының ҡулындағы сабыйға бөтөнләй башҡа күҙ менән ҡараны. Яралғының үҫеш этаптары күҙ алдына килеп баҫты. Хикмәт бабай баланы атаһына бирҙе лә, бер аҙ тын торғас, тағы бер аятты иҫкә төшөрҙө:

**«**(Эй, әҙәм балаһы) **нимәгә ҡыҙығып, һин сикһеҙ йомарт Аллаһтың ниғмәттәренән** (сауаптан, ярлыҡаныуҙан, йәннәттән) **ҡоро ҡалдың? Аллаһ һине юҡтан бар итте, сәләмәт ағзалар биреп,** (бөтә кәүҙәңде) **килешле, теүәл итте, бөтөн яғыңды үлсәм менән камиллаштырҙы?»** («әл-Инфитар (Ярылыу)» сүрәһе, 82/6-7).

Уйлап ҡарағыҙ! Остоҡ ҡына күҙәнәктән яралған кеше ағзалары, һөлдәһе, мускул туҡымаһы, күҙҙәре һәм ҡолаҡтары, бауыры һәм бөйөрө, йөрәге һәм мейеһе камил булған, тойғолары һәм уйҙары камил булған иҫ киткес гүзәл ижад емешенә әйләнә.

Кеше проектын эшләрҙәй белгес бармы? Ул проектты тормошҡа ашырырҙай инженер бармы? Әйтергә кәрәк, мейенең бер генә күҙәнәге лә хаталанмай һәм йөрәккә юл тотмай! Бауырҙың бер генә күҙәнәге лә яңылышлыҡ менән күҙҙәргә табан уҡталмай! Һәр ағза тәндең үҙенә тейешле өлөшөндә ғәмәл ҡыла. Мәҫәлән, күҙҙәр, хатала-



ныр, эйәккә төшөп китмәй. Ҡолаҡтар аяҡ табанында формалашмай. Был анығ иҫәптәр һәм процестар әсәнең йәки баланың теләгенә һәм ихтыярына ла, күҙәнәк йәки ағзаға һалынған аҡыл механизмына ла буйһонмай. Мәҫәлән, бөйөр ҡанды фильтрлай, зарарлы матдәләрҙе айыра һәм организмдан сығара. Был эштәрҙе эшләү хәжәтен аңлатыусы аҡылы бармы әллә бөйөрҙөң? Юҡ шул! Ул илаһи ижад мөғжизәһе, Раббыбыҙҙың Ҡөҙрәте һәм Ихтыяры менән һәр күҙәнәккә, һәр ағзаға һәм фани донъялағы һәр нәмәгә һалынған программа! Күрә белгәндәр уны күрер. Ә үҙенең яратылмыш хәҡиҡәтенә күҙ йомғандарға Аллаһ Субхәнә үә Тәғәлә әйтә:

**«Әҙәмде Ул бер тамсынан яралтты, шулай булыуына ҡарамаҫтан, ул дошманлаша»** («ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/4).

Раббыбыҙ Аллаһ Ҡөрьәндә был хәҡиҡәттәрҙе аңлата һәм бойора: **«Уҡы! Һине бар ҡылған Раббың хаҡына уҡы!»** Уҡыуыбыҙҙы, бар ҡылыныуыбыҙ хәҡиҡәте тураһында уйланыуыбыҙҙы һәм аңлауыбыҙҙы теләй Ул беҙҙең. Илаһи Бөйөклөгөн, Ҡөҙрәтен күреүебеҙҙе теләй.

Хикмәт бабайҙың һүҙҙәре уны тыңлағандарҙың һәр береһенең йөрәгенә үтеп инде һәм рухи ләззәт бирҙе. Диванда ултырған Морат һәм уның балалары, иҙәндә аяғын бөкләп ултырған Искәндәр, ишек яңағына һөйәлеп торған Мораттың ҡатыны – барыһы ла, ғәжәпләнеп, тын да алмай Хикмәт бабайҙы тыңланы. Аҙаҡ Мораттың ҡатыны үҙе бешергән тәмле печенье менән сәй эсерҙе. Өлкәндәр өҫтәл артында һөйләшеп ҡалды, балалар, Искәндәрҙе лә үҙҙәре менән алып, ҡасыш уйнай башланы. Әммә ләкин ҡайтырға ваҡыт етте, Хикмәт бабай хужаларға имենлек,

иҫәнлек-һаулыҡ теләп доға ҡылды һәм ҡайтырға рөхсәт һораны.

Кире ҡайтып барғанда, улар көтөлмәгән яман хәлгә тарыны.



## ЙӘНӘ БЕР МӨМКИНЛЕК

Хикмәт бабай һәм Искәндәр иҫке парк аша үтеп барғанда, ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшкән, йәмһеҙ итеп хахылдап көлгән тауыштар ишетелде. Ағастар араһынан ҡулдарына шешәләр тотҡан өс иҫерек ир килеп сыҡты. Улар



тәңгәленә еткәс, алданыраҡ килгәне Хикмәт бабайға уҫал ҡарап һорау бирҙе:

– Нимә ҡарап тораһың? Һин минең ҡайғым тураһында нимә беләһең?

Ҡулы менән күкрәген төйөп, ул асырғанып ҡысҡырҙы:

– Минең йөрәгем яна!

Ҡалған икәүһе, бер-береһен терәп, аяҡтарында саҡ баҫып тора. Сәстәре туҙған, бысраҡ кейемле алдағы иргә 35-40 йәш тирәһе биреп була:

– Ике балам менән ҡатыным һәләк булды. Улар менән мин дә үлдем! Ҡаты һынай мине яҙмыш! Нимә эшләйем мин бында? Ни өсөн йәшәйем мин? Эсеүҙән башҡа тағы нимә ҡала миңә?

Хикмәт бабай өндәшмәйенсә генә уны тыңлап торҙо. Ысынлап та, был әҙәмдең йөрәге яна ине. Ул күңеленә йыуаныс бирерҙәй, ҡайғыһын баҫырҙай әмәл эҙләне, тик шешә төбөндә уны таба алманы. Хикмәт бабайға ул ярҙам һорап оран һалған кеүек тойолдо. Был иҫереккә ул асыуланманы, йәлләне генә. Динебеҙ ҙә бит гонаһты күрә алмаҫҡа, ә гонаһкәргә миһырбанлы булырға өндәй. Шуға күрә Хикмәт бабай уға дуҫтарса шулай тине:

– Улым! Мин һинән өлкән, моғайын, атайыңа йәштәшмендер. Тыңла әле әйткәнемдә. Ана, ауыл артында зы-

ярат. Унда ятҡандар кемдеңдер ата-әсәһе йәки балалары, кемдеңдер ире йәки ҡатыны. Аллаһ Тәғәлә уларға ғүмер биргән һәм китеү сәғәтен билдәләп ҡуйған. Беҙ ҙә – кемдер иртәрәк, кемдең һуңыраҡ - был фани донъянан китәсәкбеҙ, уларға ҡушыласаҡбыҙ.

Хикмәт бабай һөйләй башлағас, был әҙәм ҡапыл уңайһыҙланды. Ниндәйҙер вәсүәсәнән ҡотолғандай, үҙенә баҡты, эселеп бөтмәгән шешәһен күреп, артына йәшерҙе. Тын ғына ҡалып, был осраҡлы үткенсене тыңлай башланы:

– Хаҡтыр, улым, Раббыбыҙ Аллаһтың үҙенең ҡолдарына Мәрхәмәте һинең үҙ балаларыңа мәрхәмәтеңдән бик күп тапҡыр артыҡ. Кем белә, уларҙың был донъянан гонаһһыҙ китеүе киләсәк тормоштарында бөйөк бәхет булып әүерелеүе лә ихтимал. Беҙгә үҙебеҙ йәшәгән мәл генә билдәле. Киләсәк тураһында беҙ нимә беләбеҙ? Улар ниндәй кеше булыр ине? Ниндәй кеше булып китерҙәр ине? Яҡшы булырҙар инеме, әллә яман булырҙар инеме? Шуға күрә беҙ барыһын да тулыһынса Аллаһ Тәғәләгә тапшырабыҙ, Уға инанабыҙ, Уға тәүәккәл итәбеҙ, сөнки Ул ғына киләсәгебеҙҙе белә. Уның Мәрхәмәте беҙҙең мәрхәмәттән бик күпкә артыҡ, шуға күрә ҡайғырма!



Әҙәм ҡулының һырты менән күҙенән субырлап аҡҡан йәштәрен һөрөп алды. Яңы ғына бар донъяға үпкәләгән, бөтә кешеләрҙе башына төшкән бәләләрҙә ғәйепләгән был кеше

буранда ояһын юғалтҡан һәм Хикмәт бабайҙың күңел йылыһына ышыҡланырға тырышҡан ҡошсоҡҡа оҡшап ҡалды.

– Раббыбыҙ Аллаһ Изге Ҡөрьән аша иҫерткән, аҡылды томалаған барса нәмәне харам ҡылған. Әммә ләкин кеше һаман хәмергә ынтыла. Хәмер, бөтә организм өсөн мөһим булған күҙәнәктәрҙе ағыулап, әҙәм мейеһенә ҡурҡыныс һөжүм яһай. Был иһә уға бәйле барса ағзаларға – йөрәккә, бауырға, бөйөргә, ашҡаҙан аҫты биҙенә зыян килтерә. Хәмер күҙәнәктәрҙең генетик кодын боҙа, түлһеҙлеккә йәки кәмселекле, аҡылы камил булмаған балалар тыуыуға сәбәпсе була. Организмда хәмер емергес эшен башлай. Ҡанға килеп ингәс, ул туҡымаларға кислород ташыған, уларҙан углекислый газды алған эритроциттарға кире йоғонто яһай. Ғәҙәти хәлдә эритроциттарға бер төрлө заряд хас, шуға күрә улар бер-береһенән этәреләләр. Спирт эритроциттарҙың зарядын нейтралләштерә һәм тегеләр, ҙурыраҡ шарҙар барлыҡҡа килтереп, бер-береһенә йәбешә башлай. Күберәк эскән һайын, шарҙар ҙа ҙурая. Улар инде мейенең нескә капиллярҙары аша үтә алмай, ә бөкө кеүек уларҙы ҡаплап ҡуя. Нервы күҙәнәктәренең ҡайһы бер төркөмдәре ҡан менән тәьмин ителмәй, шулай итеп баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрендә үҙенә күрә зыяраттар барлыҡҡа килә. 100 грамм араҡынан һәләк булған мейе күҙәнәктәрен тергеҙеүгә уңайлы шарттарҙа ла 2-3 йыл китеүе ихтимал. Иртә менән баштың сатнап ауыртыуы баш мейеһенән үлгән күҙәнәктәрҙең сығарылыуына бәйле. Алкоголиктың мейеһе көйә ашаған кейеҙгә оҡшап ҡала. «Ләззәт» өсөн үҙенең камил мейеһен, шәхесен емергән кеше бына шундай хаҡ түләй. Аллаһ бойора:

**«Әй, мосолмандар! Хәмер эсеү, аҙғын уйындар уйнау, һындарға баш эйеү, фал астырыу, ырымланған уҡтар менән шыбаға һалыу – шайтан ғәмәлдәрелер, шаҡшылыҡтыр, уларҙан йыраҡ тороғоҙ, бәлки, бәхеткә ирешерһегеҙ. Иҫерткес һәм аҙғын уйындар менән шайтан арағыҙҙа дошманлыҡ сәсә; Аллаһты иҫкә төшөрөүҙән һәм намаҙҙан биҙҙерергә теләй. Һеҙ был эштәрҙән ваз кисә алырһығыҙмы икән?»** («Әл-Мәәидә (Табын)» сүрәһе, 5/90-91).

Наркотиктарҙың, аҡылды ала торған ағыулы матдәләрҙең зыяны һис тә кәм түгел. Был золомға йәбешкән кеше наркотиктарҙың, бер стакан араҡының психологик һәм физик ҡолона әүерелә. Сиргә алып барып еткергән ул ҡоллоҡтан ҡайһы берәүҙәр һуңғы һулышына ҡәҙәр ҡотола алмай. Бөйөк тәғәйенләнешен онотҡан, хатта ки уйлау һәләтен юғалтҡан, бахыр булып йәшәгән кешенең кеше тип аталырға хаҡы бармы икән? Ә бит кешене Аллаһ Субхәнә үә Тәғәлә иң гүзәл һүрәттә ерҙә хәлиф итеп яралтҡан һәм хәҡиҡәтте танығын өсөн тура юлды күрһәткән:

**«Һине юҡтан бар иткән Раббының исеме менән уҡый башла. Аллаһ инсанды бер ғәләктән (күҙәнәктән, яралғынан) хасил итте. Уҡы! Раббың һинең сикһеҙ йомартлыҡ эйәһе»** («Әл-Ғәләк (Яралғы тамсыһы)» сүрәһе, 87/1-3).

Ҡәҙерлеләрем минең, һау, имен аҡыллы булығыҙ! Аллаһтың бөйөк бүләгенән үҙегеҙ ҙә, башҡалар ҙа файҙа күрерлек итеп йәшәгеҙ, изге ғәмәлдәрегеҙҙе арттырыуға файҙаланығыҙ уны!

Ирҙең елкәһенә ҡулын һалып, Хикмәт бабай былай тине:

– Яман ғәҙәтеңде ташлап, тормошоңдо төҙәтергә насип итһен Аллаһ. Ниндәй генә ваҡиғалар булмаһын, бер көн килеп бөтәбеҙ ҙә был донъянан китәбеҙ һәм әхирәттә осрашабыҙ. Ул саҡта һин балаларың менән осрашырһың һәм улар менән Йәннәткә инерһең.

Ир ошондай хәлгә ҡалыуына ояла ине. Ишерек ике дуҫы ҡосаҡлашҡан килеш айҡала-сайҡала нимәлер көйләп китеп барғас, ул, башын эйеп, әйтте:

– Мин һеҙҙе рәнйеттем, ғәфү итегеҙ мине!

– Бошонма, улым! Һин ҡоҙоҡҡа төшөп киткән кешене күрһәң, ни эшләр инең?

– Арҡан ташлап тартып сығарырға тырышыр инем.



– Мин дә бына һиңә арҡан ташларға тырышам. Һине яман уйҙарҙан, йөрәк әрнеүеңдән, һағыштарҙан аралағым килә.

Ир түгелеп илай, хатта инде бите буйлап аҡҡан күҙ йәшен һөртөргә лә тырышмай ине.

– Раббыбыҙ Аллаһ балаларыңа һәм ҡатыныңа мәрхәмәтле булһын инде, уларҙың ятҡан ҡәберен Йәннәт баҡсаларынан бер баҡса итһен. Һәм һәммәбеҙгә лә Ул риза булырлыҡ итеп йәшәргә, ваҡыт еткәс, иман менән донъя ҡуйырға насип итһен.

Ир шунда, ҡулындағы эселеп бөтмәгән шешәһенә ҡарап, эргәлә торған суп һауытына ташланы.

Уның йонсоу йөҙөндә өмөт саҭкыһы балҡып китте. Хикмәт бабай уға былай тине:

– Һин, атай булараҡ, балаларыңды яратаһың һәм йәлләйһең. Уларҙың кескәй генә көйө үлеүе һиңә фажиғә. Әммә кешене, бөтә мәхлүктәрҙе бар ҡылған һәм уларға бер-береһенә ҡарата миһырбанлыҡ, мәрхәмәт бүләк иткән Раббыңды иҫкә төшөр. Бөтә йән эйәләренең бер-береһенә ҡарата мәрхәмәте – Уның был донъяға төшөргән рәхмәтенең йөҙҙән бер өлөшө генә.

Аллаһ Ихтыяры менән балаларың гонаһһыҙ көйө әхирәткә күскән, Ихтыяр итһә, Йәннәткә лә индерер. Уларҙың киләсәге ниндәй булырын беҙ бит белмәйбеҙ. Бәлки, ҙурайғас, улар яңылыш юл менән китер ине. Бер аятта әйтелә:

**«...Шулай ҙа була: һеҙ берәй нәмәнән нәфрәтләнәһегеҙ, ә ул һеҙҙең өсөн файҙалы; ҡайһы саҡ һеҙ үҙегеҙгә зарарлы булған нәмәләрҙе лә яратаһығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, һеҙ белмәйһегеҙ!»** («Әл-Баҡара (Һыйыр)» сүрәһе, 2/216). Шуға күрә, беҙҙең менән нимә генә булһа ла, Аллаһтың Ихтыярына, Рәхмәтенә өмөтләнергә тейешбеҙ.

### Гонаһ ҡоҙоғона төшөрөлгән ҡотолоу арҡаны

Балалары тураһында һүҙ сыҡҡас, ирҙең бөтә тәне тетрәнеп, күкрәгенән әрнеүле ыңғырашыу тауышы сыҡты. Хикмәт бабай йыуатыуын дауам итте:

– Пәйғәмбәребеҙҙең (сәлләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ибраһим исемле улы була. Ул үлгәс, Пәйғәмбәребеҙ (сал-

ләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) илай. Сәхәбәләре уға һорау бирә: «Һин дә илайһыңмы?» Ул әйтә: «Юҡ, Аллаһ йөрәгемә һалған миһырбанлыҡ хисе был. Күҙемдә – йәш, ә йөрәгем – Аллаһ менән һәм тулыһынса Уға тәүәккәлләй». Тимәк, беҙ ҙә уның һымаҡ булырға тейеш.

Ул яғымлы итеп ирҙең иңбашынан ҡаҡҡылап алды һәм әйтте:

– Ярлыҡау һора, улым! Әгәр ҙә ки кеше яман ғәмәлдәре өсөн үкенһә, был яман ғәмәлдәрҙе башҡаса ҡабатламау дәрәжәһендә күрә алмаһа, тәүбәһенән һуң намаҙ уҡыһа, ураҙа тотһа, сәҙаҡа бирһә, гонаһтарынан арыныу өсөн холҡон төҙәтһә, Аллаһ тәүбәләрҙе ҡабул итә.

Ир, илауҙан туҡтап, Хикмәт бабайҙы иғтибар менән тыңланы. Рух төшөнкөлөгө тәүәккәллек менән алмашынды. Хикмәт бабай йылмайып ҡуйҙы:

– Ҡулыңда булғанды ташлап, һин тәүге шартты үтәнең инде.

Ир, уның ҡулынан тотоп, былай тине:

– Бөгөн мине һеҙ мин ҡотолорға уйламаған тәрән ҡоҙоҡтан тартып сығарҙығыҙ. Бынан һуң мин яман ғәҙәттәремде ҡалдырасаҡмын. Ғәфү итегеҙ, хәмер, ҡоҫҡолоҡ еҫенән һеҙ ерәнәһегеҙҙер, моғайын, тик һеҙҙең яндан минең киткем килмәй.



Хикмәт бабай уға шундай яуап бирҙе:

– Улым, һинең ауыҙың һәм һинең телең Аллаһҡа тәсбих әйтер өсөн яратылған. Әйҙә, тәүҙә уларҙы һыу менән йыуайыҡ. Аҙаҡ «Бисмилләһ» әйтеп һәм Ҡөрьән аяттары менән уларҙы рухи яҡтан пакларбыҙ.

Һәм улар, тәһәрәт алыр өсөн, эргәләге шишмәгә юл тоттолар.

## Бәйән итеүсе ауыҙҙар, күҙҙәр, ҡулдар һәм аяҡтар

– Был фани донъяла беҙҙең телебеҙ генә һөйләй, әммә Хисап көнөндә тәнебеҙҙең бөтә өлөштәре лә һөйләйәсәк. Телебеҙ генә түгел, күҙҙәребеҙ ҙә, ҡолаҡтарыбыҙ ҙа, тиребеҙ ҙә... Бөтә тәнебеҙ телгә киләсәк. Тәнебеҙҙең һәр ағзаһы беҙ ҡылған яҡшы һәм яман ғәмәлдәр тураһында бәйән итәсәк. Ҡолаҡтарыбыҙ беҙ ишеткән яҡшы хәбәрҙәр һәм ғәйбәттәр хаҡында хәбәр итәсәк, телебеҙ – хаҡ һәм ялған һүҙҙәребеҙ хаҡында. Күҙҙәребеҙ - күргән барса яҡшы һәм яман нәмәләр тураһында. Көсөбөҙҙө яҡшы эштәргә сарыф иткәнбеҙме, әллә яман эштәргәме – һәммәһенә шаһитлыҡ ҡыласаҡ. Һәр изге ғәмәлебеҙ өсөн, хатта ки ул туҙан хәтле генә булһа ла, кеше сауабын аласаҡ; һәр золом өсөн дә, туҙан хәтле генә булһа ла, язаһын аласаҡ. Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә вәғәҙә бирә: **«Кем туҙан бөртөгө** (зәррә) **ҡәҙәрле генә изгелек ҡылған булһа ла, хатта шул да күренер. Кем туҙан бөртөгө** (зәррә) **ҡәҙәрле әшәкелек ҡылған булһа ла, ул да күренер»** («Әз-Зилзиләһ (Ер тетрәү)» сүрәһе, 99/7-8).



Хикмәт бабаһы шул һүҙҙәрҙе әйткәс, Искәндәрҙең йөрәге ҡыҫылды. Телем, ҡолағым һәм күҙем менән ниндәй хаталар эшләнем икән, тигән уй килде башына. Ә улар янындағы теге ир, ике усы менән маңлайын тотоп, ыңғырашып ҡуйҙы:

– Раббыма буйһонмаған йылдарым, наҙанлығым... Ҡиәмәт көнөндә нисек хисап бирермен ...

Илаһи әжерҙең хаҡлығын раҫлағандай, күкте ауыр ҡара болоттар ҡапланы. Оҙаҡламай ямғыр һибәләштерә башланы. Хикмәт бабай, усына төшкән ямғыр тамсыларына ҡарап, былай тине:

– Был Аллаһтың рәхмәте. Һис шикһеҙ, һәр бер ямғыр тамсыһы менән ергә фәрештә төшә...





# ДИҢГЕҘҘӘР АРАҺЫНДАҒЫ ПӘРҘӘ

Искәндәр өйөнә лысма һыу булып ҡайтып инде. Гөлбаныу өләсәһе, бәйләмен ташлап, еүеш кейемен систерешергә килде:

– Аллаға шөкөр! Шундай ямғыр, ә һин урамға сығып киттең! Лысма һыу булғанһың! Әйҙә ярҙам итәйем!



– Өләсәй, иплəп! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Искәндәр, – минең өҫтөмдә шул ҡәҙәр фәрештәләр ултыра! Улар йығылып ҡуйыуҙары бар!

Өләсәһе көлөп ебәрҙе:

– Уй! Мә шәә Аллаһ! Ғәфү итегеҙ инде. Улайһа, улыҡайым, еүеш нәмәләреңде үҙең иплəп кенә сис һәм душҡа йүгер. Ә мин һиңә ҡоро кейем һәм сәй әҙерләйем.

Оҙаҡламай Искәндәр, йылы кофта һәм йөн ойоҡ кейеп, өләсәһенең яңы бешкән бәрәместәрен ашап, һөтлө эҫе сәй эсеп ултыра ине инде.

– Беҙ һинең менән йәнә икәү ҡалдыҡ, балам! – тине өләсәһе. – Һин ҡунаҡта саҡта, әсәйең Айтуған менән ҡалаға китте. Балалар баҡсаһында карантин бөткән. Аллаға шөкөр, ямғырға тиклем китеп өлгөрҙөләр. Һин Хикмәт бабайың менән ҡайҙа булдың? Нимә күрҙең?

Сағыу тәьҫораттар ҡалдырған ваҡиғаларға бай был көн Икәндәргә бик тиҙ үткән кеүек тойолдо. Ул Гөлбаныу өләсәһенә Морат ағаһы, һынауҙарға бирешмәйенсә йәшәгән уның ғаиләһе, яңы тыуған кескәй Салиха, юлда осраған иҫерек ир, уның гонаһтарынан ваз кисеүе тураһында тәфсилләп һөйләне. Өләсәһе, ул һөйләгәндә, баш сайҡап: «СүбхәнАллаһ (Аллаһ бөтә етешһеҙлектәрҙән өҫтөн)!» тип ултырҙы.



Ҡапыл телефон шылтырап, уларҙың әңгәмәһен бүлде. Искәндәр трубканы алды. Ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙән һуң, ул өләсәһенә өндәште:

– Өләсәйем! Былтыр йәй минең менән дуҫ булған Илдар һәм Исмәғил исемле малайҙарҙы хәтерләйһеңме? Улар ҙа олатаһы менән өләсәһенә килгәйнеләр. Күрше урамда семәр йөҙлөклө тәҙрәле йәшел өйҙә йәшәй улар.

– Әлбиттә, улым. Мин уларҙың олатаһын һәм өләсәһен дә, күҙ алдымда үҫкән ата-әсәһен дә яҡшы беләм.

– Әле улар шылтыратты. Улар бөгөн генә ауылға килгән. Иртәгә башҡа малайҙар менән йылға буйына сәхрәгә сыҡмаҡсылар. Мине лә саҡыралар. Мөмкинме миңә барырға?

– Әлбиттә, теләгең булһа, бар, улым!

Искәндәр телефонды ҡулына алды:

– Малайҙар, мин дә барам! Минең һеҙгә сюрпризым да бар.





Һөйләшеп бөткәс, Искәндәр өләсәһенә серен систе:

– Килеп сыҡһа, мин сәхрәгә Хикмәт бабайҙы саҡырырға теләйем. Өләсәй, нисек уйлайһың, ул риза булырмы икән?

– Бер ҙә әйтә алмайым, балам.

– Хикмәт бабайҙан мин ғәжәйеп нәмәләр хаҡында белдем, шуға күрә дуҫтарымды ла уның менән таныштырғым килә. Бабайымдың бәйәндәрен тыңлау уларға ла файҙалы булыр ине. Илдарға был оҡшамауы ла ихтимал, әммә мин Хикмәт бабайҙы барыбер саҡырам, дуҫтарыма сюрприз эшләйем.

– Ярай улайһа, саҡырып ҡара.

Икенсе көндө Хикмәт бабаһын пикникка саҡырырға барғас, теге, йылмайып, Искәндәргә былай тине:

– Саҡырған ергә барыу – Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәте[5]. Әгәр ҙә ки саҡырыу дуҫыңдан икән, бармай ҡалыу ярамай.

Был һүҙҙәр Искәндәр йөрәгенә оло шатлыҡ булып тулды. Бабаһының саҡырыуҙы ҡабул итеүе, иң мөһиме уны «дуҫым» тип атауы уның өсөн оло бәхет ине.

## Бөйөк мәрхәмәт

Сәхрә өсөн һайланған урын ифрат матур ине. Йылға буйында йәм-йәшел аҡлан. Ҡояшта ялтлап ағып ятҡан йылға өҫтөнә бөҙрә талдар эйелгән. Илдар, Исмәғил, Сабирйән һәм тағы бер нисә малай шунда футбол уйнай. Искәндәр Хикмәт бабаһын дуҫтары менән таныштырҙы. Йөҙөндә ризаһыҙлыҡ сағылған Илдар ситкә китте һәм, янына Юлайҙы саҡырып алып, нимәлер һөйләй башланы. Искәндәр улар янына барҙы. Илдар һорау бирҙе:

– Был ҡарт кеше бында ни эшләй? Ошо буламы һинең сюрпризың? Беҙ бит яҡшылап ял итергә, уйнарға, бергә аралашырға теләгәйнек!

– Һеҙ Хикмәт бабайҙы белмәйһегеҙ! Ул башҡалар кеүек түгел! -тип Искәндәр һөйләй башлағайны, тегеһе ҡулын һелтәне:

- Эйе, шулай ти!» - тигән һүҙҙәр менән үпкәләп ситкә китте.

Хикмәт бабаһы Искәндәргә баш ҡаҡты: «Бар, һин дә уйна!» Тик малайҙар футбол матчын тамамлай алма-

5. Сөннәт – Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлы, Уның йәшәү рәүешенең үрнәктәре. Улар хәҙистәрҙә күрһәтелгән. Мосолмандар ул күрһәткән юлдан барырға тейеш.

ны. Ҡапыл көн боҙолдо. Ел сыҡты, күкте болот ҡапланы, ямғыр яуа башланы. Малайҙар, ямғырҙан ҡасып, эргәләге бесән киптерә торған лапаҫ аҫтына йүгерҙе.

Ә ямғыр болоттары йыйыла башлағанын күргән Хикмәт бабай балаларҙан алда уҡ ышыҡҡа килеп ултырғайны. Ямғыр көсәйеп, япма түбәһе өҫтөндә туҡылдай башланы.

Илдар, ямғырҙың һәм дуҫтарының тауышын бүлеп, ризаһыҙлығын белдерҙе:

– Ямғыр ғына етмәгәйне беҙгә! Ҡайһылай уңмаған көн! Хәҙер аҡлан еүеш, бысраҡ буласаҡ. Уйнай алмаясаҡбыҙ!

Хикмәт бабай ниндәйҙер мөһим бәйәнен һөйләһен өсөн, әйтерһең дә, ямғыр уларҙы махсус рәүештә бер лапаҫ аҫтына йыйҙы:



– Балалар, беләһегеҙме, ә бит ямғыр донъялағы иң ғәжәйеп тәбиғәт күренеше? Ул ерҙәге бөтә мәхлүктәргә төшөрөлгән иң бөйөк илаһи бәрәкәт.

«Нимә тураһында һөйләгән була ул?» тигәндәй, Илдар, ауыҙын турһайтып, тирә-яғына ҡарап алды. Хикмәт бабай, быны күрһә лә, күрмәмеш булып, һүҙен дауам итте:

– Бәлки, был гәлсәр кеүек саф ямғыр тамсыларының бер өлөшө элек океанда йәки диңгеҙҙә булғандыр, ә ҡалғандары – шишмәләрҙә һәм күлдәрҙә, йә булмаһа ҡоҙоҡтарҙа. Кем белә, бәлки, уларҙың ҡайһы



берҙәре кешеләрҙән аҡҡан тирҙер йәки бысраҡ йыуынты һыуылыр? Аҙаҡ улар менән нимә булған һуң? Ҡояш нуры тәьҫирендә улар парға әйләнә. Ер өҫтөнән бик юғары күтәрелгәс, пар һыуына, ваҡ ҡына тамсыларға һәм кескәй генә боҙсоҡтарға әүерелә. Күктә улар һәммәһе лә таҙара, йәғни Раббыбыҙ Аллаһ сөсө һәм тоҙло, әсе һәм татлы, таҙа



һәм бысраҡ һыуҙарҙы берҙәй пак һыуға әйләндерә.

**«Эсә торған һыуығыҙ тураһында нимә әйтерһегеҙ? Болоттан уны һеҙ яуҙыраһығыҙмы, әллә Беҙ яуҙырабыҙмы? Ихтыяр итһәк, ул ямғырҙы Беҙ** (эсмәҫлек дәрәжәлә) **тоҙло итер инек. Һеҙ** (Аллаһҡа) **шөкөр итергә тейеш түгелме икән?»** («Әл-Ваҡиғаһ (Ваҡиға)» сүрәһе, 56/68-70).

Шунан Аллаһ, бәләкәй болоттарҙы ҡыуып, елдәрҙе ебәрә, уларҙы берләштерә һәм ауыр ямғыр болоттары барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, өҫтө-өҫтөнә өйөлгән болоттар араһында һауа ағымдары барлыҡҡа килә, улар болоттарҙың аҫҡы ҡатламдарындағы һыу парҙарын хәрәкәткә килтерә. Болоттар ҡабара башлай. Һауа ағымдары һәм һыу парҙары, даимән буталып һәм берләшеп, тарайып һәм киңәйеп һыу фонтандары барлыҡҡа килерә. Ул һыу, болоттар араһынан урын табып, ергә ямғыр булып яуа. Заман фәндәре Ҡөрьәндә әйтелгәнде раҫлай түгелме:

**«Һин шул хәҡиҡәтте лә күрмәйһеңме ни, Аллаһ болоттарҙы** (теләгән еренә) **ҡыуа, һуңынан уларҙы ҡуша,**

**бер-береһе менән ҡатнаштырып,** (ҙур ҡара) **болотҡа әүерелдерә. Шунан ямғыр яуа башлай, күрәһеңме. Ул Күктән эсе тулы боҙ булған болоттарҙы индерә һәм, кемде хәүефле итергә теләһә, шуның өҫтөнә яуҙыра. Ихтыяр итһә, ул теләгән кешеһен бәләнән ҡотҡара. Уның йәшен саткыһы һуҡырайтыр дәрәжәлә күҙҙәрҙе ҡамаштыра»** («ән-Нур» сүрәһе, 24/43).

Хикмәт бабай тап шул аятты уҡығанда, йәшен йәшнәне һәм артынса, әйтерһең дә, бар тирә-йүнде дер һелкетеп күк күкрәне. Малайҙарҙың ҡайһы берҙәре, сүкәйеп, ҡолаҡтарын ҡапланылар. Аҙаҡ, шарылдап, лапаҫ уртаһына барып боҫоп, бер-береһенә һыйындылар. Хикмәт бабай уларға ҡарап йылмайҙы һәм йәнә бер аят уҡыны:

**«Елдәрҙе иҫтереп, болоттарҙы ҡыуҙырыусы – Аллаһ. Болоттарҙы, Үҙе теләгәнсә, Күк йөҙөнә таратыусы ла, киҫәкләп-киҫәкләп ямғыр яуҙыртыусы ла – Аллаһ. Аллаһ, ямғыр яуҙырып, теләгән ҡолдарына ҡыуаныс индерә»** («Әр-Рум» сүрәһе, 30/48).

Хикмәт бабайҙың сабыр ғына ултырыуын күреп, балалар ҙа яйлап тынысланды. Түбәгә, ергә тыпылдап тамған тамсылар ҙа күңелгә тыныслыҡ биргән рәхмәт ямғыры һымаҡ тойола башланы. Хикмәт бабайҙың һалмаҡ тауышы тамам тынсландырҙы.

– Ямғыр тамсыларының ергә яҡынлашҡас ни өсөн тиҙлекте кәметеүе тураһында уйланғанығыҙ булманымы? Ни өсөн ямғыр ергә ташҡын кеүек түгел, ә тамсылар булып төшә? Ерҙең тартыу көсө арҡаһында, меңәр метрлыҡ бейеклектән килгән тамсылар, ҙур тиҙлек менән төшөп, ерҙә төйәкләнеүселәргә ҡурғаш йәҙрә бөртөгө һымаҡ ҡурҡыныс тыуҙырырға тейеш кеүек бит. Ямғыр тамсыларын шул

ҡәҙәр мәрхәмәт менән кем төшөрә? Кем кешеләр һәм башҡа мәхлүктәр тураһында шундай хәстәрлек күрә?

Искәндәр, бер ни тиклем уйланып ултырғас, былай тине:

– Ямғырҙың ни өсөн мәрхәмәт булыуын аңлай башланым шикелле.

Хикмәт бабай, йылмайып, башын ҡаҡты һәм һүҙен дауам итте:

– Бөгөн беҙ әләккән ямғырҙың бер өлөшө йылға, күл, диңгеҙҙәрҙе тулыландырасаҡ, бер өлөшө ергә һеңәсәк. Һыу үле ерҙе тергеҙә, уята, һәм ер йәшеллеккә күмелә. Ҡөрьәндә әйтелә: **«Кәрәгенсә генә күктән ямғыр яуҙырған - Аллаһтыр. Беҙ** (ул ямғыр менән ҡороп бөткән) **үле тупраҡҡа йән бирәбеҙ...»** («Әз-Зухруф (Алтын хазина)» сүрәһе, 43/11).

Һеҙ, әлбиттә, емеш-еләкте яратаһығыҙ. Әйтегеҙ әле, кем нимә ярата?

– Алма! Әфлисун! Слива! Ҡарбуз! Киви! Ҡурай еләге! Ҡауын! Ер еләге! – тип һөрәнләй башланы малайҙар.

– Шәп, бик шәп! Һәр берећенең үҙенә генә хас күркәм еҫе, тәме, төҫө бар! Барса был үҫемлектәр ерҙән алынған минераль матдәләр ирегән һыу менән туҡлана. Ә уларҙың емештәре, япраҡтары һәм башҡа өлөштәре кешеләргә, хайуандарға һәм башҡа йән эйәләренә ризыҡ булып тора. Ерҙе ямғыр менән терелткән, үҫемлектәр үҫтергән һәм бөтә яратылмыштарға үҙҙәре мохтаж булған ризыҡты биргән Аллаһ Тәғәләнең рәхмәте был.

Иманыбыҙҙы нығытыр өсөн, Раббыбыҙ Аллаһ беҙгә шулай Ҡеүәтен, Ҡөҙрәтен күрһәтә. Үҙенең Көс һәм

Ҡөҙрәтенең ғәләмәттәрен Ерҙә лә, ете ҡат күктәрҙә лә, диңгеҙҙәрҙә лә һәм кешенең үҙенең яратылышында ла күрһәтә. Ҡөрьәндә әйтеп бөтөргөһөҙ күп ғилемдәр тупланған, ғалимдар уларҙың ҡайһы берҙәрен йөҙҙәрсә йылдарҙан һуң ғына аңлай һәм раҫлай алғандар. Ҡөрьән бөтә өлкәләрҙәге фәндәргә лә юл күрһәтеүсе, барса асыштарға мая булып тора…

Был һүҙҙәр Илдарҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Әле ул ишеткәндәр атаһы һөйләгәндәрҙән ҡырҡа айырыла ине. Уның һүҙҙәре буйынса, Ҡөрьән – урта быуаттарҙа ғәрәптәргә төшөрөлгән китап һәм заманыбыҙҙың аҡыллы кешеһенә уның бер файҙаһы ла юҡ, сөнки бөгөн кешеләр аҡылға һәм белемгә таяна. Шул турала уйлап торғандан һуң, Илдар һорау бирҙе:

– Был, ысынлап та, шулай микән?

– Эйе, улым! Бына мин һиңә бер тарих һөйләйем. 1962 йылда немец ғалимдары шундай асыш яһай: Аден боғаҙы һәм Ҡыҙыл диңгеҙ ҡушылған Баб-әл-Мәндәб боғаҙында Аден боғаҙы һәм Һинд океаны һыуҙары ҡушылмай, улар араһына, әйтерһең дә, күҙгә күренмәгән пәрҙә ҡуйылған. Һуңыраҡ, коллегаларынан күрмәксе, билдәле француз тикшеренеүсеһе Жак Ив Кусто ла үҙенең командаһы менән Гибралтар боғаҙында тикшеренеүҙәр алып бара. Атлантика океаны һәм Урта диңгеҙ һыуҙары меңдәрсә йыл бергә, шуға күрә улар, ҡушылып, тоҙлолоғо һәм тығыҙлығы бер үк төрлө булырға тейеш һымаҡ. Әммә уларҙың һәр береһенең үҙҙәренә генә хас үҙенсәлектәре бар. Ниндәйҙер күҙгә күренмәгән кәртә уларға ҡушылырға ирек бирмәй. Ғалимды йәнә бер нәмә хайран ҡалдыра: бактиһәң, 1400 йыл элек үк был күренеш хаҡында Ҡөрьәндә хәбәр ителгән: **«Ул** (береһе сөсө, икенсеһе тоҙло һыулы) **ике диңгеҙҙе**

**йәнәшә ағырлыҡ итте. Уларҙың араһына** (күренмәҫ) **ҡорма ҡороп ҡуйҙы. Улар, ҡушылмайынса, йәнәшә аға бирә. Шулай булғас, Раббығыҙҙың ҡайһы ниғмәттәрен ялғанға сығармаҡсы булаһығыҙ?»** («Әр-Рахмән (Мәрхәмәтле Аллаһ) сүрәһе», 55/19-21). Ғалимдың иҫе китә һәм ул һоҡланып әйтә: «Ант итеп әйтәм, заман фәндәрен 1400 йылға артта ҡалдырған Ҡөрьән кеше ҡәләме була алмай. Был Аллаһ Ҡәләме!»

Балалар, таң ҡалып, Хикмәт бабайҙың бәйәнен тыңланы. Илдар бигерәк тә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы, баҡтиһәң, Ҡөрьән - Аллаһтың һис иҫкермәй торған тере һүҙе икән! Ямғыр биҙрәләп ҡоймаһа ла, һаман яуа. Тамсылар, тупылдап, күләүектәргә, ергә, еүеш япраҡтарға төшә. Хикмәт бабай һүҙен дауам итте:

– Малайҙар! Күрегеҙ, күктән ниндәй таҙа һыу төшә. Ул барса мохтаждарҙың һыуһынын ҡандырасаҡ. Ергә китеп, үҫемлектәрҙе туйындырасаҡ, шишмәләрҙе тулыландырасаҡ. Ер өҫтөн бысраҡтан таҙартасаҡ. Йылғалар тулы һыулы буласаҡ. Әммә ләкин ерҙә паклығын юғалтһа, беҙҙең һымаҡ уҡ, һыу ҙа тыныслығын юғалта. Һәм шул саҡта, Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәләнең әмере буйынса, ҡояш уны парға әйләндерә, һәм ул күккә күтәрелә. Аҙаҡ, болоттарҙы йыйып, паклыҡ,



бәрәкәт, ниғмәт итеп, Раббыбыҙ уны яңынан ямғыр рәүешендә ергә төшөрә.

Эй, балалар, былар кешеләр менән булған хәлгә оҡшаш. Фани донъяға беҙ саф һәм гонаһһыҙ килеш киләбеҙ, әммә үҫә килә күңелебеҙҙе яман ғәмәлдәр һәм гонаһтар менән бысратабыҙ. Ә әгәр ҙә ки беҙ, ошо паклығын юғалтҡан ямғыр тамсылары кеүек, Ҡөрьән хәҡиҡәте диңгеҙенә һәм Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) океанына уҡталһаҡ, унда хозурлыҡ, тыныслыҡ табасаҡбыҙ. Ҡояштай мәрхәмәтле Раббыбыҙ Аллаһҡа ихлас тәүбәләр һәм доғалар менән мөрәжәғәт итһәк, беҙ, ҡояш нурҙары тәьҫирендә шыйыҡ томандай еңел булып ҡалған һыу тамсылары ише сафланырбыҙ һәм күктәргә ашырбыҙ. Ә һуңынан, ошо гәлсәр тамсылар һымаҡ, кешеләргә, бөтә яратылмыштарға рәхмәт, изгелек таратып, ергә атлығырбыҙ. Беҙ кешеләргә хозурлыҡ, шатлыҡ таратырбыҙ.

Хикмәт бабай шымып ҡалған малайҙарға ҡараны. Һыу үткәргән лапаҫ ямғырҙан яҡшы ышыҡ түгел ине. Балалар, өшөп, бер-береһенә һыйынған. Ул малайҙарҙың иң бәләкәйенә һорау бирҙе:

– Исемең нисек, улым?

– Ильгиз.

– Ямғыр ни өсөн мәрхәмәт булыуын аңланыңмы?

Ильгиз, еүеш битен һөртөп, яуап бирҙе:

– Аңланым! Минең дә ямғыр кеүек булғым килә. Ул иң таҙаһы, беҙҙең битте лә таҙарта!

Малайҙар көлөп ебәрҙе. Хикмәт бабай ҙа йылмайып ҡуйҙы:

– Ярай, бөгөнгә етеп торор, юғиһә һалҡын алдырыһығыҙ һәм ауырып китерһегеҙ.

Малайҙар, ҡайтырға теләмәйенсә ҡаршы килеп ҡараһалар ҙа, Хикмәт бабай йомшаҡ, әммә бәхәскә урын ҡалдырмай торған тауыш менән былай тине:

– Күреүемсә, әңгәмә һеҙгә оҡшаны. Улайһа, киләһе аҙнала баҡсама саҡырам. Беҙ һеҙҙең менән тауҙар, янартауҙар тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Ямғыр һаман яуа, тик көслө түгел. Хәҙер тиҙ генә өйҙәргә таралабыҙ. Ауырып, киләһе һабаҡтан мәхрүм ҡалғығыҙ килмәйҙер бит?



# БОЛОТТАР МЕНӘН БЕРГӘ ХӘРӘКӘТ ИТЕҮСЕ ТАУҘАР

Малайҙар, шау-гөр килеп, күләүектәр йыйылып ятҡан юлдан ауылға юл тоттолар. Улар, ҡулдарын йәйеп, ямғыр аҫтында йүгереп йөрөнөләр, устарына ямғыр тамсыла-



рын йыйҙылар. Ямғырҙың мәрхәмәт икәнлеген белгәс, кемгә Аллаһың мәрхәмәте күберәк төшә тип, ярыш ойоштормолар.

Дуҫтарын Хикмәт бабаһы менән таныштыра алыуына һәм бик күп ҡыҙыҡлы нәмәләр белеүҙәренә Искәндәр бик ныҡ һөйөндө.

## Хикмәт бабай баҡсаһы һәм тауҙар

Тәғәйенләнгән көн килеп етте. Зәңгәр күктә сағыу ҡояш нур сәсә. Офоҡтағы күкһел монар аша битләүҙәре урман менән ҡапланған тау теҙмәләре күренә. Искәндәр һәм уның дуҫтары Хикмәт бабайҙың баҡсаһында ултыра. Хатта Илдар ҙа бында. Искәндәрҙең Хикмәт бабаһын сәхрәгә саҡырыуына ул тәүҙә бик асыуланғайны, әммә уның менән һөйләшкәндән һуң, мөнәсәбәте үҙгәрҙе. Башҡаларға оҡшамаған был сәйер кешегә ул оло хөрмәт һәм ышаныс менән ҡарай башланы.

Хикмәт бабай балалар янына ҙур туҫтаҡ тотоп килеп сыҡты, унда тау булып алтынһыу һәм күк сливалар ята ине.

– Йәгеҙ, ябырылығыҙ, – тип шаяртып алды ул.

Балалар оло кинәнес менән һыйға үрелде. Ильгиз, һутлы сливаны рәхәтләнеп ашай-ашай, бабайҙың иҫенә төшөрҙө:

– Хикмәт бабай, һеҙ тауҙар һәм янартауҙар тураһында һөйләргә вәғәҙә биргәйнегеҙ.

Хикмәт бабай малайҙарға ихлас йылмайып ҡараны:

– Әлбиттә, һөйләйем, малайҙар! Матурлығы, бейеклеге, мөһабәтлеге менән тауҙар һәр ваҡыт кешеләрҙең иғтибарын үҙенә йәлеп итә. Тауға менгән һайын, кеше үҙен күктәргә яҡынайған һымаҡ тоя. Ерҙә ҡеүәтле тауҙар бар. Уларҙың күккә олғашҡан түбәләрендә быуаттар буйы ҡар түбәтәйҙәр ята. Хатта ки күп өлөшө тауҙарҙан ғына торған илдәр ҙә бар! Ә тауҙар ҡуйынында батша ҡаҙнаһындағы ише алтын-көмөш сәсмәләре, ғәжәйеп алмас, зөбәржәттәр, тимер рудаһы, күмер, мәрмәр... Урман менән ҡапланған тауҙарға һәм улар өҫтөнән йөҙөп барған болоттарға ҡарағыҙ әле.



Иғтибар менән тауҙарға ҡарап торған Искәндәр һоҡланып әйтеп ҡуйҙы:

– Ҡайһылай матур! Тауҙар ни ҡәҙәр мөһабәт! Ҡарағыҙ әле, аҡ карап кеүек йөҙөп барған болоттар утрау кеүек түбәләргә һырыла.

Һыйланып туйған малайҙар Хикмәт бабайҙы иғтибар менән тыңларға кереште.

– Әммә бер урынға ҡаҙаҡлап ҡуйылған һымаҡ тойолған тауҙар, ошо күктәге болоттар һымаҡ, гел хәрәкәт итә. Изге аятта ла тауҙарҙың күсергә һәләтле булыуы тураһында әйтелә:

**«Һин тауҙарҙың үҙ урындарында торғандарын күрермен, тип уйлайһыңмы? Улар болот күскән кеүек күсеп китер. Был бар нәмәне тәртип менән яралтҡан Аллаһтың әмере менән эшләнер. Шик юҡ, Ул һеҙҙең нимә ҡылғанығыҙҙың барыһын да белеп тороусы»** («Ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/88).

Ерҙә элек-электән кешеләр төшөнөп етмәгән процестар булып тора: ер тетрәүҙәр, янартауҙар атылыуы, ерҙәр ярылыуы, диңгеҙ ҡойондары, тауҙарҙың һәм утрауҙарҙың барлыҡҡа килеүе һәм юҡҡа сығыуы. Ғалимдар уның сәбәбен асыҡларға тырышҡандар һәм шундай һығымтаға килгәндәр: был процестар литосфера плиталары хәрәкәте арҡаһында барлыҡҡа килә. Беренсе булып континенттарҙың күсеү теорияһын 1915 йылда немец геофизигы Альфред Вегенер күтәреп сыға. Бик борон Ер Пангея (грек. «бөтә ер») атамалы бер ҙур континенттан торған, тип фараз итә ул. Ҙур ул континенттың ярҙарын берҙән-бер океан - Панталасса океаны йыуған. Йөҙҙәрсә миллион йыл үткән, һәм берҙән-бер континент бер нисә континентҡа бүленгән. Немец ғалимының гипотезаһы ҡыҙыҡһыныу тыуҙырмай. Бары тик XX быуаттың 70-се йылдарында ғына фән уға әйләнеп ҡайта.





Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә ғалимдар Пангеяның ике континентҡа бүленеүен асыҡлай. Берәүһе Африка, Австралия, Антарктика һәм Һиндостанды үҙ эсенә алған Гондвана була, икенсеһе – Европа, Төньяҡ Америка һәм Азияны үҙ эсенә алған Лаурасия. Артабан планета эсендә ҡыҙыу тектоник процестар дауам итә, континенттар бүлгеләнә һәм беҙ күреп өйрәнгән вағыраҡ материктар һәм океандар барлыҡҡа килә.



Ғалимдар, Ерҙең яһалма юлдаштарынан төшөрөлгән һүрәттәрҙе сағыштырып, континенттарҙың йылына 1-ҙән 5 сантиметрға ҡәҙәр тиҙлек менән күсеүен асыҡлаған. Шундай күсеш һөҙөмтәһендә ҡоро ер һәм диңгеҙҙәр араһындағы нисбәт яйлап үҙгәрә. Мәҫәлән, Атлантик океан йылдан-йыл яйлап киңәйә бара.

Ҡөрьәндә планета өҫтөнән йөҙгән тауҙарҙың хәрәкәте һауала йөҙгән болоттар кеүек булыуы тураһында әйтелә. Ғәжәп, аяттың йөкмәткеһен белмәгән ғалимдар тауҙарҙың хәрәкәтен һүрәтләгәндә тап шул терминды ҡуллана: «континенталь дрейф, йөҙөү». XIV быуат элек, Ҡөрьән төшөрөлгән ваҡытта, кешелек, әлбиттә, континенттар хәрәкәте хаҡында хәбәрҙар булмаған. Ана шул күп быуаттар элек кешелеккә Ҡөрьән асып һалған хәҡиҡәтте фән яңы ғына иҫбатлай алды. Һәм был Ҡөрьәндең йәнә бер мөғжизәһе. Ә тауҙарҙың төп функцияһы нимәлә икәнлеген беләһегеҙме? Улар ни өсөн бар ҡылынған?

– Ҡар-боҙҙары иреп, йылғаларҙы тулыландырһын өсөн, – тине Юлай.

– Хазиналарҙы һәм файҙалы ҡаҙылмаларҙы һаҡлар өсөн, – тине Исмәғил.

– Туризм һәм альпинизм менән шөғөлләнер өсөн! – тип өҫтәне Ильгиз.



Хикмәт бабай йылмайып баш ҡаҡты һәм һүҙен дауам итте:

– Бөтәһе лә дөрөҫ, әммә тағы бер нәмә бар. Тауҙар Ерҙең 10% майҙанын биләп тора. Ерҙең нисек төҙөлгәнен иҫкә төшөрәйек әле. Бының өсөн ябай ғына йомортҡа беҙгә ярҙам итер. Уның өҫтөндә йоҡа ҡабығы бар, ә аҫтында - шыйыҡ аҡһым ҡатламы, үҙәгендә – һарыһы. Еребеҙ ҙә шуға оҡшап тора. Өҫтә – бер аҙ ер ҡатламы, аҙаҡ “мантия” тип аталған ҡатлам башалана, ә уртала – ядро.

Беҙ йөрөгән ер ҡабығы төптәге мантия ҡатламы өҫтөндә йөҙөп йөрөгән кеүек. Шуға күрә ер өҫтө гел хәрәкәттә, уның ҡайһы бер өлөштәре күтәрелеүе, түбәнәйеүе, ҡыҫылыуы һәм киңәйеүе ихтимал. Ул, тере организм һымаҡ, хәрәкәтләнә, тын ала. Әгәр ҙә ки тауҙар булмаһа, ерҙең ғәләмәт ҙур өлөштәре булған литосфера плиталары ҙур һалдар кеүек мантия ҡатламы буйлап күсеп йөрөр

ине. Ер карап палубаһы ише һелкенер, баҫып йөрөп тә булмаҫ ине. Уның өҫтөндә тупраҡ туплана алмаҫ, һыу тормаҫ, тимәк үҫемлектәр үҫмәҫ, юлдар, биналар төҙөү ҙә мөмкин булмаҫ, ғөмүмән Ерҙә тормош булмаҫ ине. Әммә ундай хәлдәрҙең булғаны юҡ, сөнки тауҙар ер ҡабығын тотоп тора. Ә ер тетрәүҙәр ваҡытында был таш һаҡсылар стихияның ауырлығын үҙенә ала, уның емергес көсөн һүндерә. Быларҙың һәммәһе – Аллаһ Субхәнә үә Тәғәләнең Бөйөк Мәрхәмәте.

Заман фәндәре лә иҫбатланы: тауҙар ер өҫтөндә генә ҡалҡып тормайҙар, уларҙың тәрән «тамырҙары» ла бар. Тауҙың ер аҫтындағы өлөшө ер өҫтөндәге өлөшөнән күпкә ҙурыраҡ булыуы ла ихтимал. Шул сәбәпле тауҙарҙы литосфера плиталарын ҡаҙаҡлап ҡуйған сөйгә оҡшатырға мөмкин. Мәҫәлән, бейеклеге 9000 метрға еткән Эверест тауҙарының ер аҫтындағы тамырҙары 125000 метрҙан да ашып китә.

Ғалимдарҙың фекере буйынса, тауҙар һәм уларҙың тамырҙары литосфера плиталарының күсеүе, өҫтө-өҫтөнә менеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән. Шыуып өҫкә килеп менгән плитаның ҡырҙары аҫҡа бөгөлә, икенсеһенең ҡыры өҫкә күтәрелә, ярыла, һәм яйлап тауҙар, ҡалҡыулыҡтар барлыҡҡа килә. Аҫҡы ҡатламға килгәндә, ул ер аҫтында хәрәкәтләнеүен дауам итә, тармаҡтар формалаштыра һәм «тау тамырҙарына» әйләнә. XIX быуат аҙағында ғына ғалимдар фараз ҡылған ул хәҡиҡәт XIV быуат элек үк Ҡөрьәндә бына нисек тасуирлана:

**«Ергә, Ул һеҙҙең менән бергә һелкенмәһен өсөн, нык итеп тауҙар ултыртты, йылғалар, юлдар үткәрҙе** (бәлки, хаҡ юлдан китерһегеҙ)**»** («Ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/15).

**«Беҙ Ерҙе һеҙҙең өсөн яҫтыҡ кеүек итеп яһаманыҡмы ни? Тауҙарҙы ла ҡаҙыҡ кеүек итеп ултыртманыҡмы ни?»** («Ән-Нәбә (Хәбәр)» сүрәһе, 78/6-7).

Ысынлап та, тауҙы тасуирлау өсөн, «ҡаҙыҡ», һүҙенән дә нығыраҡ тап килгән һүҙ юҡ, сөнки дөрөҫ ҡағылған ҡаҙыҡтың күп өлөшө ер аҫтына китә...

## Ҡайнап торған ут океаны

Яңынан йомортҡа ағына әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Шулай итеп, беҙҙең планета төҙөлөшө буйынса йомортҡаға оҡшаш: һарыһы – Ерҙең үҙәге, аҡ өлөшө – мантия, ә йоҡа һәм ныҡлы ҡабығы – планетаның дөйөм радиусының 1 процентын ғына тәшкил иткән ер ҡыртышы. Ер өҫтөнә яҡыныраҡ булған мантияның температураһы Цельсий буйынса 400 - 900 градус тирәһе, ә үҙәгенә яҡыныраҡ урындарында - 4000 градус! Температура төрлөлөгө арҡаһында, мантия, сәйнүктә ҡайнаған һыу кеүек, даимән хәрәкәттә. Ул – планетабыҙ эсендәге утлы океан. Ер ҡыртышы хәрәкәтсән булған зоналарҙа литосфера плиталарының ситтәре мантияға сума һәм ирей. Ирегән тау тоҡомдарынан, һыу һәм газдарҙан магма бурлыҡҡа килә. Газдар кризис хәленә еткәс, улар ер ҡыртышындағы ярыҡтарҙан өҫкә уҡтала. Янартау ауыҙынан температураһы 800°С булған газдар, көл һәм таштар атыла башлай. Ҡыҙған газ болото унар-йөҙәр километр радиусындағы барса тере йән эйәләрен һәләк итә. 1500°С температураға барып еткән лава тупраҡ ҡатламын яндыра, бер нисә йөҙ километрға тарала. Ер йыйылған газдарҙан арына һәм тыныслана. Әгәр ҙә ки газдар шул рәүешле сыҡмаһа, ер шары, ныҡ итеп томаланған көйө ҡайнатырға ҡуйылған ҡаҙан һымаҡ,

шартлап ярылыр ине. Тимәк янартауҙар Ерҙең үҙәгендәге ҡайнар тынды сығарыусы мөрйәһе булып сыға.

Әммә ләкин ҡоро ергә ҡарағанда океан төптәрендәге янартауҙар күпкә әүҙемерәк. Океанолог ғалимдар асыҡлауынса, һыу аҫты янартауҙары һәм океандағы һырттар бик сәйер процестар арҡаһында барлыҡҡа килә. Баҡтиһәң, океан төбө үҙенән-үҙе ярылып, лава ағымын өҫкә сығара икән.

Нью-Йорктағы Колумбия университеты тикшереүсеһе Йен Джо Тан һөйләүенсә, әле күптән түгел генә ғалимдар ҡоро ерҙәге һымаҡ уҡ океан һырттары, янартауҙары йыйылған магма массаһының баҫымы аҫтында ерҙәр ярылыуы һәм уның өҫкә уҡталыуы сәбәпле барлыҡҡа килә, тип иҫәпләгән.

2005 - 2006 йылдарҙа Йен Тан һәм уның коллегалары Тымыҡ океандағы сейсмик зоналағы диңгеҙ төбөн тикшерә. Бер ни тиклем ваҡытттан һуң, 8 мең километрға һуҙылған һыу аҫты һырты янындағы үлсәү приборҙары яңы ер тетрәүен теркәй, ә уның һөҙөмтәләре ғалимдарҙы хайран ҡалдыра.

Баҡтиһәң, был ярылған урында янартауҙарҙың ҡабат атылыуы теорияға ярашлы яйлап башланмай, ә ҡапыл тоҡана. Тымыҡ океан төбөндә 35 километрға һуҙылған ғәләмәт ҙур ярыҡ барлыҡҡа килә һәм уның аша лава өҫкә атыла. Бөтә был процесс ҡеүәтле шартлауҙар менән оҙатыла. Ер ҡыртышы, лаваның баҫымына дусар булмайынса, үҙенән-үҙе ике өлөшкә бүленә.

Ни өсөн ер ҡыртышы үҙенән-үҙе ярыла? Әлегә ғалимдар быны аңлата алмай. Мәғлүмәттәр етерлек кимәлдә йыйылғас ҡына, геологтар был һорауға яуапты табасаҡ.

Ҡөрьәндә Аллаһ Тәғәлә ярылыу һәм асылыу сифаты булған ер менән ант иткән аят бар. Ант иткәндә, Аллаһ был сифаттарҙың мөһимлегенә баҫым яһай:

**«Хаҡтыр, кире ҡайта-ҡайта яуған ямғырҙың хужаһы – Аллаһ исеме менән, Күк исеме менән, ярылған Ер исеме менән әйтәм»** («Әт-Тариҡ (Таң йондоҙо)» сүрәһе, 86/11-12).

Бар ҡылыусыбыҙҙың ихтыярына буйһоноп, ҡуйынынан ҡайнар лаваны сығарыр өсөн Ерҙең үҙенән-үҙе ярылыуы – бөйөк илаһи мәрхәмәт. Әгәр ҙә ки артыҡ булған йылылыҡ энергияһынан лаваны сығарып ҡотолмаһа, Ерҙә тормош бөтөр ине. Кешелек яңы өйрәнә һәм аңлай башлаған был хәҡиҡәт Ҡөрьәндә 1400 йыл элек тасуирлана!

– Ғәжәп бит әй! – тип түҙмәй әйтеп ҡуйҙы Илдар. Хикмәт бабай аңлатҡан төшөнсәләр һәм күренештәр өйҙәрендә һәм мәктәптә ишеткәндәр менән һис тә тап килмәй ине шул. Ул һүрәтләгән донъя бөтөнләй башҡа донъя һымаҡ тойолдо. Тора-бара ул Хикмәт бабайҙың иң иғтибарлы, иң тырыш уҡыусыһына әйләнде.

## Ҡаҡшамаҫ иман

– Тауҙар темаһы бөтә Ҡөрьәндә урын алған. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәткә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьән Мәккә янындағы Нур тауының Хира мәмерйәһендә төшөрөлә башлай. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йыш ҡына унда яңғыҙы була. 610 йылдың Рамаҙан айында изге Ләйләтүл-Ҡәҙер төнөндә уның янында илаһи яҙмаларҙы ташыусы Ябраил[6] фәреш-

6. Ябраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) – Аллаһы Тәғәләнең вәхиен пәйғәмбәрҙәргә еткереүсе.

тә (ғәләйһис-сәләм) пәйҙә була һәм былай тип бойора: «Уҡы!» Пәйғәмбәребеҙгә (ғәләйһис- сәлләм) шулай итеп изге Ҡөрьәндең тәүге аяттары төшөрөлә.

Муса пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) Аллаһ Синай тауына саҡыра. Һәм ул тауға менә, Тува үҙәненә барып етә. Көндөҙ ураҙа тота, ә төндәрен, Раббыһы менән осрашыуға әҙерләнеп, ғибәҙәттә үткәрә. Болоттар туҡтауһыҙ сабышҡан зәңгәр күк аҫтында, мөһабәт тауҙар араһында яңғыҙ ҡалған пәйғәмбәр үҙен икһеҙ-сикһеҙ киңлектә юғалып ҡалған кескәй генә ҡом бөртөгө итеп тоя. Ул унда 40 көн һәм 40 төн була. Аллаһ уны Тәүратҡа өйрәтә – йәһүдтәрҙең изге китабына. Унда ул Аллаһтың тауышын ишетә һәм уның Нурын күрә. Тимәк, пәйғәмбәрҙәргә илаһи үәхи тапшырыу ҡайһы саҡ тауҙар менән бәйле.

Ә Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) илаһи ихтыярға буйһонған кәмәһе, бөйөк туфан һыуҙары буйлап алты ай йөрөгәндән һуң, әл-Джуди тауы янына килеп туҡтай.

Шулай уҡ Ҡөрьәндә «әл-Кәһәф», йәғни «Мәмерйә» тигән сүрә лә бар. Унда Аллаһҡа инанған егеттәр тураһында һүҙ бара. Боттарға табынған император-мөшрик диндәре өсөн егеттәрҙе эҙәрлекләй. Улар, ҡаланы ташлап китеп, мәмерйәлә йәшеренергә мәжбүр була. Аллаһ Тәғәлә ихтыяры менән улар мәмерйәлә 309 йыл йоҡлай! Ә аҙаҡ Раббыбыҙ уларҙы уята һәм, йөрәктәрендәге иманды нығытыу өсөн, кешеләргә күрһәтә.

Аллаһ диненең ҡаҡшамаҫ булыуы тау йәки ҡая менән сағыштырыла. Көслө иманға эйә булған кеше, ҡая кеүек, был донъяның һынауҙарына бирешмәй. Рухи ныҡлығы уны тирә-йүндәге әхлаҡһыҙлыҡтан һаҡлай. Эйе, ер ҡаҡшамаһын өсөн тауҙар кәрәк булһа, рухың һынауҙарға бирешмәһен өсөн, ҡаҡшамаҫ иман кәрәк.



Йомшаҡ ел баҡса буйлап йүгереп үтте, шым ғына ултырған малайҙарҙың баштарынан һыйпаны, япраҡтарҙы ҡыштырлатып һөйөп алды, Хикмәт бабайҙың һаҡалын да һыйпап ҡуйҙы. Хикмәт бабай, бер аҙ уйланып, тын торҙо, офоҡтағы нурға сумған тауҙарға күҙ һалды:

– Балаҡайҙарым! Әгәр донъяға күңел күҙе менән баҡһаҡ, тау һырттарының иңгә-иң терәп намаҙ тороуын күрербеҙ. Йәшел болон-ҡырҙар намаҙға саҡырған, Ғаләмдәр Раббыһы алдында сәждә ҡылырға саҡырған аҫалы балаҫ. Күл-йылғаларҙың ярға бәрелгән тулҡындары: «Аллаһ, Аллаһ!» -тип, тәсбих төймәләре кеүек, Йәнәбе Хаҡты зекер итә. Урмандағы ағастар ҙа, ботаҡтарын күккә төбәп, зекерҙән туҡтамай.

Хикмәт бабай, йылмая биреп, шымып ҡалған малайҙарға ҡараны:

– Эйе, балалар, был донъялағы барса нәмә – Илаһи мөғжизә. Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә уларҙы кешеләр өсөн бар ҡылған һәм уларҙы ошо һынау донъяһына ебәргән. Шундай бер көн килер: бөтә нәмә ошо тауҙар менән бергә юҡҡа сығыр. Шик юҡ, был – хәҡиҡәт. Күк ярылыр, йондоҙҙар сәселеп ҡойолор, диңгеҙҙәр ҡушылыр («әл-Инфитар (Ярылыу)» сүрәһе, 82/1-3), ә тауҙар ул көндө тетелеп бөткән йөн пәрәүездәре кеүек булыр («Әл-Ҡариғәһ (Афәт)» сүрәһе, 101/5). Бөтәһе буталыр, тауҙар ҙа, күк тә, ер ҙә ҡалмаҫ. Был донъя бөтөр. Аҙаҡ яңы донъя төҙөләр. Һәм яңы тормош башланыр. Унда кешеләр изге ғәмәлдәре өсөн сауабын

алыр, яман ғәмәлдәре өсөн – язаһын. Быларҙың әжере Йәннәт һәм Йәһәннәм булыр.

Хикмәт бабай, бәйәненең тамамланыуын аңғартып, усын усҡа һалып күтәрә бирҙе һәм былай тине:

– Йә, балалар, бөгөнгә етеп торор! Киләһе аҙнала беҙ боронғо заманда йәшәгән Ғәд һәм Çәмүд халыҡтары тураһында һөйләшербеҙ.





# ЕЛ ТУҘҘЫРҒАН СИҢЕРТКӘ ҺЫМАҠ

Һоҡланғыс ҡояшлы көн. Сәскәләрҙән сәскәләргә леп-леп итеп күбәләктәр оса, эшсән бал ҡорттары бал йыя, ҡырмыҫҡалар үҙ эштәре менән йүгергеләп йөрөй, ҡайҙалыр осоп барған ҡоштар ҙа ағас ботаҡтарына ултырып ял итеп китә... Әйтерһең дә, улар Хикмәт бабайҙың баҡсаһы-



на ниндәйҙер ҙур байрамға йыйылған.

Төрлө урамдарҙың малайҙары Хикмәт бабайҙың баҡсаһына ағыла башланы. Сәскәләргә күмелгән, япраҡтары шыбыр-шыбыр хәбәрләшкән ағастар күләгәһенә барып ултырҙы улар. Хуш еҫтәр, гүзәл тауыштар менән тулған, Аллаһтың һәр мәхлүге үҙен имен тойған был баҡса Хикмәт бабайҙың күңелдәргә йыуаныс биргән күркәм тауышынан тағы ла күркәмләнеберәк киткәндәй тойолдо.

## Һәммәһен хайран иткән Ирам баҡсалары

Бик боронғо заманда әлеге Йәмән һәм Оман дәүләттәре ерҙәрендә Ғәд ҡәүеме йәшәгән. Көслө һәм аҡыллы алпамышалар булған улар. Ерҙәре уңдырышлы, баҡсалары емешкә бай булған. Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә уларға бик күп байлыҡ, балалар һәм оҙон ғүмер биргән. Уларҙың күркәм баҡсаларында төрлө-төрлө еләк-емеш үҫкән. Йәшеллеккә, хуш еҫле сәскәләргә күмелгән, төрлө-төрлө емештәре һутланып бешкән, гәлсәрҙәй шарлауыҡтары шарлап аҡҡан Ирам баҡсалары уларҙы күргән һәр кешене хайран ҡалдырған. Эсендә хатта ки бассейндары булған, тауҙарҙы соҡоп яһалған йорттары иҫ киткес матур булған. Әммә Ал-

лаһтың йомартлығы менән бирелгән ул байлыҡ-муллыҡ тора-бара уларҙың тәкәбберлеген, аҙғынлығын арттырған. Байлыҡтарына маһайып, гел шулай мул тормошта йәшәрбеҙ, тип уйлағандар. Көстәренә таянып, беҙҙең өсөн мөмкин булмаған бер нәмә лә юҡ, тип уйлағандар. Шул рәүешле улар гонаһҡа һәм наҙанлыҡҡа батҡан.

Ғафиллыҡҡа батып, улар Аллаһ төшөргән диндән шул тиклем йыраҡлашҡан, хатта ки таштан, ағастан үҙҙәре эшләгән ялған илаһтарға табына башлағандар. Тышҡы ялтырауыҡтарға һәм зиннәттәргә ынтылып, бер-береһе менән байлыҡ йыйыуҙа, йорттарын һәм йорт йыһаздарын, кейемдәрен биҙәүҙә ярышҡандар. Ә шундай байлығы булмаған фәҡирҙәрҙе һәм мазлумдарҙы йәберләгәндәр, кәмһеткәндәр.

Золомға, түбәнлеккә ынтылышта хаттин ашып, улар көсһөҙөрәк ҡәүемдәргә һөжүм иткәндәр һәм уларҙың мал-мөлкәтен тартып алғандар. Әсирлеккә алған меçкендәрҙе бейек биналарҙың башына һөйрәп мендергәндәр һәм, шунан аçҡа ырғытып, күңел асҡандар. Кешеләрҙең ергә бәрелеп үлеүҙәрен күреп, рәхәтләнеп көлгәндәр. Уларҙың йөрәктәре ташҡа әйләнгән, унда остоҡ ҡына ла мәрхәмәт ҡалмаған. Кешегә хас күркәм сифаттарҙы юғалтып, улар ҡырағайға әйләнгәндәр.

Аллаһ, Үҙенең сикһеҙ мәрхәмәте менән, кешеләрҙе гонаһтар упҡынынан тартып сығарыу һәм хаҡ юлға төшөрөү өсөн, улар араһынан Һудты пәйғәмбәр итеп һайлаған. Раббыһынан үәхи алғас, тура юлға саҡырыу өсөн, Һуд халыҡтың йыйынына килгән. Ғәдтәрҙең хакимы Хәлжан алтын тәхеттә ултырған. Һуд пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) уның алдына баçып көр тауыш менән былай тигән:

**«...Әй, халҡым, Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылығыҙ, һеҙҙең өсөн Унан башҡа** (Илаһи ҡөҙрәткә эйә һәм) **тәңре булырҙай һис бер кем юҡ...»** («Әл-Әғраф (Кәртәләр)» сүрәһе, 7/65).

**«Әй, ҡәүемем! Раббығыҙҙан ярлыҡау теләгеҙ. Һуңынан тәүбәгә килегеҙ. Өҫтөгөҙгә мул ямғырҙар яуҙырһын һәм ҡеүәтегеҙгә ҡеүәт өҫтәһен. Гонаһ ҡылып,** (Аллаһтан) **йөҙ сөйөрмәгеҙ»** («Һуд» сүрәһе, 11/52).

Ябай ғына, ошоғаса башҡаларҙан бер нисек тә айырылып тормаған Һудтың уға һәм йыйылған халыҡҡа шундай нәсихәт бирергә баҙнат итеүенә Хәлжандың бик ныҡ асыуы килгән:

«Йә Һуд! Ҡайғы һиңә! Ундай уй һинең генә башыңа килгән! Беҙ иһә күмәк һәм көслө! Тең бер үҙең беҙҙе үҙ юлыңа төшөрмәксе булаһыңмы?»

Аҙаҡ, көлөп, былай тип өҫтәй:

«Беҙҙә көн һайын мең бала тыуа. Ә һин бер үҙең!»

**«Ул халыҡтың кәфер хакимдары әйтте: "Беҙ һинең мейеһеҙ** (йүләр) **икәнлегеңде ап-асыҡ күреп торабыҙ һәм, шөбһәһеҙ, һине алдаҡсы, тип уйлайбыҙ"»** («Әл-Әғрәф (Кәртәләр)» сүрәһе, 7/66).

**«Әй, Һуд! Һин беҙгә асыҡ бер мөғжизә күрһәтмәнең, һинең һүҙеңә ҡарап, беҙ ҙә тәңреләребеҙҙе ташламаясаҡбыҙ, һәм беҙ, һиңә ышанып, иман килтерәсәк түгелбеҙ»** («Һуд» сүрәһе, 11/53).

## Пәйғәмбәрҙәрҙе йәберләгәндәр менән нимә була?

Хәлжән һәм уның халҡы Һудҡа (ғәләйһис-сәләм) ышанмай. Уның аҡылдан яҙыуына ишаралап, улар былай тип көлә:

**«Беҙ, тәңреләребеҙҙең берәйһе һиңә зыян-зәхмәт һалғандыр, тип кенә әйтә алабыҙ!»** («Һуд» сүрәһе, 11/54).

Һуд (ғәләйһис-сәләм) шулай ғына ти:

**«Әй, халҡым! Мин мейеңеҙ** (йүләр) **түгел. Фәҡәт мин Ғаләмдәрҙең Раббыңы ебәргән бер илсе»** («Әл-Әғрәф (Кәртәләр)» сүрәһе, 7/67) һәм уларҙы ташлап китә.

Гонаһҡа, әхлаҡһыҙлыҡҡа батҡан халҡы нәсихәттәрен ҡабул итмәүенә, тура юлдан барырға теләмәүенә Һуд (ғәләйһис-сәләм) бик ныҡ ғазаплана. Ҡайғыға батып, ҡулдарын күккә күтәреп, ул Аллаһҡа былай тип доға ҡыла: «Йә Раббым! Мин халҡымды һиңә инанырға, золомдо, йәберләүҙәрҙе ҡалдырырға саҡырҙым, әммә был уларҙың гонаһтарын арттырҙы ғына. Күрәһең бит, мин улар алдында көсһөҙ!»

Хикмәт бабай тынып ҡалды һәм баҡсаһына баҡҡан килеш уйға талды. Малайҙар, ҡыҙыҡһынып, бәйәндең аҙағын көттө. Беренсе булып Ильгиздең түҙемлеге бөттө:

– Ә аҙаҡ? Ә аҙаҡ нимә булды?

– Ә аҙаҡ нимә булды, тиһегеҙме? Уларға тиклем дә, уларҙан һуң да пәйғәмбәрҙәрҙе алдаҡсыға һанап ҡаршы сыҡҡандарға ниндәй бәлә килһә, Ғәд ҡәүеменә лә шундай бәләләр килә. Киҫәтеп, Аллаһ Тәғәлә уларға ҡот осҡос ҡоролоҡ ебәрә. Элек гел артыуға барған ҡәүемдә ҡатындар бала тапмай башлай. Ун йыл буйы уларҙа балалар тыумай. Ерҙәрендәге шишимәләре һәм йылғалары ҡапыл ҡорой. Баҡсалары һулый, һарғая. Ирамдың гүзәл баҡсалары юҡҡа сыға, сүллеккә әйләнә. Аслыҡ, ҡеүәтле алпамышаларҙың көсөн алып, ҡаҡ һөйәккә ҡалдыра.

## Һуҡыр күҙҙәр һәм һаңғырау ҡолаҡтар

– Әммә гонаһтарҙан баш тартыу өсөн, бөтә был бәләләр генә Ғәд ҡәүеменә әҙ була. Ҡаты мохтажлыҡ кисерһәләр ҙә, улар тәүбә итмәй, боттарына табыныуҙы дауам итә. Улар Раббыбыҙ Аллаһҡа иман килтермәй. Һуд пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) алып килгән диндe ҡабул итмәй.

Искәндәр һорау бирҙе:

– Хикмәт бабай, бөтә ғәләмәттәргә, киҫәтеү, бәләләргә ҡарамаҫтан, улар ни өсөн хәҡиҡәтте күрә алмаған?

## Йорт һәм ағастарҙы алып киткән дауыл

– Күп ваҡыт та үтмәй, бер көндө күкте ҡара болоттар ҡаплай. Баш бирмәҫ халыҡ болоттарҙы күреп ҡыуана: «Бына бит, беҙ ете йыл көткән ямғыр килә!» Әммә ләкин был болоттар ямғыр түгел, илаһи яза алып килә. Ҡурҡыныс мәл яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Һуд пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) үҙ артынан эйәргән бик аҙ ғына кешеләр менән Ғәд халҡы алдына килеп баҫа һәм, уларҙы язанан йолоп ҡалырға теләп, һуңғы тапҡыр мөрәжәғәт итә:

– Нимә буласағын күрмәйһегеҙме әллә? Иман килтерә һалығыҙ!

Ғәд ҡәүеме иһә барыбер наҙанлыҡ йоҡоһонан уяна алмай:

– Юҡ, юҡ! Был ямғыр болоттары! – тиҙәр улар. – Беҙҙең илаһтарыбыҙ ялбарыуҙарыбыҙҙы ишетте. Хәҙер ул болот еребеҙгә ямғыр булып яуыр, һәммәһен туйындырыр.

Кешеләр шатланған, сәпәкәй иткән. Боттары янына барып, йыр һуҙа башлағандар. Ҡойоп ямғыр яуыр тип көт-



кән ҡайһы берҙәре, ерҙәрен эшкәртеп, орлоҡ һибергә керешкән.

Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе – ботаҡ тишеге. Һуңғы илаһи киҫәтеүҙе күрерлек, ишетерлек хәлдә булмаған улар. Яҡынлашып килгән бәләнең билдәһе булып, һалҡын ел иҫкән, яҡыная барған болоттан гөрһөлдәү ишетелгән. Ҡара болот яҡынайғандан-яҡынайған. Улар тәңгәленә килеп еткәс, бөтә тирә-йүнде ҡараңғылыҡҡа сорнаған. Оҙаҡламай инде ел түгел, юлында осраған барса нәмәне ватып-емереп, ағастарҙы тамырынан йолҡоп, ҡурҡыныс ғәрәсәт ябырылған. Кешеләр ышыҡланыр урын эҙләп йү-



герешкән, тик ҡасыр урын булмаған. Үлем кәферҙәрҙе бар ерҙә лә эҙләп тапҡан. Ғәрәсәткә эләккән кешеләр һауала саранча өйөрө кеүек осоп йөрөгән. Ел алып китмәһен өсөн, түңәрәк яһап, улар кейемдәренең итәктәрен бер-береһенә бәйләгән. Әммә ғәрәсәт мәмерйәләргә, таш һарайҙарға инеп ҡасҡандарҙы ла һалам кеүек кенә осороп алып сығып һәләк иткән. Ул, иң ҡеүәтле алпамышаларҙы эләктереп алып, һауаға күтәргән һәм көс менән ҡабаттан ергә быраҡтырған. Ҡөҙрәтле һәм данлы Раббыбыҙ Аллаһ елгә әмер биргән. Ел, тау-тау ҡомдо күтәреп алып, кәферҙәр өҫтөнә ташлаған. Ғәрәсәт ете төн, һигеҙ көн ҡоторған һәм бер кемде лә иҫән ҡалдырмаған. Уңдырышлы баҫыуҙар, һуғарыу ҡоролмалары, ҡасандыр гүзәл булған баҡсалар һәм Ғәд халҡы үҙе лә ҡом ҡатламы аҫтында тороп ҡалған. Ҡурҡыныс язаның өнһөҙ шаһиты булып, бушап ҡалған йорттар һәм һарайҙар ғына тороп ҡалған. «Бында ҡасандыр ҡеүәтле алпамышаларҙың Ғәд ҡәүеме йәшәгәйне!»- тип әйтә һымаҡ улар.

Хикмәт бабай ауыр һулап ҡуйҙы. Нәсихәтле был тарихты һөйләгәс, ул түбәндәге аяттарҙы уҡыны:

**«Бына Ғәд ҡәүеме шул булыр! Раббының аяттарын инҡар иттеләр. Уның пәйғәмбәрҙәренә буйһонманылар һәм һәр йәберләүсенең әмеренә буйһондолар»** («Һуд» сүрәһе, 11/59);

**«Шулар өҫтөнә Беҙ уларға донъяла уҡ рисуайлыҡ-хурлыҡ ғазабын татыу өсөн, афәт көндәрендә зәмһәрирҙәй әсе һыуыҡ елдәр иҫтерҙек. Әхирәт ғазабы тағы ла хәтәрерәк буласаҡ. Кәферҙәргә шунда ярҙам итеүсе табылмаҫ»** («Фуссиләт (Аңлатылды)» сүрәһе, 41/16);

**«Аллаһ уны** (ҡаты дауылды) **ете төн, һигеҙ көн буйына туҡтатманы.** (Әгәр һин шунда булһаң) **ул халыҡтың бер миҙгел эсендә эсе ҡыуыш ағастар кеүек ҡырылып ауғанын күрер инең»** («Әл-Хаҡҡаһ (Ҡотолғоһоҙлоҡ)» сүрәһе, 69/7).

Был бәйәнде тыңлаған малайҙар үҙҙәрен шул ваҡиғаларҙың шаһиты һымаҡ тойҙо. Искәндәр, ҡулын күтәреп, бөтәһен дә ҡыҙыҡһындырған һорауҙы бирҙе:

– Ә Һуд (ғәләйһис-сәләм) һәм уға эйәргән мосолмандар менән ни булды икән?

– Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә Үҙ Мәрхәмәте менән Һудты (ғәләйһис-сәләм) һәм уға эйәргән мосолмандарҙы был илаһи язанан ҡотҡара. Был ҡурҡыныс дауыл башланғас, улар ҡаланан китә. Аллаһ бит ниндәйҙер халыҡҡа яза би-



рергә теләһә, уның алдынан Ябраил фәрештәне (ғәләйһис-сәләм) ебәрә һәм Үҙенең пәйғәмбәренә хәбәр итә. Һәм пәйғәмбәр үҙенә эйәргәндәр менән бергә ул урындан китә.

Хикмәт бабай бошонҡо тауыш менән дауам итте:

– Ғәд халҡының һәләкәте – иманһыҙлыҡ һәм тәкәбберлек һөҙөмтәһе. Иблис тә бит, Аллаһтың Әҙәм ғәләйһис-сәләмгә баш эйергә бойорған әмерен тыңламайынса, тәкәбберлеге, мин-минлеге арҡаһында ҡәһәргә дусар була һәм Йәннәттән ҡыуыла. «Мин уттан яратылдым, ә ул – ерҙән», - ти ул. Һәм Аллаһ менән бәхәсләшә башлай. Ә бит Раббыбыҙ Аллаһ унан: «Кем яҡшы?» - тип һорамай.

Һис шикһеҙ, Аллаһтың ерҙәге илселәре булған пәйғәмбәрҙәр бер үк дингә – һис бер тиңдәше булмаған Берҙәнбер Аллаһҡа инанырға саҡыра. Улар, үҙҙәренән һис нәмә өҫтәмәйенсә, Йәнәбе Хаҡтың әмерҙәрен кешеләргә тапшыра. Хаҡтыр, уларҙың өйрәткәндәре – кешеләрҙең ер тормошо өсөн дә, мәңгелек тормошо өсөн дә ниғмәт. Пәйғәмбәрҙәргә эйәреүселәр – уңышҡа ирешә, уларға ҡаршы сығыусылар – үҙ-үҙҙәренә ҡарата ғәҙелһеҙлек ҡыла.





# ЯЗА БИРЕҮСЕ ТАУЫШ

Ғәд ҡәүеме темаһын тамамлағас, Хәмит бабай һыйланып алырға тәҡдим итте:

– Әйҙәгеҙ, алма ашап алайыҡ.

Тик ултырып бер аҙ арыған малайҙар был тәҡдимгә бик ҡыуанды, дәррәү ҡуҙғалып, Хәмид бабай артынан баҡсаның икенсе осона юл тоттолар.



## Донъялағы иң камил компьютер

Бар тирә-йүнгә хуш еҫ бөрккән һутлы алмалар ботаҡтарҙы ауырайтып ергә һалынған. Ҡайһы берҙә улар тупылдап ергә ҡойолалар. Һары, ҡыҙыл, алһыу алмалар ағас төптәрендә байтаҡ өйөлөп ята. Малайҙар менән бергә Хикмәт бабай бешкән алмаларҙың иң яҡшыларын йыйып алды, кран аҫтында яҡшылап йыуып, һыйланырға саҡырҙы.

– Мин һеҙгә хәҙер бер һорау бирәм.

Тәмләп алма ашап ултырған малайҙар, ҡыҙыҡһынып, Хикмәт бабайға ҡараны. Ә ул былай тине:

– Иң яңы компьютер ярҙамында башҡа компьютерға нимә ебәреп була?

Балалар бер-береһен бүлә-бүлә яуап бирә башланы:

– Интернет булһа, хат алышып була.

– Фотографиялар, фильмдар, электрон китаптар менән алмашырға мөмкин.

Искәндәр өҫтәп ҡуйҙы:

– Еҫтәрҙе тапшыра алыусы компьютер ҙа эшләргә уйлайҙар, тип уҡығайным.

Хикмәт бабай, йылмайып, йәнә һорау бирҙе:



– Ә алмалар, груша-
лар, банандар, персик-
тар тапшырыусы ком-
пьютерҙы күрмәнегеҙме?

Балалар көлөп ебәрҙе.

– Һеҙ көләһегеҙ, ә емештәрҙе тапшырыусы компьютерҙар, ысынлап та, бар. Ундай компьютерҙар йөҙҙәрсә!

Малайҙарҙың ҡыҙыҡһыныуы артҡандан-арта барҙы. «Уларҙың береһе бына һеҙҙең янда. Теләһәгеҙ, күрһәтәм,»- тип, Хикмәт бабай эргәләге алмағасҡа ымланы.

– Бына. Иң камил компьютер ул. Кәрәкле булған дым һәм минераль тоҙҙарҙы ерҙән алып, нәҙек, артабан ҡалын тамырҙар системаһы аша ағас олонона тапшыра. Олон туҡлыҡлы матдәләрҙе ҙур ботаҡтарға, тегеләре артабан кесерәктәренә, бөрөләргә оҙата. Мәле еткәс, бөрөләр асыла, һәм ботаҡтар ебәк селтәр һымаҡ нәфис сәскәләргә күмелә. Билдәле үҫеш фазаларын үтеп, ул сәскәләр гүзәл емештәргә – кешеләр өсөн мөғжизәле бүләккә әүерелә… Тамырҙар һурып алған файҙалы матдәләр уникаль программа буйынса эшкәртелә – һөҙөмтәлә кеше, бер ни тиклем ваҡыттан һуң, ғәжәйеп һутлы һәм тәмле алманы ботаҡтан өҙөп ала. Бына ошо илаһи компьютер була ла инде! Шунан да камилыраҡ нәмә бар? Өҫтәүенә ул тапшырған физик



объекттарҙан шундай уҡ яңы компьютер барлыҡҡа килә ала. Емеш эсендәге кескәй генә орлоҡто ергә ултыртһаң, шундай уҡ һоҡланғыс компьютер пәйҙә буласаҡ. Электрон компьютерҙар иһә, ниндәй генә камил булмаһындар, иртәме-һуңмы эшлектән сығалар.

Балалар хайран ҡалып алмағасҡа – Аллаһ Сүбхәнә Тәғәләнең ғәжәйеп Ҡөҙрәте менән бар ҡылынған донъялағы иң камил компьютерға ҡараны!

Искәндәр һәммәһенең уртаҡ фекерен әйтмәй түҙмәне:

– Ҡөрьәндән бәйәндәрегеҙҙе тыңлау бик оҡшай беҙгә. Әйтерһең, беҙ шул боронғо замандарға барып сығабыҙ, үҙебеҙ шул ваҡиғаларҙа ҡатнашабыҙ.



Хикмәт бабай, һөйөнөп, былай тине:

– Улайһа, йәнә бер тарих һөйләйем. Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм), уның мөғжизәле дөйәһе һәм Ҫәмүд халҡы хаҡында тыңлағыҙ.

Ғәрәптәрҙең Ҫәмүд ҡәбиләһе Хижаз һәм Шам араһындағы Хижр тигән ерҙә йәшәй. Ә һуңыраҡ Йәмәнгә, элек Ғәд ҡәүеме йәшәгән урынға күсә. Аллаһ был ҡәбиләгә бик күп ниғмәттәр бүләк итә.

Ҫәмүдтәр малсылыҡ менән шөғөлләнәләр, уларҙың мал-тыуары күп була, иген дә үҫ-

терәләр. Ҡаяларҙы бысып, үҙҙәренә йорттар һалалар, тигеҙ урындарҙа таш һарайҙар һалалар.

**«Уйлап ҡарағыҙ. Ғәд халҡынан һуң, улар урынына һеҙҙе бар итте. Һәм Ер йөҙөнә (Хижаз һәм Шам араһына) урынлаштырҙы. Ерҙең тигеҙ урындарына һарайҙар һалаһығыҙ, ҡалҡыу урындарында өйҙәр яһайһығыҙ. Инде Аллаһтың ниғмәттәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, фетнәселәр кеүек, Ер йөҙөндә буталсыҡтар сығармағыҙ»** («Әл-Әғрәф (Кәртәләр)» сүрәһе, 7/74).

Оҙаҡ ваҡыттар буйы Ҫәмүд халҡы, бәрәкәт-ниғмәттәрҙе биргән Аллаһты онота башлағансы, имен, етеш көн итә. Аҙаҡ улар башында Лат исемле алиһә булған таш һындарға табына башлай, тәкәббер һәм ҡаты күңеллегә әйләнә. Байҙар фәкирҙәрҙе йәберләй, малдарын көтөүлектәрҙә көтөргә, һыу сығанаҡтарынан файҙаланырға рөхсәт итмәй. Ғәд ҡәүеменең ҡурҡыныс яҙмышҡа дусар булыуын беләләр, әммә ләкин уларҙың һәләкәтен торлаҡтарының ныҡ булмауынан күрәләр. Таш һарайҙарында, йорттарында улар үҙҙәрен бик ышаныслы тоялар, һис ниндәй ғәрәсәттән дә ҡурҡмайҙар. Һәм Аллаһ уларға пәйғәмбәр итеп ҡәрҙәштәре Салихты (ғәләйһис-сәләм) ебәрә. Салих (ғәләйһис-сәләм) сауҙа менән шөғөлләнә, халҡы араһында зирәклеге, изге күңелле, ғәҙел булыуы, күркәм холоҡо менән айырылып тора.

**«Ҫәмүд ҡәүменә лә үҙ ҡәрҙәштәре Салихты күндерҙек. Әйтте: “Әй, халҡым! Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылығыҙ. Һеҙҙең өсөн унан башҡа тәңре булырҙай һис бер кем юҡ. Ул һеҙҙе** (тупраҡтан) **яралтты. Ул һеҙҙе шунда йәшәтте. Шуға күрә һеҙ унан ярлыҡау һорағыҙ. Унан һуң тәүбә итегеҙ. Раббым** (доға уҡыған) **кешеләренә яҡындыр,** (доғаларығыҙҙы) **ҡабул итеп яуап ҡайтарыусылыр”»** («Һуд» сүрәһе, 11/61).

Ул уларға Аллаһтың рәхмәтен һәм башҡа халыҡтар башына төшкән язаларҙы иҫкә төшөрә, тик уға бик әҙ генә кешеләр эйәрә.

**«Ҫәмүд** (халҡы ла) **пәйғәмбәрҙе** (Салихты) **ялған-сы тип атаны. Салих үҙ халҡына әйтте: “Аллаһтан ҡур-майһығыҙмы ни? Белеп тороғоҙ: мин һеҙгә ебәрелгән ышанысл ы пәйғәмбәр булам. Инде Аллаһтың язаһынан ҡурҡығыҙ һәм миңә эйәрегеҙ. Был эшем өсөн мин һеҙҙән һис бер түләү һорамайым. Миңә тигән бүләк бары тик Ғаләмдәрҙең Хужаһы булған Аллаһ хозурындалыр”»** («Әш-Шүғәрә (Шағирҙар)» сүрәһе, 26/141-145).

Гүзәл сифаттары, күркәм холҡо һәм әҙәбе менән айы-рылып торғанын күрһәләр ҙә, өгөт-нәсихәтенән һуң, Салих пәйғәмбәрҙән (ғәләйһис-сәләм) йөҙ сөйөрәләр.

Искәндәр, тулҡынланып, һорау бирҙе:

– Халыҡтың Салих пәйғәмбәрҙән (ғәләйһис-сәләм) биҙеүенең сәбәбе нимәлә һуң?

– Уны хөрмәткә лайыҡлы кеше тип таныһалар ҙа, Бер Аллаһҡа, Ғаләмдәр Раббыһына ғибәҙәт ҡылырға өндәүе сәбәпле күңелдәре һыуына. Атайҙарыбыҙ табынғанға ғибәҙәт ҡылыуҙы тыя алмайһың, тип белдерәләр уға. Улар ата-бабаларына ҡарағанда ла ныҒыраҡ аҙаша. «Нисек инде, күҙебеҙ менән күргән илаһтарға табыныуҙы тыйып, күҙебеҙ менән күрмәгән Аллаһҡа табыныуҙы бойораһың?» – тиҙәр улар.

Салих пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) хикмәтле өгөт-нәсихәтен, дәлилдәрен улар ишетергә лә теләмәйҙәр, “ялғансы”, “иҫәр” тип, ғәйепләүҙән бушамайҙар.

Әммә Салих (ғәләйһис-сәләм), Раббыһы әмер иткәнсә, ғәйепләү-эҙәрлекләүҙәргә сабыр итеп, халҡын Берҙән-бер Аллаһтың хаҡ диненә саҡырыуҙы туҡтатмай.

## Мөғжизәле дөйә

Ҫәмуд халҡы Салих пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) пәйғәмбәр булыуын ҡырҡа инҡар итә һәм Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуҙан баш тарта. Әйткән һүҙҙәренең хаҡлығын, Аллаһ илсеһе булыуын раҫлар өсөн, унан улар мөғжизә талап итә:

«Һин – беҙҙең кеүек үк бер кеше. Әгәр һүҙең хаҡ булһа, пәйғәмбәрлегеңә дәлил килтер. Беҙ һине һынарға теләйбеҙ: һинең менән изге ҡаяға барабыҙ, һәм тәңрең унан быуаҙ ҡыҙыл дөйә сығарһын, буласаҡ дөйә балаһы ла шундай уҡ ҡыҙыл булһын ...»

Ильгиз, аптырап, ҡашын сөйҙө:

– Ҡыҙылмы?!

– Эйе. Ул замандарҙа ғәрәптәрҙә ҡыҙыл дөйәләр бик ҡиммәт һаналған. Шулай итеп, улар ҡая таш эсенән быуаҙ ҡыҙыл дөйәне сығарыуҙы һорағандар. Уның һөтө ҡышын йылы, ә йәйен һалҡын булыуын, сирле эсһә – һауығыуын, ә фәҡир эсһә, байып китеүен теләгәндәр.

Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) намаҙ уҡыған һәм, уларҙың теләктәрен үтәүҙе үтенеп, Аллаһҡа доға ҡылған. Шул уҡ мәлдә тау тетрәгән, һәм унан быуаҙ дөйә сыҡҡан һәм әйткән: «Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Салих – Уның пәйғәмбәре».

Был мөғжизәне күреп, ҡәбиләнең ҡайһы бер кешеләре Аллаһҡа иман килтергән. Улар Уның ҡөҙрәте ал-

дында баш эйгән һәм әйткән: «Салих дөрөҫөн әйткән: Аллаһ – Бер, Уның тиңдәше юҡ». Ундай кешеләр әҙ була, әммә уларҙың имандары дөйә сыҡҡан ҡая таш кеүек ныҡ була. Өс көндән һуң бик гүзәл дөйә балаһы тыуа. Ул һәр ваҡыт әсәһенә эйәреп йөрөй, һәм уның янында үҙен бик тыныс тоя, әсәһе уны һөйөп тәрбиәләй. Дөйә һәм уның балаһы рухи яҡынлыҡ һәм мәрхәмәт өлгөһөнә әүерелә.

«Был Салихтың дөйәһе»,-ти Ҫәмүд халҡы. Әммә пәйғәмбәр уларға былай ти: «Эй халҡым! Аллаһ Тәғәләнең был дөйәһе – һеҙгә киҫәтеү, билдә. Ул Аллаһ биләмәһендә утлап йөрөһөн. Уға һәм һеҙгә һыулау – билдәле көндәрҙә. Уға золом ҡылмағыҙ, юғиһә һеҙгә Аллаһтың ҡәһәре, язаһы төшөр».

Көндәр үтә. Дөйә һәм уның балаһы Ҫәмүд ҡәбиләһенең йәшел болондарында утлап йөрөй һәм Аллаһты данлай. Теләгән һәр кеше барып уның фатихалы һөтөн эсә.

### Ҫәмүд халҡының шөкөрһөҙлөгө

Кәферҙәр Аллаһтың ошо бөйөк мөғжизәһе алдында үҙен көсһөҙ итеп тоя. Әммә тәүбәгә килер урынға улар иманлыларҙы йәберләй, мыҫҡыл итә.

Улар араһындағы туғыҙ бай үҙҙәренең тәкәбберлеге, аяуһыҙлығы менән айырыуса айырылып тора. Рәхмәтле булыу, ғәйебеңде таный белеү, һөйөү, миһырбанлылыҡ кеүек хистәр уларға бөтөнләй ят була. Улар бары тик үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғырта беләләр.





**«Был ҡалала туғыҙ ир кеше** (туғыҙ яуыз төркөм) **бар ине. Былар тирә-яҡҡа боҙоҡлоҡ таратыусы ине. Улар изгелек ҡылыу тураһында уйлап та ҡараманылар»** («Ән-Намел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/48).

Салих (ғәләйһис-сәләм) уларҙың диндәренә хәүеф менән янай. Һәм мөшриктәр, пәйғәмбәрҙе һәләк итер өсөн, яман план ҡора. Тәүге нәүбәттә улар дөйәгә золом эшләргә уйлайҙар, сөнки ул Салих пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) пәйғәмбәрлек миссияһының йәнле көүҙәләнеше булып тора.

– Улар Аллаһтың язаһынан ҡурҡмаймы ни? – тип шөбһәләнеп һорау бирҙе Исмәғил.

– Аллаһтың асыуынан бигерәк улар үҙҙәренең дәрәжәһен, власын юғалтыуҙан ҡурҡа, шуға күрә, илаһи әмергә буйһонмайынса, дөйәне үлтерә.

Исмәғил, илай яҙып, һәммәһен борсоған һорауҙы бирҙе:

– Ә дөйә балаһы ни эшләне инде?

– Бер риүәйәт буйынса, дөйә балаһы ҡотола, ә икенсеһе буйынса, мөшриктәр уны үлтерәләр һәм итен ашайҙар.

Был ваҡиға малайҙарҙы хафаға һалды. Үҙ мәхлүктәренә мәрхәмәтле булған Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә дөйә балаһын булһа ла ҡотҡарғандыр, тип ышанғыһы килде уларҙың. Ауыр һулап, Хикмәт бабай бәйәнен дауам итте:

– Салих пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) был хәбәр тәрән ҡайғыға һала. Ул, һәләк булған дөйә янына барып, әсе күҙ йәштәрен түгә-түгә Аллаһтан аҙған халҡын тура юлға төшөрөүҙе һорай. Ул халҡына мөрәжәғәт итә: «Йәә хәлҡым! Ниңә һеҙ яҡшылыҡҡа түгел, яманлыҡҡа ынтылаһығыҙ? Ни өсөн һеҙ Аллаһтан ғәфү үтенмәйһегеҙ? Бәлки, ул һеҙҙе ярлыҡар!»

Әммә тегеләре, кәферлектәренә һәм тәкәбберлектәренә барып, уға талап ҡуя:

– Эй, Салих! Илсе булһаң, вәғәҙә иткәнеңде алдыбыҙға сығар!

Ул уларҙан борола һәм әйтә:

– Йәә халҡым! Мин һеҙгә Раббымдың һүҙен ишеттерҙем, һеҙ тура юлға баҫһын тип, нәсихәт бирҙем, тик һеҙ нәсихәт биреүселәрҙе яратмайһығыҙ.

## Яза биреүсе тауыш

– Тормош менән ләззәтләнер өсөн һеҙгә өс кенә көн ҡалды. Һис шикһеҙ, һеҙгә яза килер, сөнки һеҙ – золом эйәләре. Һеҙ Аллаһ Һүҙен инҡар иттегеҙ һәм, яҡшылыҡ ҡылырға яратмаған өсөн, Уның дөйәһен үлтерҙегеҙ.

Дөйә үлтерелеп, таң атҡас, алдағы ҡурҡыныс ваҡиғаларҙың ғәләмәте булып, элек дөйә утлап йөрөгән болондарҙа ер аҫтынан фонтан һымаҡ ҡан урғыла башлай. Ҡоҙоҡтарҙа һыу ҡанға әйләнә, хатта ки ағастарҙың япраҡтары ла, ҡан кеүек, ал төҫкә инә. Ә кешеләрҙең йөҙҙәре һарғая. Аллаһҡа ҡарата енәйәт эшләгән Ҫәмүдтәр дөйәне үлтергәндәре өсөн Салих пәйғәмбәрҙән (ғәләйһис-сәләм) ғәфү үтенмәй, Аллаһҡа ялбарып тәүбә итмәй. Киреһенсә, улар тағы ла яманыраҡ ниәт менән янып йөрөй - Салих пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) үлтерергә уйлай. Аллаһтың әмере буйынса, боҫҡонда ятҡан был енәйәтселәр өҫтөнә Ябраил фәрештә (ғәләйһис-сәләм) таш өйөмө төшөрә. Раббыбыҙ Аллаһ әйтә: **«Шулай итеп улар хәйлә ҡорҙо. Беҙ ҙә һиҙҙермәй генә уларға хәйлә ҡорҙоҡ»** («Ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/50).

Бынан һуң Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) үҙенә эйәргән 4 000 кеше менән ҡаланан китә: **«Әмерем менән Салихты һәм уның менән бергә иман килтергәндәрҙе, Беҙҙең рәхмәтебеҙ булараҡ,** (язанан) **һәм мәсхәрәнән ҡотҡарҙыҡ. Шөбһәһеҙ, Раббың ҡеүәтлелер, еңеүселер!»** («Һуд» сүрәһе, 11/66).

Иманлылар ҡаланы ташлап киткәндең икенсе көнөндә мөшриктәрҙең йөҙҙәре ҡыҙара. Өсөнсө көнөндә – ҡарая. Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәләнең фарманы буйынса Ябраил (ғәләйһис-сәләм) уларҙың таш йорттарын емерә. Ҫәмүд халҡы байлыҡтарына, ныҡлы таш йорттарына өмөт

бағлай, һуҡырҙарса шулар ярҙамында ғәҙел язанан ҡотолмаҡсы була. Әммә ләкин өмөттәре аҡланмай. **«Уларҙы ла иртәнге яҡта ҡурҡыныс тауыш** (һәләкәт) **ҡапланы. Йыйған байлыҡтары уларҙы һис бер язанан ҡотҡара алманы»** («Хижр (Хижр иле)», 15/83-84). Бына шулай Ҫәмүд ҡәүеме юҡҡа сыға. Уларҙың һәммәһе ер аҫтынан килгән һәләкәтле тауыштан йән бирә, иманһыҙлыҡтары, ҡылған золомдары өсөн илаһи яза була был. Иманһыҙ ҡәүем Салих пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) дөйәһен үлтереп дүрт көн үткәс кенә, уларҙың харабаға әйләнгән ҡалаһы өҫтөнә ҡояш ҡалҡа.

– Ә Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) һәм уға эйәргән иманлылар менән ни булды икән? – тип һорау яуҙыра башланы малайҙар.

– Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) һәм уға эйәргәндәр ихрам (Мәккәлә хаж ҡылыусы кеше, изге ергә баҫҡас, билдәле туҡталышта ғөсөлләнеп кейә торған кейем) кейә һәм, ҡыҙыл дөйәләргә атланып, Аллаһты данлап, Мәккәгә инә, шунда йәшәргә ҡала. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, улар Ҫәмүд ҡәүеме йәшәгән ерҙәргә бара һәм һауаланып йөргән мөшриктәрҙең ниндәй яҙмышҡа дусар булғанын күрә. Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) һәм уға эйәргән мөьминдәр, йөрәктәрен иман нуры менән яҡтыртҡан өсөн, шөкөр итеп, Аллаһҡа рәхмәтен белдерә һәм фатихалы Мәккәгә кире ҡайтып китә.



# БАЛ ҠОРТТАРЫНЫҢ СЕРЛЕ ДОНЪЯҺЫ

Искәндәр, өләсәһенең йортона табан боролған көмөш төҫөндәге «Рено» машинаһын күреп, «Атайым килде!» – тип һөрәнләп, урамға сығып йүгерҙе. Ата һәм ул, бер-береһен сәләмләп ҡосаҡлаштылар һәм ҡосаҡлашҡан көйө өйгә йүнәлделәр. Гөлбаныу өләсәй, йылмайып, уларҙы ишек төбөндә көтөп тора ине.





Атаһы ауылға командировканан ҡайтышлай һуғылған икән. Уҙған ял әсәһе, атаһы һәм Айтуған бергәләп ҡайтырға уйлағайнылар, әммә ҡустыһы ауырып киткәс, был ниәттәре тормошҡа ашманы. Атаһы улының эштәре менән ҡыҙыҡһынды. Искәндәр башҡа малайҙар менән йыш ҡына Хикмәт бабай баҡсаһына барыуы һәм унда бик күп ҡыҙыҡ нәмәләр белеүе тураһында һөйләне. Табын әҙерләп йөрөгән өләсәһе лә һүҙгә ҡушылды:

– И-и-и! Хикмәт бабаһының баҡсаһына ни ҡәҙәр ҡыҙыҡһынып, шатланып йүгергәнен күрһәң ине уның! Моғайын, мәктәбенә дәрескә шулай йүгермәйҙер!

– Нимә һөйләй һуң Хикмәт бабайың? – тип һораны атаһы.

Искәндәр, рухланып, атаһына тауҙар, янартауҙар, күҙгә күренмәгән кәртә менән айырылған диңгеҙҙәр, ғәрәсәт осороп алып киткән алпамышлар, мөғжизәле дөйә һәм уның балаһы тураһында һөйләне. Атаһы уны ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы һәм быларҙың күбеһен тәүләй ишетеүе тураһында әйтте. Улынан да, Хикмәт бабаһынан да бик ҡәнәғәт икәнлеген белдерҙе:

– Афарин, Искәндәр. Тырышлығың һәм уңыштарың өсөн һине бүләкләргә кәрәк,- тине ул һәм улына аҡсаны ғәҙәттәгенән күберәк бирҙе. – Һәм тағы ла бер нәмә әйткем килә... Әсәйең Морат ағайыңдың ғаиләһе, уларҙың

ауыр хәле хаҡында һөйләне. Улым, ошо аҡсаларҙы Хикмәт бабайыңа алып барып бирсе, Морат ағайыңа һәм уның ғаиләһенә тапшырһын. Был - «аманат», йәғни һаҡларға ҡушып бирелгән нәмә. Шуға күрә иғтибарлы бул, – атаһы Искәндәргә ҙур булмаған конверт һондо, моғайын, унда аҡса булғандыр.

Ул дауам итте:

– Аллаһҡа шөкөр, беҙ – мосолмандар. Ә хәлле мосолмандар өсөн, әл-хәмдү лил-ләһ, беҙ шулар иҫәбенә инәбеҙ, йылына бер тапҡыр алған килеменең ҡырҡтан бер өлөшөн мохтаж ҡәрҙәштәренә биреү зарур. Ул «зәкәт» тип атала. Был аҡсалар иман ҡәрҙәштәребеҙгә ҡыйынлыҡтарҙы еңелерәк үткәреп ебәрергә ярҙам итер, шулай уҡ ниғмәттәрен бүләк итеп биргән Раббыбыҙға рәхмәтебеҙ ҙә булыр.

### Искәндәрҙең бүләге

Ишек артында Гөлбаныу өләсәйҙең ниндәйҙер ҡатын менән һөйләшкәне ишетелде. Моғайын, кемдер хәл белергә ингәндер. Оҙаҡламай өләсәй ниндәйҙер пакет тотоп килеп инде.

– Туғанымдың ҡыҙы Асия килде. Уларҙың ҙур умарталығы бар, бал һурҙыра башлағандар, - тип, өләсәй ауыр пакетты өҫтәлгә ултыртты. – Үҙең менән ал, кейәү. Айтуғанға файҙалы булыр, тиҙерәк шәбәйеп китһен инде. Шуны уйлап торам әле: тирә-йүндәге барса малай-шалай, шуҡлыҡтарын ҡалдырып, бал ҡорттары һымаҡ Хикмәт ҡарт баҡсаһына йыйыла, шуға күрә уға бүләк бирергә кәрәк. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ был турала?

– Әлбиттә! – тинеләр бер тауыштан Искәндәр менән атаһы, һәм бер-береһенә ҡарап көлөп ебәрҙеләр.

– Бик хуп! Улыҡайым, балдың ошо банкаһын уға алып барырһың!

## Баллы һөйләшеү

Бер аҙнанан, малайҙар йәнә Хикмәт бабай баҡсаһына йыйылғас, Искәндәр остазына үҙе менән алып килгән пакетты һондо:

– Был – һеҙгә. Өләсәйем бирҙе.

Искәндәр һәм уның пакеты нимә хаҡындалыр ҡыҙып-ҡыҙып һөйләшкән малайҙарҙың бөтә иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Хикмәт бабай пакет эсенә күҙ һалды:

– Ҡарайыҡ әле, нимә алып килде икән беҙҙең Искәндәр! Ниндәй гүзәл һәм ҡиммәтле бүләк! Ҙур рәхмәт! Аллаһ Тәғәлә Гөлбаныу күршебеҙгә һаулыҡ һәм бәрәкәттәрен арттырып бирһен инде! Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнсә, бал – күп ауырыуҙан шифа. Был балды йыйыу өсөн, кескәй генә бал ҡорто тәүлек эсендә бер нисә мең сәскәгә ҡуна.

Ильгиз шул саҡ һорау бирҙе:

– Ҡыҙыҡ, ә бал ҡорттары нисек бал яһай икән ул? Рецебын ҡайҙан беләләр икән?

Хикмәт йылмайып ҡуйҙы:

– Бал ҡорттары – ғәжәйеп йән эйәләре. Беренсенән, улар, ныҡлы тәртипкә буйһоноп, ҙур бер ғаилә булып йәшәй. Икенсенән, ул ғаиләлә һәр кемдең аныҡ бурысы бар. Бал ҡорттары яңғыҙ йәшәй алмай. Һәр ғаиләлә инә

ҡорт, әре ҡорттар һәм эш ҡорттары бар. Иң ҙур инә ҡорт бары тик йомортҡа һалыу менән генә шөғөлләнә. Әре ҡорттар үрсеү мәлендә генә кәрәк. Ә эш ҡорттары бөтә ғаилә өсөн яуаплы: улар бал йыя, һәммәһен ризыҡ менән тәьмин итә, балауыҙ эшләй, умартаны һаҡлай, йәш быуынды тәрбиәләй. Кешеләр һәр ваҡыт бал ҡорттарына хас булған ныҡлы тәртипкә һоҡланған һәм уларға кешелек йәмғиәте төҙөлөшө өсөн гүзәл өлгө итеп ҡараған.



Бал ҡорттарына хас был ғәжәйеп тәртипте Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә Үҙе булдырған: **«Раббың бал ҡортона әйтте: “Тауҙарҙа-ҡаяларҙа, ағас ҡыуыштарында һәм кешеләр ҡорған ҡаралты-ҡураларҙа үҙеңә оялар-умарталар яһа”»** («Ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/68-69).

Ошо ваҡыт сәскә түтәлдәре янында ултырған Илдар көлөп ебәрҙе:

– Ҡарағыҙ әле, буйлы комбинезон кейгәндәр бында тотош команда!

Малайҙар шунда уҡталды. Хикмәт бабай бер бал ҡортона күрһәтеп аңлата башланы:

– Аҡ сәскәлә ултырған бынау бал ҡортона күҙ һалығыҙ әле! Ауыҙын һәм томшоғон күрәһегеҙме? Ул сәскәнең һеркәле ерендә ултыра, томшоғо менән һеркәне һура. Нектар

менән бергә йөнтәҫ аяҡтары ярҙамында һеркәләрҙе лә йыя, сәскәләрҙе һеркәләндерә. Аҙаҡ һеркә шары артҡы аяғындағы махсус кәрзингә һалына, унан йомортҡаларҙан сыҡҡан ҡарышлауыҡтарҙы ашатыу өсөн һитә эшләнә.

Нектарҙы бөтә сәскәле үҫемлектәрҙән дә йыйырға мөмкин. Боғағын тултырыу өсөн, бал ҡорто 1,5 меңгә яҡын сәскәне урап сығырға тейеш. Умартаһына табан осоп барғанда уҡ уның сәскәнән һурып алған нектары ҙур ғына боғаҡҡа килеп инә, боғаҡ биҙҙәре бүлеп сығарған матдәләр менән ҡушыла һәм балға әүерелә башлай. Умартаға табыш менән ҡайтҡан ҡортто башҡа ҡорттар ҡаршы ала. Улар, уның нектарын алып, балауыҙҙан эшләнгән алты ҡырлы бик күп күҙәнәктәрҙән торған кәрәҙҙәргә һала. Дымдың парға әйләнеүен тиҙләтеү һәм нектар тамсыларының ҡуйылығын арттырыу өсөн, бал ҡорттары вентилятор рәүешендә ҡанаттарын елпеп тора. Аҙаҡ һаҡлауға тәғәйенләнгән тулы кәрәҙҙәрҙе балауыҙ менән ныҡлап ябып ҡуялар.

Бал ҡорттары балды нисек эшләргә кәрәклеген ҡайҙан белә һуң? Шул тиклем ғилем, камил ҡулайламалар ҡайҙан? Был турала Ҡөрьәндә шулай әйтелә:

**«“Унан һуң емештәрҙең һәр береһенән ауыҙ ит, Аллаһ күрһәткән юлдар буйлап ос”. Уларҙың эсенән кешеләр өсөн шифа булырлыҡ төрлө төҫтәге шәрбәт (бал) сыға. Был эштәрҙә уйлай белгәндәр өсөн бөйөк ғибрәттәр-дәлилдәр барҙыр»** («Ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/69). Бал ҡортона ошо ғилемдәрҙе күндергән, йәки ошо инстинктты һалған Раббыбыҙ уның тәнен ошо функцияларҙы күркәм рәүештә үтәүгә яраҡлаштырған.

– Бал ҡорттары балды кәрәҙ эсендә һаҡлағанын беләбеҙ. Ә ул кәрәҙҙәр умартала нисек барлыҡҡа килә икән һуң? – тип һорау бирҙе Ильгиз.

### Инженер бал ҡорттары

– Кәрәҙҙәр – ғәжәйеп камил инженер конструкцияһы, ғалимдар уның серен аҙағынаса асыҡлап бөтә алғаны юҡ әле. Бал ҡорттары тәненән бүленеп сыҡҡан балауыҙҙан бик нескә кәрәҙҙәр яһай. Эш барышында улар бер-береһенә ныҡ ярҙам итә. Тәпейҙәре менән күршеһенең ҡорһағынан нәҙек кәрәҙ япраҡтарын ҡырып алалар, сәйнәйҙәр һәм, шайыҡтары менән ҡушып, тип-тигеҙ ҡоролмалар төҙөйҙәр. Һәр бал ҡорто бында материал менән тәьмин итеүсе лә, архитектор ҙа, төҙөүсе лә. Балауыҙ ҡоролма геометрик йәһәттән төҙөк алты ҡырлы бик күп күҙәнәктәрҙән тороусы кәрәҙҙәрҙән ғибәрәт. Әгәр ҙә ки беҙ ҡағыҙ, ҡәләм, чертёж инструменттары алһаҡ, тигеҙ алты ҡырлы мөйөштәр яһау барыбер еңелдән булмаясаҡ. Бал ҡорттары иһә һис бер ҡоралһыҙ үҙҙәренең эшен кәмселекһеҙ атҡарып ҡуя. Өҫтәүенә улар, төркөмдәргә бүленеп, үҙҙәренең балауыҙ ҡоролмаһын умартаның төрлө яғынан эшләй башлай һәм, бер генә миллиметрға ла яңылышмайынса, үҙәктә осраша!

Искәндәр аптыраны:

– Ысынлап та, был ифрат ауыр эш тә ул. Беҙгә мәктәптә геометрик фигуралар һыҙырға ҡушалар. Мин хатта линейка һәм транспортир менән дә бишмөйөштө, алты мөйөштө тигеҙ итеп һыҙа алмайым.

Хикмәт бабай дауам итте:

– Кәрәҙ конструкцияһында кәмселектәр, тигеҙ булмаған урындар юҡ, кәрәҙҙәрҙең тап алты мөйөшлө булыуы балды буш урын ҡалдырмайынса тултырырға мөмкинлек бирә! Инженер фәндәре һәм математика йәһәтенән кәрәҙҙәр конструкцияһы уғата камил! Аң, аҡыл бирелмәгән бал ҡорто уны теүәл иҫәпләй, проектлай алыр инеме? Әлбиттә, юҡ! Бал ҡорттарындағы илаһи сәнғәттең, хикмәттең һәм көстөң сағылышы был.

## Утыҙ көнлөк ғүмер

Хикмәт бабай малайҙарға һорау бирҙе: «Ә бал ҡорто нисә көн йәшәгәнен беләһегеҙме?» Ул һорауға берәү ҙә яуап бирә алманы. Шунан ул яуапты үҙе әйтте: «30 көн».

Малайҙар хайран ҡалды: «Нисек? Бары тик утыҙ ғына көнмө?»

Хикмәт бабай, һүҙен раҫлап, баш ҡаҡты:

– Бер бал ҡорто ғүмере эсендә яҡынса ярты балғалаҡ бал йыя ала. Аҙаҡ ул йыйған балын да тәмләп ҡарамайынса үлә. Күреүебеҙсә, ғүмере буйына бал ҡорто үҙенән бигерәк башҡалар өсөн эшләй булып сыға. Фиҙакәрлек һәм хеҙмәттең гүзәл үрнәге түгелме ни был? Ә, балалар? Кескәй генә ошо йән эйәләре, кешеләргә татлы, хуш еҫле, шифалы ризыҡ бүләк итер өсөн, ҡыҫҡа ғына ғүмерҙәрендә алһыҙ-ялһыҙ хеҙмәт итә. Ә беҙ үҙебеҙҙең, башҡа кешеләрҙең, башҡа мәхлүктәрҙең файҙаһы өсөн күпме тырышлыҡ һалабыҙ?

Искәндәр һәм уның дуҫтары, бал ҡорттарының тормошо менән яҡынданыраҡ танышҡан һайын, ҡыҙыҡһыныуҙары, ғәжәпләнеүҙәре арта барҙы. «Ғүмерҙәре ҡай-



һылай ҡыҫҡа! Беҙгә бал бирер өсөн, ғүмерҙәрен ни ҡәҙәр фиҙа ҡылалар», – тип уйланы Искәндәр.

Хикмәт бабай бәйәнен дауам итте::

– Ҡөрьәндә Раббыбыҙ Аллаһ әйтә: **«Күктәрҙә һәм Ерҙә нимә булһа, шуларҙың барыһын да Ул, Үҙ тарафынан индереп, һеҙҙең ҡарамаҡҡа бирҙе. Әлбиттә, был турала уйлап ҡараған кешеләр өсөн ғибрәттәр бар»** («Әл-Джәҫиә (Теҙләнеү)» сүрәһе, 45/13). Кескәй генә мәхлүк был фани донъяға беҙҙең өсөн килә. Файҙалы ризыҡ, күп сирҙән дауа булған балын яһай. Аҙаҡ ғүмерен тамамлап китә. Уларҙың тормошо һәм хеҙмәте – беҙҙең өсөн нәсихәт.

### Ашығыҙ тәмле булһын!

– Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ун дүрт быуат элек үк балдың күп ауырыуҙарҙан шифа булыуы хаҡында әйткән. Бөгөн инде балдың файҙаһы тураһында бик күп яҙылған. Кеше организмы өсөн ул ризыҡ та, шифа ла. Ул тын алыу системаһына, мейегә ыңғай тәьҫир итә, йөрәк һәм ҡан ауырыуҙарынан дауалай, ашҡаҙан, бауыр, бөйөр, эсәк ауырыуҙарынан шифа бирә. Ғалимдар балдың яңынан-яңы ыңғай сифаттарын аса. Был шуны ап-асыҡ күрһәтеп тора: Раббыбыҙҙан алған Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғилеме барса



ғилемдәргә ойотҡо һәм Хисап көнөнә саҡлы хәҡиҡәт булып ҡаласаҡ.

Хикмәт бабай эшлекле рәүештә сәскәнән сәскәгә ҡунып бал йыйған ҡорттарға бер ни тиклем йылмайып ҡарап торҙо һәм, балаларға боролоп, былай тине:

– Бал ҡорттары - асылы менән һоҡланғыс йән эйәләре. Улар таҙалыҡ һәм тәртип һағында ныҡ тора, умарта эсен-

дәге һауаның таҙа булыуына ла ныҡ иғтибар бирә. Ҡайһы саҡ улар бергәләшеп синхронлы рәүештә ҡанаттарын елпейҙәр – торлаҡтарын елләтәләр. Ҡайһы саҡ иҫке умарталарҙа бал ҡорттары эшләп сығарған ыҫмалалы матдәгә уралған үлгән сысҡанды йәки селәүсенде осратырға мөмкин. Ошолай итеп улар сереүҙе бөтөрә. Сит ҡорттар, күгәүен, һағыҙаҡтар ише саҡырылмаған ҡунаҡтарҙан һаҡланыу сараһын да күрә улар. Һаҡсылар, осоп ҡайтҡан һәр бал ҡортон тикшереп, еҫкәп, үҙҙәренеке булыуына инанғас ҡына умартаға индерә. Әгәр ситтәр инергә уйлаһа, улар, безелдәп, күмәкләп уға ташлана һәм ҡыуып ебәрә. Ә һеҙ беләһегеҙме икән, бал ҡорттары умарта эсендә хәжәткә сыҡмай, тәбиғи йомоштарын үтәр өсөн улар ситкәрәк китә. Бал саф һәм пак булырға тейешлеген, был ҡиммәтле шифалы ризыҡ шундай хөрмәтле мөнәсәбәт талап итеүен ҡайҙан улар белә икән һуң?



Умарта эсендәге ҡараңғылыҡта тулы тәртип булдырыуҙарына, үҙҙәрен шулай аҡыллы тотоуҙарына, йөкмәтелгән бурыстарын күндәмлек менән үтәүҙәренә һоҡланаһың да, был инстинкттарҙы Үҙ

мәхлүктәренә һалған Бөйөк Заттың Хикмәтенә тағы ла нығыраҡ хайран ҡалаһың.

Кешеләргә хеҙмәт итеүгә арналған бал ҡорттарының тормошон өйрәнеп, күпме нәсихәт алырға мөмкин! Арыған йәки ауырыған атай-әсәйебеҙгә бер стакан һыу бирәбеҙме? Мохтажға ярҙам ҡулы һуҙабыҙмы? Ерҙең ниндәйҙер мөйөшөндә ғазап кисергәндәр, йәберләнгәндәр өсөн йөрәгебеҙ әрнейме?

Хикмәт бабай, малайҙарға күҙ йүгертеп сыҡты ла тәнәфес иғлан итте:

– Ярай, минең афариндарым, бер ун минут ял итеп алайыҡ. Ә мин өйгә инеп сығайым.

Хикмәт бабайҙың «афариндарым» тип маҡтауы малайҙарға оҡшап ҡалды: ауыҙҙар ҡолаҡҡа етте, һәм улар көрмәкләшеп шаярырға кереште. Искәндәр иһә Хикмәт бабайға эйәрҙе, өйгә инер алдынан уға атаһы ҡалдырған аманатты һондо. Хикмәт бабайҙың бик күңеле булды. “Был изге ғәмәлде ҡабул ит инде, бөтә ғаиләләренә именлек, бәрәкәт бир”,- тип, ул Аллаһҡа ихлас доға ҡылды, зәкәтте кисекмәҫтән Морат ағайға тапшырасағын әйтте.



# ҺӨТ ҺӘМ БАЛ

Хикмәт бабайҙың баҡсаһы, әйтерһең дә, асыҡ һауалағы бер мәктәп, күңелдәрҙе нескәртә, нурландыра торған мәктәп. Малайҙар сәскәнән сәскәгә йөрөп бал йыйған ҡорттарҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтә, ни аралалыр ошо кескәй генә йөнтәҫ йән эйәләренә ҡарата күңелдәрендә хөрмәт һәм һөйөү тойғолары пәйҙә булды. Искәндәр аҡ гөлйемеш сәскәһенең иң уртаһына инеп алған бал ҡортона ымланы һәм малайҙарға былай тине:



– И-и-и, был бал ҡорто бөтә ғүмерен беҙгә ярты балғалаҡ бал йыйыу өсөн сарыф итә. Ә беҙ бер ултырғанда 5-8 бал ҡорто ғүмере буйы йыйған балды ашайбыҙ ҙа ҡуябыҙ. Беҙ Аллаһҡа рәхмәтле булырға, Уны яратырға тейешбеҙ, сөнки бал ҡорттарын да, сәскәләрҙе лә, һәм донъялағы бөтә нәмәне беҙҙең өсөн Ул барлыҡҡа килтергән.

Шул мәл Ильгиздең тауышы яңғыраны:

– Ҡарағыҙ, ана Хикмәт бабай килә! Ул нимәлер алып килә!

Искәндәр Хикмәт бабайға ҡаршы йүгерҙе. «Әйҙәгеҙ, ярҙам итәйем!» -тип, ҡулынан батмусты алды.

Хикмәт бабай барыһын да өҫтәл янына саҡырҙы:

– Килегеҙ бында. Мин һеҙгә һөт менән бал алып килдем.

## Табындағы әңгәмә

Искәндәр Хикмәт бабайҙан башлап барыһына ла һөтлө стакандар таратып сыҡты. Табын уртаһында - бал һалынған матур һауыт һәм аҡ икмәк телеп ҡуйылған бәләкәй кәрзин. «Бисмилләһ» әйтеп, Хикмәт бабай бер йотом һөт эсте.

– Ошо гүзәл һәм тәмле ниғмәттәре өсөн Раббыбыҙға рәхмәтебеҙҙе белдерәйек.

Гәрәбәләй һары бал һыланған икмәк, һалҡынсараҡ ҡуйы һөт бик тәмле ине. Ильгиз, икмәк телеменең ситенә аҡҡан балын ялай-ялай һорау бирҙе:

– Хикмәт бабай, атайым һеҙгә сәләм әйтте. Мин уға беҙҙең әңгәмәләр тураһында һөйләгәйнем, рөхсәт булһа, эштән бушаған саҡта мин дә барып тыңлар инем, ти ул.

– Уның килеүенә беҙ бик шат булыр инек. Атайыңа минән дә сәләм әйт.

Илдар, Ильгизгә көнләшеп ҡараны. Ҡайһылай рәхәт уға, атаһы бит бында йөрөүенә шат. Ә уның атаһы, әгәр бында килеүен белеп ҡалһа, асыуланасаҡ һәм килергә рөхсәт итмәйәсәк. Атаһы әле отпускала, улар бөтә ғаиләһе менән олатайҙарына ҡунаҡҡа килде. Атаһының һеңлеһе лә Исмәғил исемле улы менән бында. Өй хужаһы, хәҙер аҡыл, ғилем, компьютер технологиялары заманы тип иҫәпләгәс, уларҙың өйөндә дин тураһында һис ҡасан һөйләшкәндәре булманы. Ә олатаһы һәм өләсәһе ейәндәренә Аллаһ хаҡында һөйләргә тотонһалар, атаһы уларҙы гел тыйыр булды: «Хөрәфәттәрегеҙ менән балаларҙың башын бутамағыҙ. Улар барыһы – үткән быуат нәмәләре! Кешеләр күптән йыһанға осоп йөрөп ҡайтты, унда улар Аллаһты күрмәгән!»

Илдарҙың уйҙарын бүлеп, Ильгиз һоҡланыуын белдерҙе:

– Бөгөн һеҙҙең һыйығыҙ шул ҡәҙәр тәмле!

Хикмәт бабай уға ҡарап йылмайҙы:

– Тәмле булһын шул, улым. Ә һеҙ беләһегеҙме, һөт бит Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яратҡан ризығы. Ул ҡунаҡтарын һөт менән һыйлар булған.



Үҙен һөт менән һыйлауҙарын да яратҡан һәм һөттөң файҙаһын һәм ҡиммәтен күҙ уңында тотоп әйтер булған: «Һөттә – бәрәкәт». Бөгөн беҙ Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтен үтәнек.

Аҙаҡ өҫтәп ҡуйҙы:

– Әлбиттә, һөт – гүзәл ризыҡ. Ә һөттөң һыйыр, кәзә йәки һарыҡ тәнендә нисек барлыҡҡа килгәнен беләһегеҙме?

## Көсөргәнешле мәл

Хикмәт бабай, ҡапыл хәбәрен бүлеп, ҡапҡа яғына ҡараны. Баҡсаға бер кеше килеп инде. Уның йөҙө, һәр бер хәрәкәте асыулы икәнлеген, ярһыуы сайпылып түгелергә торғанлығын күрһәтеп тора ине:

– Уй, был минең атайым, – тип ҡалтыранып шыбырланы Илдар. Исмәғил Илдарҙың артына йәшенде.

Асыулы әҙәм уларға табан килә ине. Балалар араһында Илдар менән Исмәғилде күреп ҡалғас, ул хужаға сәләм дә бирмәй ҡысҡырып ебәрҙе:

– Бында ни ҡалған һеҙгә?! Ниндәй эш ҡыйратаһығыҙ бында?!

Хикмәт бабай, килгән әҙәмдең тупаҫлығын иҫтибарһыҙ ҡалдырып, йомшаҡ ҡына өндәште:



– Хуш килдегеҙ. Бәлки, ултырырһығыҙ?

Ҡапыл боролған әҙәм Хикмәт бабай менән йөҙгә-йөҙ осрашты. Уның тыныс тауышы, алсаҡ йөҙө, үҙенә төбәлгән йомшаҡ ҡарашы ирҙе нисектер ҡаушатты. Асыуы һүрелде, ул хатта тотлоға биреп ризалашты:

– Эйе, яҡшы.

Илдар һәм Юлай, уға урын биреп, үләнгә түшәлгән балаҫҡа барып ултырҙылар. Хикмәт бабай, батмустан таҙа стакан алып, һөт һалды һәм Илдарҙың атаһына һондо.

– Рәхим итегеҙ.

Аҙаҡ аңлатып ҡуйҙы:

– Мин бында балалар менән һөйләшәм. Теләһәгеҙ, һеҙ ҙә беҙгә ҡушылығыҙ.

Саҡырылмаған ҡунаҡты был оло йәштәге ҡарттың балаларға нимә тураһында һөйләүе ҡыҙыҡһындыра ине, әлбиттә. «Балаларҙың башын ниндәй ялған ғилемдәр менән бутай икән», – тигән уй йүгереп үтте уның башынан. Ул бер-ике йотом һөт эсте һәм ҡорораҡ ҡына итеп ризалыҡ белдерҙе:

– Ярай, улайһа мин дә һеҙҙе тыңлайым.

– Хикмәт бабай беҙгә һөттөң нисек барлыҡҡа килеүен аңлата, – тип асыҡлыҡ индерҙе Искәндәр.

Хикмәт бабай башлаған бәйәнен дауам итте:

– Һөттөң һәр тамсыһынан нәсихәт алырға була. Уйлап ҡарағыҙ әле, ебәк ҡорто тут (ебәк) ағасы япраҡтарын ашап ҡына уларҙы ебәккә әйләндерә. Шул уҡ ағастарҙы йәйрән ашай. Уның тәнендә улар хуш еҫле мисеккә әүерелә. Әммә шул уҡ япраҡтарҙы кәзә йәки һыйыр ашаһа, һөт -

тәмле һәм файҙалы ризыҡ барлыҡҡа килә. Икенсе яҡтан, шул уҡ япраҡтарҙы саранча ла ашай, тик бынан берәү ҙә файҙа күрмәй. Ебәк ҡорто тәнендәге япраҡтың – ебәккә, йәйрәндекенең – мисеккә, һыйыр тәнендәгеһен һөткә әйләндерерҙәй ул программаны кем барлыҡҡа килтергән?

Ниндәй фабрика кескәй генә ебәк ҡорто ҡылған ғәмәлде ҡыла ала - тут япрағын ебәккә әйләндерә? Ниндәй ғалим, инженер йәшел массаны һөткә әйләндерә торған программаны, технологияны эшләп сығара ала? Ниндәй парфюмер йәшел япраҡтан мисек эшләй ала? Ә кем, бал ҡорттары һымаҡ, миллиондарса сәскәнән кескәй генә татлы һут бөртөктәрен йыйып, бал яһай ала? Әлбиттә, булдыра алмайҙар! Быларҙың бит һәммәһе бөтә барлыҡты яралтҡан Раббыбыҙ Аллаһтың Көсө һәм Ҡөҙрәте менән эшләнә.

## Аптырау

Күҙҙәренән эске бер нур һибелеп торған был ҡарттың һөйләгәндәре үҙендә ҡыҙыҡһыныу уятыуына Илдарҙың атаһы ғәжәпләнеп ҡуйҙы. Ундай бәйәндәрҙе элек ишеткәне юҡ ине әле. Балаларҙың береһе һорау бирҙе:

– Ә һыйырҙың һөтө нисек барлыҡҡа килә?

– Гүзәл илаһи үәхиҙә – Ҡөрьәндә был хаҡта нимә әйтелеүен белгегеҙ киләме? Ун дүрт быуат элек үк Аллаһ Тәғәлә Үҙенең Пәйғәмбәре аша хәбәр итә: **«Әлбиттә, хайуандарҙа ла һеҙҙең өсөн ғибрәттәр бар. Уларҙың эсәктәре менән ҡан араһынан килә торған саф һөттө һеҙгә эсерәбеҙ, (ул һөт) һеҙҙең тамағығыҙға ләззәтле тәм биреп уҙа»** («ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/66). Хәҙер иһә зоология йәһәтенән аңлатып китәйем. Һыйыр һөтө еленендә, йәки



һөт биҙҙәрендә барлыҡҡа килеүе билдәле. Һыйырҙың һөт биҙҙәре аша туҡтауһыҙ ҡан йөрөп тора – бер литр һөткә биш йөҙ литрға ҡәҙәр! Тимәк, һыйыр тәнендә һөт һәм ҡан кеүек ике төрлө шыйыҡлыҡ айырылғыһыҙ бәйләнгән! Һөт биҙҙәре күҙәнәктәре ҡандан кәрәкле матдәләрҙе һайлай, уларҙы эшкәртә һәм һөт өсөн кәрәкле булған аҡһымды, майҙарҙы, һөт шәкәрен - лактозаны ала. Был процесс барышында ҡандағы матдәләр байтаҡ үҙгәрештәр кисерә. Мәҫәлән, казеин аҡһымы һөттән башҡа тәбиғәттә осрамай.

Витаминдар, минераль тоҙҙар, гормондар һәм ферменттар хайуан ҡанынан һөткә туранан-тура күсә, әммә ул матдәләрҙең һөттәге һәм ҡандағы концентрацияһы төрлө-төрлө. Мәҫәлән, һыйыр һөтөндә ҡандағы плазма менән сағыштырғанда кальций 14 тапҡыр күберәк, калий – 9 тапҡыр, фосфор – 10 тапҡыр, ә натрий 7 тапҡыр кәмерәк. Хайуан нимә менән генә туҡланһа ла, һөткә кәрәк булғандарҙы ҡан етерлек кимәлдә бирә.

Ә хәҙер иҫкә төшөрәйек әле, ҡанға туҡлыҡлы матдәләр ҡайҙан килә?

– Эсәктән, – тине Искәндәр, беренсе булып ҡул күтәреп.

– Дөрөҫ. Тәҙәлөштәре буйынса, һыйыр, кәзә, ат һәм башҡа йорт хайуандарының эсәктәре һөт биҙҙәре өҫтөндә урынлашҡан. Ашаған ризыҡ нәҙек эсәк аша үткәндә, файҙалы матдәләрҙе эсәк көбө үҙенә һура һәм ул ҡанға күсә. Нәҙек эсәктән һуң эшкәртелмәгән продукт һуҡыр эсәккә, аҙаҡ йыуан эсәккә бара, тамыр көптәре аша унан шыйыҡлыҡ сығарыла һәм ул ҡуйыра. Бында формалашҡан бүлендектәр йыуан эсәк аша тиреҫ рәүешендә тышҡа сығарыла.



Раббыбыҙ Аллаһ Үҙ йомартлығы һәм мәрхәмәте менән хайуандың пак булмаған ҡаны һәм бүленлектәре араһында барлыҡҡа килгән һөттө беҙгә бүләк итеп биргән. Был – Аллаһ Тәғәләнең мөғжизәһе! Туҡлыҡлы матдәләр ҡан менән дә, бүлендектәр менән дә ҡатнашмайынса, һөт биҙҙәренә оҙатыла, ә унда иҫ киткес пак һәм туҡлыҡлы ризыҡ барлыҡҡа килә. Ә унан һуң Аллаһ кешеләргә хеҙмәт өсөн барлыҡҡа килтергән хайуандар күндәм һәм йомарт рәүештә беҙгә һөтөн бирә. Мин һеҙгә уҡыған аят ана шул хәҡиҡәт тураһында һөйләй. Ә бит Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән заманда һөттөң нисек барлыҡҡа килеүе хаҡында түгел ҡан әйләнеше системаһы хаҡында ла белмәгәндәр. Уны 1000 йылдан һуң, 1600 йылда ғына асалар.

Илдарҙың атаһы ғәжәпкә ҡалып ултырҙы – был ҡарт Ҡөрьән аяттарын, барса «Ни өсөн?» һәм «Ниңә?» һора-

уҙарына яуап биреп, заманыбыҙ ғилеменә таянып аңлата. Яйлап уның асыуы ҡыҙыҡһыныу менән алмашынды.

Хикмәт бабай, бер аҙ уйланып торғас, һүҙен дауам итте:

– Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнсә, һөт – бәрәкәт һәм мәрхәмәт. Быҙау тыуғас, уға әсәһенең һөтө кәрәк. Ул имгәндә, әсәһе наҙлап мөңрәп ала һәм уны һөйөп, хәстәрләп ялай. Ул, быҙауының түйғанын көтөп, урынында ҡымшанмай тора. Бейә лә, ҡолонона имеүе уңайлыраҡ булһын өсөн, артҡы аяғын артҡараҡ шылдыра. Былар һәммәһе – Аллаһ Тәғәләнең үҙ мәхлүктәренә мәрхәмәте. Раббыбыҙ беҙгә лә шундай уҡ рәхмәт күҙе менән ҡарай. Беҙ һөтөн эскән хайуандарҙың барыһы ла – күндәм, тыныс, зыянһыҙ. Әгәр ҙә ки һыйыр, һарыҡ, кәзә ҡырағай хайуандар кеүек булһа, улар үҙҙәрен һауырға мөмкинлек бирмәç ине.

## Әсә һөтө

Хикмәт бабай, ҡунаҡҡа йылмайып, һөтөн эсергә ҡыçтаны:

– Рәхим итеп, эсегеҙ инде һөтөгөҙҙө.

Илдар, атаһының тынысланыуын күреп, еңел һулап, иғтибар менән Хикмәт бабайҙы тыңларға кереште. Хикмәт бабай бәйәнен дауам итте:

– Әммә ләкин иң ғәжәбе – кешенең күкрәк һөтө. Сабыйға әсә һөтөн алмаштырырлыҡ башҡа файҙалы ризыҡ юҡ. Уның составында бала организмы өсөн кәрәкле бөтә аҡһымдар, майҙар, углеводтар, витаминдар һәм микроэлементтар бар. Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә Үҙ хикмәте менән әсә организмына һоҡланғыс бер сифат биргән: сабыйҙың

ихтыяжына, йәшенә, хәл-торошона ҡарап, һөттөң составы ла үҙгәрә. Мәҫәлән, балаһы етлекмәй тыуған әсәнең һөтөндә аҡһым балаһы ваҡытында тыуған әсәнең һөтөнә ҡарағанда күберәк була, сөнки нығынып китер өсөн, ул сабыйға аҡһым күберәк кәрәк. Яңы тыуған балаға һәм бер йәшлек балаға тәғәйенләнгән һөт составы ла айырыла. Әммә һәр осраҡта ла туҡлыҡлы һәм һаҡлаусы компоненттар етерлек була.

Һуңғы осорҙа донъяла, һөт ҡатышмаларын әүҙем рекламалау арҡаһында, әсә һөтө балаға бик үк файҙалы түгел тигән хаталы фекер тарала башланы. Балалар өсөн ҡоро ҡатышмалар сығарыусы компаниялар раҫлауынса, витаминдар һәм файҙалы матдәләр менән байытылған уларҙың продукты һыу, аҡһым, әҙерәк майҙар булған әсә һөтөнән күпкә файҙалыраҡ.

Әммә ләкин фән быны киреһен иҫбат итте: әсә һөтө – сабый өсөн иң яҡшы һәм алмаштырғыһыҙ ризыҡ. Донъяға килгән сабыйға иң фатихалы һәм тәбиғи ризыҡты – әсә һөтөн бүләк иткән, Хикмәт һәм Мәрхәмәт Эйәһе булған Аллаһ Тәғәләнең Ижады алдында кешенең зәғиф һәм көсһөҙ булыуын да раҫланы ул...



# ҠОШТАР ТЕЛЕ

Йәйге йылы ел бөтә баҡсаға төрлө-төрлө сәскәләрҙең хуш еҫен тарата. Бындағы хозурлыҡҡа ҡыуанып, ағастарҙа ҡоштар һайрай. Ул хозурлыҡ, әйтерһең дә, баҡсаға йыйылғандарҙың күңеленә лә тыныслыҡ, нур, йәм булып күскән.



Хикмәт бабай ботаҡтан ботаҡҡа күсеп һайраған ҡоштарҙың шат тауыштарын тыңлап торҙо ла һоҡланып әйтеп ҡуйҙы:

– Беҙҙең өсөн яратылған был гүзәл донъяла һәммәһе Раббыбыҙҙы зикер итә. Һандуғастың тамсы кеүек кенә йөрәгенән түгелгән моң, күгәрсендең «Һу, Һу» (ғәр. «Ул, Ул») тип гөрөлдәүе, ҡауҙының «ләк, ләк» (ғәр. «Һиңә, Һиңә») тип сутылдауы. Аллаһты зикер иткән ул тауыштар нескә күңелдәрҙең иң түренә үтеп инә!

Һәм, йылмайып, һорау бирҙе:

– Искәндәр, Ильгиз, балалар! Ә ҡоштарҙың хәҙер нимә тураһында үҙ-ара һөйләшеүен белергә теләйһегеҙме?

– Эйе, бик теләйбеҙ! Тик беҙ ҡоштар телен белмәбеҙ бит!

– Аныҡ ҡына рәүештә уларҙың нимә тураһында һөйләшеүен берәү ҙә белмәй, әммә, тикшеренеүҙәр үткәреп, ғалимдар шуны асыҡлаған: кешеләргә мөһим булған кеүек, улар өсөн дә аралашыу бик мөһим. Әлбиттә, уларҙа кешеләге тел һәләттәре юҡ, ләкин уларҙың аралашыу өсөн башҡа саралары бар. Улар үҙ-ара тауыш менән дә, ым-ишара менән дә, торош-ҡиәфәт менән дә аңлаша.

Ҡайҙа ғына йәшәһәгеҙ ҙә, һеҙ бихисап ҡанатлы дуҫтарыбыҙҙы күрәһегеҙ, тик уларҙың ғәжәйеп һәләттәренә

иғтибар бирмәүегеҙ ҙә ихтимал. Уларҙың тышҡы ҡиәфәте, күркәм ҡауырһындары, оса, оя ҡора белеүҙәре, балаларына ҡарата фиҙакәр мөнәсәбәте – күңел күҙе күргәндәр өсөн уларҙың бар ҡылыныуының дәлиле булып тора. Аралаша алыу һәләттәре – йәнә бер дәлил. Ҡоштар йыры осраҡлы өндәрҙән түгел, ә билдәле мәғәнәле төрлө мелодияларҙан ғибәрәт. Ата ҡоштар уны башлыса үҙ территорияһын иғлан итеү һәм һаҡлау йәки инә ҡоштарҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн файҙалана. Йырлау һәләте ата ҡоштарға ғына бирелгән бит.

Ҡоштарҙың һәр төрөнөң үҙ йыры бар, беҙ уларҙың тауышынан уҡ ниндәй ҡош икәнлеген айыра алабыҙ. Ҡоштар йырҙарының ҡатмарлығы, нисбәте менән айырылып тора. Мәҫәлән, көйәҙ турғайҙың репертуарында – 3000 тирәһе йыр. Донъяла яҡынса 10000 төрлө ҡош бар, улар тышҡы үҙенсәлектәре, төйәкләнгән урыны, йәшәү рәүеше һәм аралшыу теле менән айырыла. Әйтәйек, Африкала ғәләмәт ҙур дөйәғоштар, кескәй генә колибриҙар йәшәй, ҡарлуғас кеүек күсмә ҡоштар, бер урында төйәкләнгән турғайҙар, боҙҙар араһында йәшәгән пингвиндар һәм тропик урмандарҙа көн иткән попугайҙар бар. Ҡөрьәндә был турала шулай тип әйтелә: **«Ер йөҙөндә һеҙҙең кеүек өммәт булып йәшәмәгән һис бер хайуан һәм күк йөҙөндә ҡанаттары менән осҡан һис бер ҡош юҡтыр. Китапты кәмселекле итмәнек. Һуңынан барыһы ла Аллаһ хозурына ҡайтарыласаҡтар»** («әл-Әнғәм (Мал-тыуар)» сүрәһе, 6/38). Йәнле донъяның йәшәйеше хаҡындағы хәҡиҡәт, шулай уҡ төркөм-төркөм булып йәшәгән ҡоштар донъяһы Карл Линнейҙың 18 быуатта тәҡдим ителгән классификация системаһы нигеҙенә һалына, Ҡөрьән төшөрөлөп, 12 быуат үткәс була был хәл.



Яңы ғына баҡсаға ярһып килеп ингән Денистың атаһы, тыныс күреңһә лә, аптырауға ҡалып ултыра ине. Хикмәт бабайҙы ул шым ғына тыңлап ултырҙы. Ғәҙәттә, дин тураһында һүҙ сыҡһа, ул яуапһыҙ ҡалмай торғайны. Һәр нәмәнең нигеҙе - фән һәм айыҡ аҡыл, тип ныҡлы инанған ул. Урта быуатта ғәрәптәргә төшөрөлгән китап хәҙерге заман кешеһенә файҙа бирә тигән уй башына ла килгәне юҡ ине. Шуныһы ғәжәп: гел йылмайып һөйләшкән был ҡарт дини булыуы менән бергә бик ғилемле һәм юғары мәҙәниәтле кеше лә булып сыҡты. Уның донъяға ҡарашы буйынса, фәнни ғилемдәр Аллаһты инҡар



итмәй, киреһенсә, Уның барлығын раҫлап тора.

Искәндәр һорау бирҙе:

– Ә ҡоштар телен аңлаған берәй кеше бармы икән?

– Иң камил тауыштарҙы яҙыу аппаратураһы һәм иң яңы методикаларға таянып, ғалим-орнитологтар ҡоштарҙың ҡайһы бер сигналдары мәғәнәһен асыҡлай алған. Уларға йөҙҙән ашыу шундай сигнал билдәле. Әммә ләкин ҡоштар телен аңлаған кеше тураһында һүҙ сыҡҡанда, Дауыт пәйғәмбәрҙең улы Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһүмәс-сәләм) тураһында әйтеп китмәү мөмкин түгел.

– Хикмәт бабай, Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) хаҡында һөйләгеҙ әле!-тип тулҡынланып һораны Ильгиз.

– Ярай, һөйләйем улайһа. Аллаһ Тәғәлә Сөләймән пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) кешеләрҙең береһенә лә бирелмәгән байлыҡты, кешеләрҙең береһенә лә бирелмә-

гән хакимлыҡты бүләк итә. Аллаһ Сөләймән пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) ҡоштар һәм хайуандар теленә өйрәтә. Уға кешеләр, ендәр[7] һәм ҡоштар ғәскәре буйһона. Ул улар менән ғәжәйеп рәүештә идара итә.

Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ғәскәренә үҙе байҡама (смотр) үткәрә: **«Сөләймән янында ендәрҙән, кешеләрҙән, ҡоштарҙан торған ғәскәр тупланды. Быларҙың барыһы ла** (уның тарафынан) **идара ителә ине»** («ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/17).

**«Ул** (Сөләймән) **ҡоштарҙы күҙҙән кисергәс әйтте: "Ни өсөндөр һөҙһөттө күрмәйем. Әллә ул юғалып ҡалдымы? Һәр хәлдә мин уға ҡаты яза бирәсәкмен йәки уның башын саптырасаҡмын, әгәр ул ни өсөн килмәгәнен аҡларлыҡ асыҡ дәлил килтермәһә"»** («ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/20).

Һөҙһөткә яза биреү менән янау шуға бәйле: Сөләймән (ғәләйһис-сәләм) батшалығы ғәҙеллекте һәм тәртипте нигеҙ итеп ала, һәм берәүгә лә ул тәртипте боҙорға рөхсәт ителмәй.

Оҙаҡ та тормаҫтан, һөҙһөт килеп етә һәм әйтә: **«Мин һин белмәгән нәмәне беләм. Сәбәнән мин һиңә бик тә мөһим бер хәбәр килтерҙем. Хаҡтыр, мин шунда батшалыҡ итә торған бер ҡатынды осраттым. Уның бөтөн нәмәһе бар. Ул бик ҙур тәхеткә эйә. Улар Аллаһ урынына Ҡояшҡа табына торған халыҡ. Яман ғәмәлдәрен матур күрһәтеп, шайтан уларҙы юлдан яҙҙырған. Шунлыҡтан**

---

7. Ендәр – уттан яратылған, аҡылға эйә булған йән эйәләре. Тик ендең тәне уттан тора тип аңларға ярамай быны. Әҙәм (ғәләйһис-сәләм) дә ерҙән яратылған, тик кеше тәне ерҙән тора тигән һүҙ түгел бит был. Беҙ ендәрҙе күрмәйбеҙ, әммә төрлө сифаттары менән үҙҙәренең яныбыҙҙа йөрөүен улар һиҙҙерә.



**улар тура юлды тапмай. Күктәрҙәге һәм Ерҙәге бөтөн нәмәне белеп тороусы Аллаһҡа улар сәждә итмәй. Бөйөк Ғәрештең Хужаһы, Үҙенән башҡа һис тиңе булмаған Аллаһ – берҙән-бер Илаһ** (тип танымай)**»** («ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/21-26).

Сөләймән пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) Сәбә батшалығы тураһында һөйләгәндә, һөҙһөт уларҙың дине хаҡында ла хәбәр итә. Ҡояшҡа табынған мөшрик булғандары өсөн, ул батшаны һәм уның халҡын ғәйепләй. Тимәк, ҡоштар һәм башҡа мәхлүктәр Аллаһты белә һәм тик Раббыһын ғына данлай.

**«Сөләймән әйтте: «Ҡарап ҡарайыҡ, һин дөрөҫөн һөйләнеңме, әллә ялғанланыңмы? - тине. – Һин ошо хатты алып кит, уларға тапшыр. Бер аҙ ваҡыт яуап көт.**

**Нисек яуап бирерҙәр икән»** («ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа)» сүрәһе, 27/27-28). Һөҙһөт хат менән китә һәм Сәбә батшабикәһе бүлмәһенә ташлай.

Күреүебеҙсә, Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ҡоштар телен аңлай, улар менән һөйләшә. Ә һөҙһөт уға хеҙмәт итә, әмерҙәрен үтәй. Сөләймән пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) ҡоштар телен өйрәтеүсе, уларҙы уға буйһондороусы – Аллаһ. Әгәр Ул нимәнеңдер булыуын теләһә, шул була. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай уҡ ҡоштар хәләтен, телен аңлай. Бер заман бер дөйә уға йүгереп килә лә үҙе менән насар мөғәмәлә иткән хужаһына зарлана башлай. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уны тыңлай һәм уға ярҙам итә. Йәнә бер хәҙис уның ни тиклем нескә күңелле, мәрхәмәтле кеше булыуын, ҡоштар халәтен, телен аңлауын күрһәтә. Поход ваҡытында сәхәбәләр ояла ике ҡош балаһын күреп ҡалалар, алалар һәм яратып һыйпай башлайҙар. Ә был мәл уларҙың әсәһе, асырғанып ҡысҡырып, улар өҫтөнән өйрөлә. Быны күреп, Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә: *«Кем, балаларын тартып алып, был меҫкен ҡошто рәнйетте, кисекмәҫтән кире урынына һалһын!»* (Әбү Дауыд, Әҙәп, 163-164).

Юлай, бер аҙ икеләнеп, һорау бирҙе:

– Хикмәт бабай, минең өйҙә алаҡас турғай йәшәй. Уны урманда оло ағайым тотҡан. Әгәр ҡоштар аҡыллы, һөйләшә беләләр икән, тимәк мин уға башҡа ҡоштар менән бергә йәшәргә, аралашырға ҡамасаулайым, шулаймы?

– Эйе, улым, һин хаҡлы. Ҡоштар өсөн иң яҡшы урын – улар кинәнеп һайраған ағас ботаҡтары. Һәр йән эйәһе Аллаһ бар ҡылған мөхитендә генә тыныс һәм ҡәнәғәт була. Мәҫәлән, һеҙҙе берәй бүлмәгә бикләп ҡуйһалар, һис

кем менән һөйләшергә рөхсәт итмәһәләр, әммә туйғансы ашатһалар, эсерһәләр, һеҙ ҡәнәғәт булыр инегеҙме? Үҙебеҙгә теләмәгәнде беҙ башҡаларға ла теләмәçкә тейеш, шулай түгелме ни? Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

*«Кем һунар ҡомарына барып йәки ҡыҙыҡ күреп турғайҙы ғына үлтерһә лә (йәғни, аңлап үлтерһә), Хисап көнөндә был турғай зарланып әйтәсәк: "Йә Раббым! Был кеше мине ғәҙелһеҙ үлтерҙе!"»* (Нәсаи, Дахайә, 42).

Хисап көнөндә кешеләр генә түгел, улар рәнйеткән хайуандар ҙа тергеҙеләсәк. Был хайуандар үҙҙәрен рәнйеткән хужаларына дәғүәһен белдерәсәк, ә аҙаҡ яңынан ергә әүереләсәк. Был хәлде күргән кәферҙәр үкенеп әйтәсәк: «Их, улар һымаҡ беҙ ҙә ергә әүерелһәксе!»

Шул мәл Илдарҙың атаһы Хикмәт бабайға ҡараны, һәм уларҙың ҡараштары осрашты. Ир улына дини белем биреүгә һәр саҡ ҡаршы булды, тормошта уңыш ҡаҙаныр өсөн, яҡшы донъяуи ғилем кәрәк, тип иçәпләне ул. Ә улының мосолмандарҙың изге китабы булған Ҡөрьәнде өйрәнергә йөрөүе асыуын ҡабартты. Баҡсаға ул улын, һеңлеһенең улын алып китергә тип, ярһып килеп ингәйне. Исмәғил бәләкәй саҡта уҡ атаһы ғаиләһен ташлап сығып киткәс, һеңлеһе һәм уның улы тураһында хәстәрлек күреүҙе ул үҙенең бурысы итеп иçәпләй ине... Әммә баҡсаға килеп ингәс, асыуын онотто, ун минуттан һуң инде ул, хайран ҡалып, был ғәжәйеп кешенең әңгәмәһен тыңлай ине. Сабырһыҙлығы өсөн инде уға оят ине. Әле Хикмәт бабайҙың яғымлы ҡарашын осратҡас, ул ғәфү үтенмәй булдыра алманы:

– Мин һеҙҙең хаҡта, ғөмүмән дини кешеләр тураһында яңылыш фекерҙә булғанмын. Үҙемдең хаҡлы булмаға-

нымды таныйым. Һеҙ тәрән ғилемгә эйә, юғары мәҙәниәтле, хикмәт менән ғәмәл ҡылыусы кеше. Бөгөн шуны аңланым: Аллаһҡа ышанған әҙәмдең күңел һәм зиһен офоҡтары киңәйә. Мин ике институт бөттөм, быының менән ғорурланам, әммә ундай юғарылыҡҡа күтәрелә алғаным юҡ.

Аҙаҡ ул үҙен һағайып тыңлаған Илдарға ҡараны:

– Һин гүзәл урын тапҡанһың, улым. Хикмәт бабайыңды иғтибар менән тыңла. Атай булып мин бирә алмағанды һин белергә тейеш.

Илдар үҙ ҡолағына үҙе ышанмай торҙо. Шатлығынан ул ҡоштай күккә атылырҙай булды.

Исмәғил, ағаһының асыуына тарыуҙан шөрләп, ситкәрәк киткәйне, шуға эштең ни менән бөткәнен белмәне.

– Эй, Исәғил! Етәр, ҡасма минән! Һеҙ Илдар менән бынан һуң да Хикмәт бабайыңа йөрөй алаһығыҙ! Әсәйең менән үҙем һөйләшермен! – тигән уның һүҙҙәрен ишеткәс, уның да аптырауының иге-сиге булманы.





# ПЛАНЕТАНЫҢ КОНДИЦИОНЕРЫ

Рөхсәт һорап, Илдарҙың атаһы сығып китте. Ул киткәс, Хикмәт бабай, йылмайып, балаларға былай тине:

– Минең бер тәкдимем бар. Әйҙәгеҙ, киләһе һабаҡҡа шәмбе көн мәсеттә йыйылайыҡ! Тик һеҙ ата-әсәйегеҙҙән рөхсәт һорарға тейешһегеҙ. Йә, ни тиерһегеҙ?





Был тәҡдимгә барыһы ла ҡыуанды:

– Ура! Беҙ риза!

**Тулҡынландырғыс иртәнге намаҙ**

Ул иртәне бөтәһе лә тулҡынланып көтөп алды – күптәре бит мәсеткә тәүге тапҡыр аяҡ баҫты.

Искәндәр мәсеткә килгәндә, Хикмәт бабай башҡа ир-ат менән имам артына намаҙға баҫҡайны. Яйлап малайҙар йыйыла башланы. Матур тауыш менән көйләп имам уҡыған Ҡөрьән аяттары иртәнге һауала йыраҡҡа тарала, Йәннәт еҫен тараткандай, күңелдәргә рухи ләззәт бирә.

Намаҙҙан һуң, малайҙар мәсет ишек алдында Хикмәт бабай тирәһенә йыйылды.

– Хәҙер беҙ һеҙҙең менән яҡындағы урманға барабыҙ. - тине ул.- Унда мин һеҙгә тын алған ағастарҙы күрһәтермен.

– Тын алған ағастар? – тип ҡабатлап һораны Ильгиз.

Малайҙар, аптырашып, бер-береһенә ҡараштылар. Әлбиттә, тын алған ағастарҙы бөтәһенең дә күргеһе килде.

Урман йыраҡ түгел ине, оҙаҡламай улар унда барып та еттеләр. Танауға сайыр еҫе килеп бәрелде, аяҡ аҫтында һаҡ ҡына ылыҫ шытырлай. Хикмәт бабай балаларға үҙе

менән алған һыуынып та өлгөрмәгән йылы көлсәләрҙе таратып бирҙе. Офоҡто сағыу нурға күмеп, ҡояш ҡалҡа башланы. Хикмәт бабай, тәрән итеп һулап, күңелендәге ҡәнәғәтлеген, һөйөнөсөн белдерҙе:

– Аллаға шөкөр!

## Тын алған ағастар араһында

– Ағастарҙың нисек тын алғанын белгегеҙ килә, шулай-мы?

«Эйе!» - балалар ризалашып баш ҡаҡты.

Хикмәт бабай һөйләй башланы:

– Ҡояш сығыу менән, барса был ағастар тын ала башланы. Беҙ кислород менән тын алабыҙ, углекислый газды бүлеп сығарабыҙ, ә үҫемлектәрҙә иһә һәммәһе киреһенсә. Ҡояш нуры тәьҫирендә үҫемлектәрҙең йәшел япраҡтанында фотосинтез процесы башлана. Һеҙ быларҙы мәктәптә үтәһегеҙ. Үҫемлектәрҙең япраҡтарында углекислый газдан һәм ерҙән тамырҙар һурып алған һыуҙан органик матдәләр – углеводтар барлыҡҡа килә һәм кислород бүленеп сыға. Әммә был реакция башланһын өсөн, ҡояш яҡтылығы кәрәк. Унан башҡа фотосинтез мөмкин түгел.

Урманға, алтын уҡтар һымаҡ, ҡояш нуры үтеп инде. Имән, ылыҫ, сәскә еҫтәре менән тулған һауа, шатлыҡлы тойғолар уятып, үпкәгә тулды.

– Йәғни, үҫемлектәр тын алған өсөн, беҙ кислород менән тын алалабыҙ, – тине Хикмәт бабай һәм дауам итте:

– Фотосинтез ваҡытында ҡояш нурҙарының үҫемлектәргә төшкән 1-2% энергияһы ғына үҙләштерелә, әммә

был бөтә йән эйәләрен кислород менән тәьмин итергә етә. 1779 йылда Нидерланд ғалимы Ян Ингенхауз асҡан был хәҡиҡәт тураһында 1400 йыл элек үк Ҡөрьәндә бәйән ителә. Һис шикһеҙ, Ҡөрьәндең тормош өсөн мөғжизәләр тулы илаһи ҡулланма булыуын раҫлап тороусы йәнә бер дәлил был: **«Яҡтылыҡ ата башлаған таң исеме менән әйтәм! Шик юҡ,** (Ҡөрьән) **бик тә шәрәфле бер илсенең** (Ябраилдең) **алып килгән изге һүҙҙәрелер»** («әт-Такуир (Төрөп ҡуйыу)» сүрәһе, 81/18-19). Аллаһ Тәғәләнең тын алған таң тураһындағы һүҙҙәре шуны аңлата: йәшел үҫемлектәрҙәге фотосинтез тәүге ҡояш нурҙары менән башлана. Ә Раббыбыҙҙың Изге Китап төшөрөлә башлағанға тиклем кешеләр хәбәрҙар булмаған был күренеш менән ант итеүе уның уғата мөһимлеген раҫлап тора. Йәнәбе Хаҡ мөһим булмаған нәмә менән ант итмәй бит инде. Уйлап ҡарағыҙ әле, ағастар тын алыуҙан туҡтаһа, нимә булыр ине?

Илдар яуап бирҙе:

– Урмандар – планетаның үпкәһе, тип аңлатты уҡытыусыбыҙ. Тик мин, урмандарҙың тын алыуын белгәс кенә, уның асылын ныҡлап төшөндөм. Улар тын алған өсөн, беҙ тын алабыҙ.

– Дөрөҫ, Илдар, – тип маҡтаны Хикмәт бабай.

Искәндәр ҙә һүҙгә ҡушылды:

– Дәрес буйы ишек ябыҡ, тәҙрәләр ябыҡ булһа, тынсыу булып китә, тын алыуы ауырлаша. Тәнәфестә беҙ коридорға сығабыҙ һәм класты елләтәбеҙ. Әгәр ағастар булмаһа, планетабыҙҙа саф һауа бөтөр ине, һәм беҙ ул саҡта тын алалмайынса үлер инек.




**Кондиционер эшләй**

Хикмәт бабайға Искәндәрҙең яуабы бик оҡшаны.

– Афарин, улым, - тине ул. Һис шикһеҙ, әгәр үҫемлектәр, ағастар, урмандар булмаһа, кешеләр ҙә булмаҫ ине. Кислород бик тиҙ бөтөр, һауа ағыулыға әйләнер, һәм кешеләр һәләк булыр ине.



Малайҙарҙың береһе түҙемһеҙләнеп ҡысҡырып ебәрҙе:

– Хикмәт бабай, ә беҙҙең өйҙә кондиционер бар. Ул һауаны таҙарта. Урмандарҙы планетабыҙҙың һауаһын сафландырған, дымландырған кондиционер менән сағыштырырға мөмкин!

Хикмәт бабай, йылмайҙы, малайҙың башынан һыйпаны ла былай тине:

– Дөрөҫ, балаҡайым! Ҡарағыҙ әле, кондиционер нисек яҡшы эшләй! Һауа саф һәм дымлы, таҙа, шулай түгелме ни?

Бөтәһе лә көлөп ебәрҙе, ә Хикмәт бабай дауам итте:

– Әгәр ҙә ки Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә фотосинтез реакцияһын һәм быҙың өсөн кәрәкле шарттарҙы булдырмаһа, мәҫәлән, үҫемлек күҙәнәктәрендәге хлорофилды, Ер кешеләр өсөн дә, хайуандар өсөн дә, башҡа йән эйәләре өсөн дә йәшәргә яраҡһыҙ булыр ине.  Фотосинтез ярҙамында бит үҫемлектәр тамырҙары тупраҡтан алған, үҫеш, бөтә йәшәйеш функцияларын үтәү өсөн кәрәкле булған туҡлыҡлы матдәләрҙе үҙләштерә. Раббыбыҙ, барсаһын күҙ уңында тотоп, беҙҙең өсөн бихисап ниғмәттәрҙе бар ҡылған. Ер ҡуйынында йәки үҫемлектәр эсендә барған ҡатмарлы тормошто беҙ аңлап бөтә алабыҙмы ни? Беҙ йоҡлағанда ла тын алабыҙ, быға иғтибар ҙа бирмәйбеҙ. Ә

беҙ тын алһын өсөн, барлыҡ ғаләм арымай-талмай хеҙмәт итә: ҡояш, ер, ағастар, үләндәр. Аллаға шөкөр итер өсөн сәбәп түгелме ни былар? Аллаһтың рәхмәтле ҡоло була алырбыҙмы? Илаһи сәнғәт әҫәре булған ошо донъяға беҙ ана шул имтиханды бирер өсөн килдек бит. Беҙгә бүләк итеп бирелгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәрәкәттәрҙе күреп, улар хаҡында фекер йөрөтөп, Раббыбыҙға рәхмәтебеҙҙе белдерергә кәрәк! Ауыр тын алған сирлегә врач яҡшы дарыу тәғәйенләп, теге сирҙән ҡотолһа, ул врачҡа ихлас рәүештә рәхмәттәрен әйтә. Ә бит кеше, яҡты донъяға килеп, гүргә ингәнсе, һис бер ҡыйынлыҡһыҙ миллиондарса һулыш яһай. Тимәк, шундай бәрәкәттәрен биргән Раббыбыҙға рәхмәттәребеҙ ниндәй булырға тейеш?

## Беҙгә кислородлы баллон кәрәкме?

Искәндәр, һорау бирергә ниәтләп, ҡулын күтәрҙе. Хикмәт бабай рөхсәт биреп баш ҡаҡты: «Һөйлә, беҙ тыңлайбыҙ һине».

– Әле йәй, бар тирә-йүн йәшеллеккә күмелгән. Ә ҡышын, япраҡтар ҡойолғас, ергә ҡар яҡҡас, кислород ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң? Йәшеллектең әҫәре лә булмаған сүллектә ул ҡайҙан барлыҡҡа килә?

– Планетаның үпкәһе урмандар булыуын Илдар хәтергә төшөргәйне инде. Әммә шуны ла әйтеп китергә кәрәк: урмандар – үпкәнең берәүһе генә. Ә икенсе үпкә – океан. Унда бихисап фитопланктон массалары көн итә, улар Ерҙәге кислородтың сама менән яртыһын эшләп сығара. Бынан тыш япраҡлы ағастар, ҡыш алдынан япраҡтарын ҡойоп, алмашыу процесы уларҙа туҡталһа, ылыҫлы ағастар - ҡарағайҙар, шыршылар, аҡ шыршылар тын

алыуын дауам итә. Кислород Ер атмосфераһының 21 процентын тәшкил итә. Раббыбыҙ Аллаһ шундай камил тәртип булдырған: ниндәй миҙгел булһа ла, планетаның һәр мөйөшөндә: тайгала булһынмы, сүллектәме йәки Антарктидаламы – бер ерҙә лә был дәүмәл үҙгәрмәй, сөнки һауа массалары бик тиҙ ҡушыла, аралаша. Юғиһә сүллек шарттарында, мәңгелек боҙҙар араһында кешеләр нисек йәшәр ине? Быларҙың һәммәһе Раббыбыҙҙың беҙгә ҡарата сикһеҙ мәрхәмәтен күрһәтә. Әгәр Аллаһ шундай камил тәртип һәм тигеҙлек булдырмаһа, ни булыр ине? Өйҙән сыҡҡанда, беҙ зонтигыбыҙҙы алыу-алмау тураһында уйлайбыҙ, ә бит шулай тип тә уйлай алыр инек: «Һауала бөгөн кислород бөтмәҫме икән? Кислород маскаһын һәм баллонды алайыммы икән?» Хатта ки Аллаһты танымаған атеистар ҙа бер көн килеп Ерҙә фотосинтез процесы туҡталыр, донъя кислородһыҙ ҡалыр тигән уйҙы башына ла алмай. Улар үҙҙәре инанмаған Аллаһ урынлаштырған тәртипкә, тайпылыштар, хаталар булмауына ышана! Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, төпкө аңдары менән Аллаһҡа инаныуҙарын аңлай ғына алмайҙар!




Ә хәҙер уйлап ҡарағыҙ әле, беҙ гел кислородҡа мохтаж булһаҡ, ә ул даимән ҡул

осонда булмаһа, тормошобоҙ бик еңелдән булмаç ине. Ул саҡта беҙ һәр ваҡыт һәләкәт алдында торор инек.

Йәки ер өçтөндә ҙур бейеклектәге кеүек шыйығайтылған һауа булһа? 4000 метр бейеклектән һуң, кешегә кислород етешмәй башлай. Ул йыш-йыш тын ала, тыны бөтә, күкрәге ҡыçыла. 6000 м бейеклектән һуң, был кисерештәр көсәйә һәм кеше үлеп ҡуйыуы ла ихтимал. 1400 йыл элек самолеттар, хатта ябай ғына моторлы транспорт саралары ла булмаған заманда төшөрөлгән Ҡөрьәндә был хәҡиҡәт асып һалына: **«Тура юлға күндерергә теләһә, Аллаһ ул кешенең күкрәген Ислам өсөн киң ҡыла; юлдан яҙҙырырға теләһә, уның күкрәген тап-тар итер; (ул кеше) Күккә осҡандағы кеүек, (сыҙай алмайынса) интегер. Аллаһ иман килтермәгәндәр өçтөнә ана шулай нәжеслек язаһы индерер»** («әл-Әнғәм (Мал-тыуар)» сүрәһе, 6/125). Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был аят төшөрөлгәндә, юғарыға күтәрелгән һайын, атмосфера баçымы түбәнәйеүен, тын алыуы ауырлашыуын, күкрәк эсендә ауыртыу һиҙелеүен белгән кешене табыуы мөмкин булмағандыр, моғайын. Шул рәүешле Ҡөрьәндәге илаһи хәҡиҡәттәрҙе кешелек ахыры заманға саҡлы асасаҡ!..

Ҡояш нурҙары нәҙек юлаҡ булып ағастарҙың ҡуйы сатыры аша юл яра. Йомшаҡ ҡына йылы ел иçә. Ылыç, сәскә, ҡояшта тулышып бешкән еләк еçе килә. Ҡоштар һайрай, бөжәктәр безелдәй, үләндәр араһында сиңерткәләр сырылдай. Хозур тәбиғәттәге бөгөнгө көн балалар өсөн ҙур асыш көнө булды. Бактиһәң, улар тын алһын өсөн, Аллаһ Тәғәлә, ерҙәге үçемлектәргә һәм океандағы фитопланктондарға йөкмәтеп, шундай хәстәрлек һәм һөйөү менән ғәжәйеп фотосинтез реакцияһын бар ҡылған. Һәм улар шундай уҡ мөхәббәт һәм әҙерлек менән Аллаһтың әме-

рен алһыҙ-ялһыҙ күндәм утәй икән дә баһа. Шул тиклем күп гүзәл ниғмәттәре өсөн, һәр кем Аллаһҡа рәхмәтен белдергеһе килде. Бөгөн үҙе мәсеттә күргән мосолмандар кеүек, Илдар ҙа, ҡулын күккә төбәп, күңеленә килгән ихлас һүҙҙәрҙе әйтте:

– Ий минең йомарт Раббым! Беҙгә биргән бөтә ниғмәттәрең өсөн рәхмәтемде белдерәм! Үҙебеҙ белгән ниғмәттәр өсөн дә, үҙебеҙ белмәгән ниғмәттәр өсөн дә!

– Әмин! – тине Хикмәт бабай.

– Әмин! Әмин! – тип ҡабатланы малайҙар.



# ЫШАНЫСҺЫҘ ӨЙ

– Аллаһ алдында доғанан да ҡиммәт нәмә юҡ. Һәр ваҡыт шулай доға ҡылып тороғоҙ һәм Аллаһтың рәхмәтенә ирешерһегеҙ. Бөркөттәрем минең! Беҙ урман эсенә үк инеп киттек, тын алған ағастарҙы ла күрҙек, доғалар ҙа ҡылдыҡ, инде ҡайтһаҡ та була, - тине Хикмәт бабай. Һәм



бөтә компания ҡайтыр яҡҡа боролдо. Улар ҡеүәтле ҡарағайҙарға, аҡ олонло ҡайындарға, төрлө төҫтәге күбәләктәргә һоҡланып тар ғына һуҡмаҡтан бара ине.

– Ҡарағыҙ әле! – тип ҡысҡырып ебәрҙе ҡапыл Ильгиз, ҡулын алға һоноп. Уйпат ҡына бер урында бейек булып үҫкән ат ҡолаҡтары өҫтөндә ҙур ғына түңәрәк үрмәкес ауы эленеп тора ине. Талғын елдә тирбәлгәндә, селтәрле нескә ау өҫтөндәге ысыҡ бөртөктәре ҡояш нурында гәүһәр муйынсаҡ кеүек йылтырай.

– Ниндәй ғәләмәт ҙур ау! Моғайын, уны бик оло үрмәкес үргәндер! Ә үҙе ҡайҙа икән? – тип аптырашты малайҙар.

– Әйҙәгеҙ, ҡарайыҡ – тип тәкдим итте Хәмит бабай. – Ау – бөжәк тотоп туҡланыр өсөн эшләнгән үрмәксенең ҡоралы. Үрмәкес ҙурыраҡ булған һайын, ауы ла ҙурыраҡ. Әгәр ул ауының уртаһында ултырмаһа, тимәк ҡайҙалыр яҡында боҫоп тора. Ә ауҙан ул ултырған боҫҡонға мотлаҡ сигнал ебе һуҙыла. Уны шуның буйынса табып була.

– Бына уның боҫҡоно! – тип ҡысҡырып ебәрҙе Юлай. Ул боҫоп ултырған үрмәкесте беренсе булып күреп ҡалды. Сигнал ебе шундай уҡ еп менән уратылған ҡыҙғылтыраҡ япраҡ йомарламына алып килде. – Ә бына ауҙың хужаһы! Ҡарағыҙ әле! – Юлай һаҡ ҡына итеп үрмәкестең аласығын



бер аҙ әйләндерә бирҙе. Үрмәкес, ысынлап та, шунда ине. Ул ҙур ине, хатта ғәләмәт ҙур. Ул, ризаһыҙлыҡ белдереп, бөгөлгән төклө аяҡтарын ҡыймылдатты, ҡап-ҡара дүрт пар күҙен уҫал итеп ялтыратып алды.

– Был әүернәле үрмәксе. Ныҡлап ҡараһаң, арҡаһында тәрене күрергә була, – тине Илдар.

– Эйе, был әүернәле үрмәксе. Һеҙ уның телен аңлайһығыҙмы? Беҙгә ул нимә тип әйтергә теләй? – тип һораны Хәмит бабай.

– «Һеҙ ниңә мине борсойһоғоҙ? Ана бара юлығыҙ, бында минең территория! Мин бит тешләй ҙә алам!» – тине Ильгиз асыулы үрмәкес булып.





– Дөрөҫ, - тип йылмайҙы Хикмәт бабай. – Әйҙәгеҙ, тыныслыҡта ҡалдырайыҡ уны һәм, ысынлап та, үҙ юлыбыҙ менән китәйек. Ул асыулы, шуға күрә тешләп алырға ла күп һорамаҫ. Әлбиттә, уның ағыуы кеше өсөн үлемесле түгел, әммә башты ауырттырыуы, тешләгән урыны ҡысытып, әрнетеп тороуы бик ихтимал.

– Ярай, асыуланма, беҙ һине рәнйетергә теләмәнек, – тип шаяртып хушлашты Юлай үрмәксе менән.

– Күрәһеңме, беҙ үҙ юлыбыҙ менән киттек! Ярай, дуҫҡай, хуш! – тип өҫтәне Ильгиз.

Малайҙар көлөшөп алдылар ҙа, кире һуҡмаҡтарына төшөп, юлдарын дауам иттеләр.





– Хикмәт бабай, ә үрмәкес нисек ау үрә? Уның өсөн епте ул ҡайҙан ала? – тип һораны бәләкәс Ильгиз.

– Үрмәкестең эсендә махсус шыйыҡса эшләп сығара торған төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы биҙҙәре бар. Һауала ул шыйыҡлыҡ шунда уҡ ҡата, нәҙек кенә, ләкин ныҡ, һығылмалы епкә әүерелә. Үрмәкес ул шыйыҡлыҡты махсус ағзаһы – ау сөйәле аша сығара. Бер сығарылған һәм ҡатҡан епте кире индереп булмай.





– Үрмәкестәрҙең ау буйлап шәп-шәп күтәрелгәнен һәм ауҙың ҡыҫҡарғанын күргәнем бар, – тине малайҙарҙың береһе.

– Эйе, дөрөҫ. Үрмәкес ауҙы үҙенә йыя барған һымаҡ күренә ул. Асылда иһә ул епте йә аяғына, йә тәненә урай. Ә ауҙарҙың формаһы төрлө үрмәкестәрҙә төрлөсә була. Мәҫәлән, әле беҙ күргән әүернәле үрмәкестең ауы арасалы велосипед тәгәрмәсе шикелле түңәрәк була; башҡа үрмәкестәр ауҙарын тоҡ йәки төрөпкә рәүешендә тығыҙ итеп яһай. Үрмәкес ауын үҙе һайлаған иң юғары нөктәнән үрә башлай, нигеҙ итеп өс еп һуҙа. Шул нигеҙ эсендә үҙәктә тоташҡан бер нисә еп һуҙа. Йомарлам яһап, шул нигеҙҙең уртаһын билдәләй, шунан бихисап радиустар һуҙа һәм спираль буйынса уларҙы ептәр менән нығыта. Аҙаҡ ау ептәрен урынлаштыра. Шуныһы ғәжәп: радиустар араһындағы мөйөштәр, нур кеүек һуҙылған ептәр араһы тигеҙ. Ҡоролмаһының геометрик пропорцияһын нисек һаҡлай алалыр? Быны өсөн бит, ябай ғына булһа ла, үлсәү приборҙары кәрәк. Һәм, беләһегеҙме, Йәнәбе Хаҡ быны ла күҙ уңында тотҡан! Ауын үргән саҡта, үрмәкес алғы аяҡтарын масштаб линейкаһы рәүешендә файҙалана! Спираль уратымы араһы оҙонлоғон һәр ваҡыт шул ышаныслы һәм аныҡ инструменты ярҙамында тикшерә.



Һөйләшеп килә торғас, сәйәхәтселәр урман һуҡмағынан ауыл юлына төшөп алдылар. Ул уларҙы йәнә иртән походтары башланған мәсеткә алып килде. Мәсет буш, ә теләгән бер кеше инеп намаҙ уҡый алһын өсөн, ишегендә асҡыс тора ине.

– Беҙ ҙур юл үттек. Әйҙәгеҙ ошонда бер аҙ туҡтап алайыҡ, – тип тәҡдим итте Хикмәт бабай.

Улар ҙур ағастар үҫкән, тәпәш кенә таш ҡойма менән уратылған түтәлдәрҙә һоҡланғыс сәскәләр үҫкән мәсет ихатаһына инделәр. Малайҙар, террасала ултырғыс табып, Хикмәт бабай өсөн уны ағас күләгәһенә илтеп ҡуйҙылар. Үҙҙәре, ҡыҙыҡлы әңгәмәнең дауамын тыңларға өмөтләнеп, үләнгә ултырҙылар.

– Үрмәкүс ояһын ни тиклем генә оҫта итеп үрмәһен, ул елдән, ямғырҙан һәм һыуыҡтан һаҡламай. Был турала Раббыбыҙ Ҡөрьәндә әйтә, ул сүрә «әл-Ғәнкәбут», йәғни «Үрмәксе» тип атала.

Аллаһ әмерҙәренә ҡаршы барған, үҙ теләктәренең, нәфселәренең ҡолона әйләнгән кешеләрҙе Ул үрмәкес менән сағыштыра. Уларҙың маҡсаттары, ынтылыштары һәм ғөмүмән бөтә тормоштары, үрмәкес үргән ау кеүек, һай, ышанысһыҙ:

**«Аллаһтан башҡа илаһтар уйлап табыныусыларҙың ғәмәле пәрәүез** (оя) **ҡорған үрмәксенекенә оҡшаш. Әгәр улар аңлай торған заттар булһа, үрмәкес ояһы – пәрүәздең ни ҡәҙәр сыҙамһыҙ икәнен белерҙәр ине!»** («әл-Ғәнкәбут (Үрмәкес)» сүрәһе, 29/41).

Иманы көслө һәм ҡараштары дөрөҫ булмаған кешеләр томанлы идеалдарға ынтылып, үҙҙәренә үҙҙәре тыуҙырған ауырлыҡтарҙы еңергә, бәләләр ауынан ҡотолорға тырышып көн итә. «Ни өсөн һуң Аллаһ беҙгә үрмәксене миҫал итеп килтерә?» - тиерһегеҙ. Тирә-йүнегеҙгә бағығыҙ! Был донъяла кешене аҙым һайын ҡапҡандар һағалап тора. Улар үҙҙәренә саҡыра, ымһындыра. Улар гүзәл, нәзәкәтле һәм сағыу булып күренеүе лә ихтимал. Интернет, реклама, төнгө клубтар, презентациялар, концерттар – үрмәкес ауҙары һағалап торған урындар былар ғына түгел. Ялған, фантастик донъяға кешене юхалап кертеп, уға тырышып-тырмашып алдатҡыс идеалдарҙы, ялған кумирҙарҙы, уйһыҙ-рухиәтһеҙ тормошто көсләп тағалар, хәҡиҡәт юлынан йырағайталар. Ҡолаҡтарҙы, күҙҙәрҙе, зиһенде, тәнде үрмәкес ағыуынан паралич һуҡҡан кеүек була был. **«Фани донъя тереклеге ул ваҡытлыса алдау, бер уйын ғына. Әхирәт тереклеге иһә**



**бик тә хәйерле. Һеҙ шул ҡәҙәреһен дә аңламайһығыҙмы һуң!»** («әл-Әнғәм (Мал-тыуар)» сүрәһе, 6/32).

Йәштәр, сағыу утҡа йыйылған күбәләктәр ише, клубтарға, дискотекаларға, төрлө «тусовкаларға» йыйыла. Әшәкелек һәм зина һаҙлығына батҡан бик күптәренә инде унан ҡотолоу юҡ. Үрмәкес ауына – фани донъяның ауына эләккән ҡорбандың аҙағы билдәле: ул уға ағыуын ебәрәсәк, бөтә көсөн, хатта ғүмерен һурып аласаҡ, бупбуш тән ҡабырсағы ғына тороп ҡаласаҡ. Рухи төшөнкөлөк һәм һәләкәт – хаҡиҡи ҡиммәттәрҙән алыҫлашҡандарҙың, ләззәттәр артынан сабыулап йөрөгәндәрҙең, бүләк итеп бирелгән ерҙәге ҡиммәтле ғүмерен фани донъяның ялған ялтырауыҡтарына, байлыҡтарына сарыф иткәндәрҙең өлөшө. **«...Беҙ һәр өммәттең эшен зиннәтләнек. Һуңынан, Раббыңа ҡайтҡас, уларҙың ни эшләгәнен Ул Үҙе әйтер»** («әл-Әнғәм (Мал-тыуар)» сүрәһе, 6/108).

Шуға иғтибар итегеҙ, балалар: үрмәкестең йорто осоп китһен өсөн, елдең көслөрәк иҫеүе лә етә. Шуға күрә үрмәкес ояһын ышығыраҡ урынға ҡорорға тырыша. Әммә үрмәкес нисек кенә боҫоп ултырмаһын, хәҡиҡәт еленә ҡаршы ул көсһөҙ. **«Үҙҙәренә Аллаһтан башҡа ярҙамсы тапҡан кешеләр ау үргән үрмәксе шикелле бит. Иң ышанысһыҙ өй, әлбиттә, – үрмәксе ауы** (өйө)**, әгәр белһәләр»**

(«әл-Ғәнкәбут (Үрмәкес)» сүрәһе, 29/41).

Нәҙек кенә ептән үрелгән уның өйө күк менән ер араһында аҫылынып тора. Уны бал ҡорто умартаһы, йылғаның текә ярындағы ҡарлуғас ояһы, йомрандың йылы өңө менән сағыштырырлыҡ түгел. Кем үтәнән-үтә күренгән һәм бөтә стихияларға бирешеүсән торлаҡта йәшәргә теләр ине икән?..



## ҮҘ УРЫНЫҢДЫ БЕЛ!

Искәндәр йәй буйы Хикмәт бабайға һабаҡҡа йөрөнө. Әммә каникулдар тамамланыуға һанаулы ғына көндәр ҡалды, ҡалаға ҡайтырға ваҡыт етте. Дуҫтары ла төрлө яҡҡа таралышты, яңы уҡыу йылы башланыр мәл етте. Малайҙар Хикмәт бабайҙы, уның әңгәмәләрен яратып өл-



гөргәйне, шуға уның менән теләмәй генә айырылыштылар. Аллаһ бойорһа, киләһе йәй ауылға мотлаҡ килергә һүҙ ҡуйыштылар.

Искәндәр яҡшы уҡый. Ул синыфтағы иң алдынғы уҡыусылар рәтендә. Ә география инде уның иң яратҡан дәресе. Уҡытыусыһы ла уны гел маҡтап телгә алды, сөнки ниндәй генә тема булмаһын, беренсе булып ул ҡул күтәрә. Класташтары уның шундай белемле булыуына аптырайҙар ҙа, бер аҙ көнләшеп тә ҡуялар.

## Көсөргәнешле мәл

Ул көндө география дәресендә атмосфералағы яуым-төшөмдөң барлыҡҡа килеүе тураһында һүҙ барҙы. Уҡытыусы Искәндәрҙе таҡтаға сығарҙы. Искәндәр дәреслектәге материалды Хикмәт бабаһының әңгәмәләре ваҡытында ишеткән мәғлүмәттәр менән тулыландырҙы, бик күп быуаттар элек Ҡөрьәндә кешеләргә төшөрөлгән елдәргә ҡағылышлы мөғжизәле хәҡиҡәттәр тураһында һөйләне: **«Рәхмәт** (күрһәтеп) **алдынан Ул һөйөнөслө хәбәр менән елде ебәрә. Ул елдәр ауыр болоттар килтерһә, Беҙ уны үлгән** (ҡороған) **илдәр яғына ҡыуып, ямғыр яуҙырабыҙ, шул һыу менән төрлө емеш үҫтерәбеҙ...»** («әл-Әғраф (Кәртәләр)» сүрәһе, 7/57).

Уҡытыусы Искәндәрҙе ҡәнәғәтһеҙ йөҙ менән тыңланы, аҙаҡ йәне көйөп туҡтатып ҡуйҙы:

– Етте! Һин тәүге тапҡыр ғына түгел, яуап биргәндә, дини сығанаҡтарҙан, Ҡөрьәндән булһа кәрәк, өҙөктәр ҡушып һөйләйһең. Мин киҫәтеп әйтәм: беҙ дин дәресендә лә, мәсеттә лә түгел. Дәрестә һин мәктәп прогаммаһына ярашлы яуап бирергә тейеш! Үҙеңдең урыныңды бел!



Искәндәр ундай ҡырҡыу һөйләшеүҙе уҡытыусыһынан көтмәгәйне. Ул быға лайыҡ түгел ине. Бәлки, уҡытыусыны дин ҡыҙыҡһындырмайҙыр һәм ул Изге Ҡөрьән тураһында ишеткәне лә юҡтыр, әммә барыбер уға бик ҡыйын булды. Ул партаһына барып ултырҙы, башын эйҙе, күҙҙәренә йәш тулды. Уҡытыусы иңә, йәне көйөп, һүҙен дауам итте:

– Һин аҡыллы һәм һәләтле малай, әммә һин һуңғы ваҡыт дин менән артыҡ мауыҡҡаның! Фән һәм дин һыйыша алмай! Фән – фекерләүгә һәм логикаға нигеҙләнгән объектив белем! Белем техниканы үҫтереүгә, кешелектең алға китеүенә булышлыҡ итә! Ҡөрьәндең урта быуат ҡараштары менән быны бер рәткә ҡуйып буламы ни! Ҡалдыр быны, Искәндәр! Һинең яҡшы белем алырға, яҡшы һөнәр алырға, ғалим булырға бөтә мөмкинлектәрең бар, уларҙан үҙеңде мәхрүм итмә!

## Хикмәт бабай, әйтерһең дә, унын янында

Класта көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты. Уҡытыусы, уйлағанын әйтеп, бер аҙ тынысланды. Шул саҡ Искәндәр Хикмәт бабайҙың фатихалы баҡсаһын һәм унын үҙен, һәр саҡ тыныс, яғымлы, йылмайған йөҙөн күҙ алдына килтерҙе. Күҙҙәрен һөртөп, яуап итеп малай ҙа йылмайып ҡуйҙы. Хикмәт бабаһының үҙ янында булыуын, уға терәк-таяныс булыуын тойҙо. Ҡулын күтәреп, ул һүҙ һораны һәм уҡытыусыһына ихтирам менән ҡарап, һүҙ башланы:

– Уҡытыусым, Ҡөрьән – урта быуат китабы, беҙҙең заманда ул актуаль түгел, тиһегеҙ, әммә хәҙерге заман ғалимдары бөтөнләй икенсе фекерҙә!

Мәҫәлән, күптән түгел бер француз ғалимы, капитан Жан Ив Кусто Атлантик океан һәм Урта диңгеҙ осрашҡан Гибралтар боғаҙында тикшереүҙәр алып бара һәм шуны асыҡлай: уларҙың һыуҙары ҡушылмай, әйтерһең дә, ниндәйҙер күҙгә күренмәгән кәртә уларҙы айырып тора. Был күренеш тураһында 1400 йыл элек Ҡөрьәндә яҙылғанын белгәс, ул һоҡлана, хайран ҡала: **«Ул** (береһе сөсө, береһе тоҙло һыуҙы) **ике диңгеҙҙе**





**йәнәшә ағырлыҡ итте. Уларҙың араһына** (күренмәҫ) **ҡорма ҡороп ҡуйҙы. Шулай булғас, Раббығыҙҙың ҡайһы ниғмәттәрен ялғанға сығармаҡсы булаһығыҙ?»** («әр-Рахмән» сүрәһе, 55/19-21).

Ә француз академигы Морис Бюкай, Ҡөрьәндә бихисап фәнни фактарҙы раҫлаған дәлилдәрҙе табып, хатта үҙенең тикшеренеүҙәрендә уны юл күрһәтеүсе сифатында алырға теләгән: «Әгәр Ҡөрьәнде элегерәк белгән булһам, мин фәнни асыштарға табан һуҡырҙарса бармаҫ инем, минең юл күрһәтеп торған ебем (йондоҙом) булыр ине!»

Германияның билдәле геология профессоры Альфред Кронер әйтеүенсә, Ҡөрьән төшөрөлгән ваҡытта Мөхәммәт пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғаләмдең барлыҡҡа килеүенә ҡағылышлы мәсьәләләр тураһында хәбәрҙар булмаған, сөнки һуңғы бер нисә тиҫтә йыл эсендә генә ғалимдар, иң алдынғы технология методтарын ҡулланып, быға яуап таба алғандар ... Мәҫәлән, 1400 йыл элек ядро физикаһы тураһында бер нәмә лә белмәгән кеше Ер һәм Күктәрҙең бер сығанаҡтан барлыҡҡа килеүен күҙ алдына ла килтерә алмаған: **«Әллә һуң ул иманһыҙҙар Күктәр һәм Ерҙең ҡасандыр бергә уҡмашҡан хәлдә булғанын белмәйҙәрме..? Беҙ уларҙы айырҙыҡ та һәр тереклекте дымдан яралттыҡ. Шунан**



**һуң да улар иман килтермәйҙәрме?»** («әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр)» сүрәһе, 21/30).

Фән һәм техника үҫешкән быуатта Аллаһ Тәғәлә 14 быуат элек Ҡөрьән аша тапшырған күп ғилемдәр раҫланды! «Фуссиләт (Аңлатылды)» сүрәһенең 11-се аятында Ғаләмдең газ рәүешендәге массанан барлыҡҡа килеүе хаҡында хәбәр итәлә: **«Унан һуң томан һәм төтөн хәлендәге Күккә теләген йүнәлтте...»**

Башҡа аяттарҙа Ерҙең әйләнеүе һәм күк есемдәренең үҙ орбиталары булыуы хаҡында уҡыйбыҙ:

**«Аллаһ төндө, көндө, Ҡояшты, Айҙы яһаны. Уларҙың һәр береһе үҙ әйләнәһе тирәһендә Күк йөҙө буйлап йөҙөп-осоп йөрөргә тәртип ителде»** («әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр)» сүрәһе, 21/33);

**«Ҡояш Айға килеп ирешә алмаҫ, төндөң дә көн менән бергә булаһы юҡ. Есемдәрҙең барыһы ла** (теүәл билгеләнгән) **күк көмбәҙе буйлап йөҙә»** («Йәсин» сүрәһе, 36/40).

Ғалимдар сағыштырмаса яңы ғына беҙҙең Ғаләмдең киңәйеүен асыҡлаған: «Галактикалар беҙҙән арта барған тиҙлек менән йырағая, һәм оҙаҡламай улар яҡтылыҡ тиҙлеге кимәленә етәсәк. Ул саҡта беҙ уларҙы күрә алмаясаҡбыҙ. Шуға күрә, күҙәтеүҙәр алып барыу өсөн, яңынан-яңы ҡеүәтлерәк телескоптар кәрәк буласаҡ». Әммә 14 быуат элек үк Ғаләмдең киңәйеүе хаҡында Ҡөрьәндә хәбәр ителә: **«Беҙ ҡөҙрәтебеҙ менән Күкте сикһеҙ киң итеп яһаныҡ. Беҙҙә тиңе булмаған ҡеүәт, ҡөҙрәт бар»** («әҙ-Ҙәриәт (Таратыусылар)», 51/47).

Искәндәр шул ҡәҙәр ышаныс һәм рухи күтәренкелек менән һөйләне – бөтә класс уны, хайран ҡалып, тын да алмай тыңланы. Уҡытыусыһы ла иҫе китеп тыңланы. Ул нимәлер әйтергә лә уҡталып ҡуйғайны, тик Искәндәр, туҡтамайынса, һүҙен дауам итте:

– Уҡытыусым, һеҙ инҡар итһәгеҙ ҙә, Ҡөрьән бик күпкә фәндән алда бара. Ә яңы асыштар эшләнһә, Ҡөрьән хәҡиҡәттәре лә раҫлана. Һеҙ үткән дәрестә атмосфераның тере организмдарға тын алыу өсөн кәрәклеген, үлемесле йыһан нурланышынан, метеориттар төшөүҙән, көндөҙ Ҡо-

яштың көйҙөргөс яҡтылығынан, төнөн һалҡындан һаҡлау өсөн кәрәклеген аңлаттығыҙ. Атмосфераһыҙ Ер үле сүллеккә әйләнер ине. Атмосфераны өйрәнеү 17 быуатта башлана. Әммә ләкин 14 быуатта уҡ Ҡөрьәндә әйтелә: **«Беҙ Күк йөҙөн ҡаплауыс** (һаҡлаусы түбә) **түшәм кеүек итеп яралттыҡ. Улар** (кәферҙәр иһә Күк йөҙөнөң дәлилдәренән, Аллаһтың) **аяттарынан баш тарта!»** («әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр)» сүрәһе, 21/32).

Утыҙ пар күҙ, хәлде баһаларға, асыҡларға тырышып, уҡытыусыға төбәлде. Ул нимә тиер? Искәндәрҙең сығышы бит ул һөйләгәндәргә бөтөнләй ҡаршы килә.



## Уҡытыусы өсөн ауыр минуттар

Уҡытыусы Искәндәргә ҡапыл ғына яуап бирә алманы. Мосолмандарҙың Изге Китабы, уның йөкмәткеһе һәм фәнгә мөнәсәбәте тураһында ул һис нәмә белмәй ине. Бөгөн уҡыусыһынан ишеткәндәр уның өсөн шаҡ ҡатырғыс нәмәләр булды. Уҡытыусы йәш, тәжрибәһеҙ ине, үҙемдең ғилемһеҙлегемде белдерһәм, уҡыусылар алдында абруйымды юғалтырмын, тип ҡурҡты. Үҙен ышаныслы тоторға тырышып, ул класты үҙ яғына ауҙарырға маташты:

– Ҡөрьәндә бер ниндәй ҙә дөрөҫ белем юҡ тип әйтергә теләмәгәйнем. Әлбиттә, унда ниндәйҙер дөрөҫ мәғлүмәттәр булыуы мөмкин. Әммә беҙ фәнни һәм техник прогресс дәүерендә йәшәйбеҙ, шулай түгелме ни? Беҙ йыһан дәүерендә йәшәйбеҙ, йыһан караптары осорабыҙ, Айға һәм Марсҡа пилотһыҙ аппараттар ебәрәбеҙ, шулай түгелме ни? Ә бит Ҡөрьән төшөрөлгән заманда электр лампалары ла булмаған, – тип көлөп өҫтәне ул. – Ул саҡта сыра һәм май шәмдәр яҡтыртып йәшәгәндәр. Кешелек шундай ҡаҙаныштарға ирешер тип улар күҙ алдына килтерҙеме икән? Ә, балалар?

Уҡыусылар шымып ултыра бирҙе. Барыһын да Искәндәрҙең нимә тип әйтеүе ҡыҙыҡһындырҙы. Ә ул. Хикмәт бабайҙың һабаҡтарын иҫкә төшөрөп, былай тине:

– Уҡытыусым, Ҡөрьән – мөғжизәле китап, унда һис бер хата юҡ, сөнки ул кеше аҡылы емеше түгел, ә ошо донъяны ла һәм кешенең үҙен дә бар ҡылған Аллаһ Кәләме (Китабы). Төрлө замандағы фәнни асыштар һәм техник ҡаҙаныштар уның хаҡ булыуын раҫлай. Мәҫәлән, шундай аят бар: **«Аллаһ – Күктәрҙең һәм Ерҙең нурылыр. Эсендә сыраҡ** (шәм) **яндырылған бер йорт кеүек яҡты нурҙыр Ул. Сыраҡ иһә бер кәндилгә** (шәмдәлгә) **ҡуйылған. Ул шәмдәл алмас кеүек балҡыусы йондоҙ кеүек йымылдай. Ул Ҡояш сығышында ла, Ҡояш батышында ла тиңе булмаған мөбәрәк бер ағастан, зәйтүндән** (алған



май) **менән балҡый. Унның** (яна торған) **майы үҙенә ут төртмәһәләр ҙә, үҙенән-үҙе нур сәсә. Был яҡтылыҡ нур өҫтөнә нур булып яна. Аллаһ ихтыяр иткән кешеһен шул нурға ирештерә. Кешеләр өсөн Аллаһ** (ғибрәтле) **ҡиссалар килтерә. Аллаһ һәр нәмәнең асылын белеп тора»** («ән-Нур» сүрәһе, 24/35).

Ул заманда кешеләр яҡтылыҡ өсөн утты файҙаланғандар. **«Майы үҙенә ут төртмәһәләр ҙә, үҙенән-үҙе нур сәсә»** тигән һүҙҙәрҙе ялҡындан айырмалы булған яҡтылыҡ сығанағы – шәмдәлдәге электр уты тип аңларға кәрәк. Ә **«нур өҫтөнә нур булып яна»** кәлимәһе унан да алдынғыраҡ технологиялар файҙаланылған яҡтылыҡ сығанағына ишаралай. Электрҙы бик аҙ сарыф иткән ундай диод сыраҡтары хәҙер һәр ерҙә ғәҙәти күренеш. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) заманында уттан башҡа яҡтылыҡ тураһында кешеләр хәбәрҙар булмаған. **«Кешеләр өсөн Аллаһ** (ғибрәтле) **ҡиссалар килтерә. Аллаһ һәр нәмәнең асылын белеп тора»** һүҙҙәрен шулай аңларға кәрәк: был мөғжизәле техникалар – илаһи мәрхәмәт, улар өсөн беҙ Раббыбыҙға рәхмәтле булырға тейешбеҙ.

## Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) белгән

Ышандырырлыҡ, кәрәкле һүҙҙәр таба алыуына Искәндәр үҙе лә аптыраны. Хикмәт бабаһынан ул күп нәмәгә өйрәнгән икән. Класташтары иһә унның белеменә һәм үҙ фекерен ҡыйыу рәүештә яҡлай алыуына шаҡ ҡатты. Ошо көсөргәнешле мәлдә малай Хикмәт бабаһының янында булыуын, ярҙамын тойҙо, унның хуплауын тойҙо: «Афарин, Аллаһ ярҙам бирһен, мин һинең менән ғорурланам». Искәндәр итәғәтле итеп дауам итте:

– Хөрмәтле уҡытыусым, һеҙ, Ерҙең тартыу көсөн еңеп, асыҡ йыһанға сыҡҡан йыһан караптарын иҫкә төшөрҙөгөҙ. Ҡөрьәндә лә был турала аят бар: **«Атланып йөрөр өсөн, мәртәбәләр** (тантаналар) **өсөн аттарҙы, ҡасырҙарҙы, йөк ташыр өсөн хайуандарҙы яралттыҡ. Һеҙ әлегә белмәгән башҡа бик күп нәмәләрҙе яралтырбыҙ»** («ән-Нәхел (Бал ҡорто)» сүрәһе, 16/8). Үҙе биргән аҡылға таянып, кешеләр металдан һәм Ул бар ҡылған материалдарҙан автомобилдәр, поездар, караптар, һыу аҫты кәмәләре, самолеттар, йыһан ракеталары һәм тағы бик күп транспорт саралары төҙөйәсәктәрен Раббыбыҙ белгән. Буласаҡ барса асыштар тураһында белгән.

Ә хәҙер мин һеҙгә һорау биргем килә, уҡытыусым: замандан шул ҡәҙәр алда барған ғилем тупланған мөғжизәле Китап иҫкерә аламы? Шундай Китап төшөрөлгән Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) урта быуат кешеһе тип атай алабыҙмы? Киреһенсә, Ҡөрьән – Ҡиәмәткә саҡлы бөтә замандар өсөн тиңе булмаған ғилем сығанағы. Уҡытыусым, ғәфү итегеҙ, ошо көнгәсә һис кем Ҡөрьәндә хата таба алғаны юҡ, һеҙ ҙә таба алмаясаҡһығыҙ! Нисек кенә булмаһын, был йәһәттән һәр кем үҙ урынын белергә тейеш!

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ



АУЫР ҺОРАУҘАР 4


БЕҘ ҺӨЙӨКЛӨЛӘРЕБЕҘ МЕНӘН БЕРГӘ БУЛАСАҠБЫҘ 19


КЕШЕ ТЫУҘЫ 33


ЙӘНӘ БЕР МӨМКИНЛЕК 42


ДИҢГЕҘҘӘР АРАҺЫНДАҒЫ ПӘРҘӘ 52


БОЛОТТАР МЕНӘН БЕРГӘ ХӘРӘКӘТ ИТЕҮСЕ ТАУҘАР 66


ЕЛ ТУҘҘЫРҒАН СИҢЕРТКӘ ҺЫМАҠ 80


ЯЗА БИРЕҮСЕ ТАУЫШ 90


БАЛ ҠОРТТАРЫНЫҢ СЕРЛЕ ДОНЪЯҺЫ 102


ҺӨТ ҺӘМ БАЛ 114


ҠОШТАР ТЕЛЕ 124


ПЛАНЕТАНЫҢ КОНДИЦИОНЕРЫ 134


ЫШАНЫСЫҘ ӨЙ 144


ҮҘ УРЫНЫҢДЫ БЕЛ! 154

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ

# ДИНИ КИТАПТАР!




Книги можно заказать : +7-968-796-34-43
Веб-сайт : www.islamicbook.ru
yusupov575@mail.ru, mirznaniy571@mail.ru
Заказ книг из Москвы в Уфу : +7-917-042-04-64